# СӘЙӘХӘТСЕ СИНДБАД ТУРАҺЫНДА ӘКИӘТ



# САЙӘХӘТСЕ СИНДБАД ТУРАҺЫНДА ӘКИӘТ

БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
ӨФӨ — 1983

# „МЕҢ ДӘ БЕР КИСӘ"

## ТИҒӘН ҒӘРӘП ХАЛЫҠ ӘКИӘТТӘРЕНӘН



# Сәйәхәтсе Синдбад тураһында әкиәт

Руссанан Фәрит Иҫәнғолов
тәржемәһе



82.33
С 93

Рәссамы **АЛИШЕР ДИАНОВ**

С 93 Сәйәхәтсе Синдбад тураһында әкиәт. Өфө. Башҡортостан китап нәшриәте, 1983. — 160 бит.

«Мең дә бер кисә» тигән донъяға киң билдәле ғәрәп халыҡ әкиәттәренән ирекле тәржемә.

С $\frac{70803-216}{М121(03)-83}$ 154—83 4803020000 82.33

© Башҡортостан китап нәшриәте, 1983 й.

Әүәле бер заманда, Һарун әр-Рәшит солтан булған осорҙа, Бағдад ҡалаһында йәшәгән, ти, Синдбад исемле бик фәҡир бер кеше. Ул, башына ултыртып төрлө ауыр йөктәр ташып, үҙен һәм ғаиләһен саҡ-саҡ туйҙырып торған. Бына ҡыуырын барған эҫе көндә ул ғәҙәтенсә нимәлер күтәреп китеп бара икән; әмәлгә ҡалғандай, бер бай сауҙагәрҙең ҡапҡа төбөнә барып сыҡҡан. Ул тирә бик яҡшылап һеперелгән-таҙартылған, еләҫлек бөркөп, һауа талғын булһын өсөн, һыу бөркөлгән икән. Ҡапҡа йәнәшендә киң бер урындыҡ тора. Синдбад башындағы йөктө алып урындыҡҡа ҡуйған да ошонда әҙерәк хәл алып китмәксе булған.

Өй алдына күҙе төшкәс, йөк ташыусының иҫе киткән: унда ожмах баҡсаларына торош итерлек матур баҡса икән; ихатала һәр төрлө ҡолдар, хеҙмәтселәр, аҫрауҙар үҙ эштәре менән ҡайнашып йөрөй; өй батшалар йәки солтандарҙыҡы ише итеп ғәжәйеп зиннәтле нәмәләр менән биҙәлгән, ти. Унан, ауыҙ һыуҙарын килтереп, тәмле аш, иҫ киткес татлы эсемлектәрҙең хуш еҫтәре аңҡып тора икән.

Шунда Синдбад ҡарашын күктәргә төбәгән дә ялбарыулы тауыш менән былай тигән:

«Эй тәңрем! Ни ҡылһаң да, һинең ҡөҙрәтеңдән килә! Ниңә, шулай булғас, бәндәләреңде ер йөҙөнә төрлө-төрлө итеп яраттың икән? Берәүҙәр алдымдағы бынау йәннәт һарайҙарыңа биргеһеҙ йортта, тәмле-татлыны ашап-эсеп рәхәт сигә; минең ише бәғзеләр, көнө-төнө ал-ял белмәй эшләп тә, йәндәрен саҡ-саҡ аҫрап торалар, һәр төрлө мәхрүмлектәр, кәмһетелеүҙәр кисерәләр». Ул шулай тип күк тәңреһенә иңрәп өндәште лә артабан аһ-зарын сүрәләргә һалып әйтергә кереште:

Бәхетһеҙлек юлдашы мең-меңдәрҙең,
 Аһ-зар менән ғүмер һөрә күптәре;

Быуындары һыҙлай ауыр йөктәрҙән,
 Тамам ғәжиз була улар миктәүҙән.

Бәғзе йәшәй ерҙә рәхәттәр сигеп,
 Күтәрмәйсә бер ҙә михнәттәр йөгөн;

Йәне теләгәнен ашай ул, эсә,
 Йәннәт һарайҙарында хурҙар ҡоса.

Көллө әҙәм яралған бер тамсынан,
 Бер-беренә оҡшаш улар асылда.

Бәндәләрҙең берҙәйҙер яурындары,
 Тик тиң түгел тапҡаны-табынғаны.

Тәңрем, сығар беҙгә ғәҙел хөкөмөң!
 Ниңә төрлө ҡылдың әҙәм тоҡомон?..

Шул рәүешсә сүрәләрен әйтеп бөтөрөп, Синдбад, йөгөн башына күтәреп, был урындан ҡуҙғалып китергә генә йыйынғайны, бик ҡупшы итеп кейенгән, төҫкә-башҡа сибәр, йәш кенә бер хеҙмәтсе уның ҡаршыһына сығып баҫты. Ул йөк йөрөтөүсенең ҡулынан етәкләп алды ла былай тине: «Инеп, минең әфәндем менән һөйләшеп сыҡ әле. Ул һине саҡыра». Синдбад хеҙмәтсе артынан эйәреүҙән баш тартырға уйлағайны ла, баҙнатсылығы етмәне. Ул ҡулындағы әйберен ишек төбөндә торған икенсе бер хеҙмәтсе ҡарамағына ҡалдырҙы ла тәүгеһе артынан эскә табан атланы. Өй эсе үтә лә затлы йыһаздар менән бик бөхтә итеп йыйыштырылғайны. Унда байҙарса ҡиәфәтле, һиммәтле әфәнделәр ултырышҡан. Ялан кеүек ҙур бүлмә хуш еҫтәр таратыусы аҫыл гөлдәргә күмелгән. Ҡунаҡтар алдында төрлө-төрлө ҡиммәтле ашамлыҡтар, татлыларҙан-татлы емештәр таутау булып өйөлөп тора; һауыттарға иң яҡшы йөҙөмдәрҙән генә әсетелгән шәрбәт шараптар ҡуйолған. Кәйеф-сафа ҡорор өсөн унда һәммәһе лә бар: музыка ҡоралдары теҙелгән, беренән-бере сибәр кәнизәктәр бөгөлөп-һығылып бейергә төшөп китергә үҙ сираттарын көтөп тора.

Ә урта тошта айырата һиммәтле, айырата ихтирам эйәһе булған, инде сикә сәстәренә сал инә башлаған бер әфәнде ултырған; ул күрер күҙгә бик тә күркәм ҡиәфәтле, һомғол кәүҙәле, аҡыллы ҡарашлы кеше ине.

Йөк ташыусы Синдбад, ҡаушауынан ни ҡылырға белмәй, баҫҡан урынында ҡатып ҡалды. Ул үҙ алдына: «Ант итеп әйтәм, был йәннәт һарайы, моғайын, батшаныҡы йә иһә солтандыҡы-



лыр!» — тип уйланы. Шулай ҙа ул был өйҙәгеләргә һаулыҡ-сәләмәтлек, именлек, бәрәкәт теләп доға ҡылырға, уларҙың табандары тәңгәленә сүгәләп, ерҙе үбергә онотманы. Бынан һуң ул, үҙенә ни хөкөм яҙғанын көтөп, башын түбән эйгән хәлдә, сабыр ғына баҫып тороуында булды.

Йорт хужаһы уға ултырырға ҡушты. Синдбад күндәм генә ултырҙы. Хужа йәнә: «Рәхим итәһегеҙ!» — тип бик яғымлы ишара менән уны үҙенә яҡынырaҡ шылырға өндәне. Уның алдына телдәреңде йоторлоҡ тәмле-татлы аштарҙы мулы менән ҡуйҙылар. Синдбад туйып күңеле хушланғансы ашаны ла, һыйлаусыларға бик ҙур рәхмәт әйтеп, ҡулын-битен йыуып, тәһәрәтен яңыртты.

«Өйөбөҙҙөң түре — һинеке, ҡәҙерле ҡунаҡ. Иркенләп хөрмәт күр. Беҙгә исем-атыңды ла, кәсебеңде лә әйтеп, үҙең менән таныштыр, рәхим итеп!» — тине хужа тағы ла яғымлыраҡ, үтә кеселекле тауыш менән.

«Әй хөрмәтле әфәндем! Мин йөк ташыусы Синдбад атлы кеше булам. Әҙ генә хаҡҡа яллaнып, башыма һалып, төрлө нәмәләр ташыйым».

Йорт хужаһы йылмайҙы ла, уның һүҙҙәренә ҡаршы, былай тине: «Әй йөк ташыусы ғәзиз әҙәм балаһы! Минең исемемде лә бел инде. Ул һинекенә тап килә. Беҙ — аҙаштар икәнбеҙ ҙә баһа. Мин — сәйәхәтсе Синдбад булам. Мин һинең ҡапҡа төбөндә бая әйткән сүрәләреңде ҡабатлауыңды үтенәм. Уларҙы йәнә бер мәртәбә ишеткем килә».

Йөк ташыусы оялышынан ҡып-ҡыҙыл булып ҡыҙарынды ла былай тип яуап бирҙе: «Алла хаҡына мине ярлыҡай күрең! Михнәттәр сигеп, йон-

соғансы эшләү, аслы-туҡлы йәшәү бәндәне тупаҫландыра, аңын томалай. Минең әллә ниндәй килешмәгән һүҙҙәр һөйләүем дә бар».

«Тартынма, — тип тынысландырҙы уны йорт хужаһы, — һин хәҙер минең туғаныма әйләндең. Мин һине ҡәрендәшем итеп белермен. Миңә әлеге сүрәләреңде ҡабатлап әйтеп бир әле. Ҡапҡа төбөндә һөйләгән сағыңда улар миңә ифрат та оҡшағайны».

Йөк ташыусы, бай аҙашының һүҙен йыҡмайынса, сүрәләрен яңынан бер тапҡыр әйтеп сығырға мәжбүр булды. Тегеһе уны был юлы бигерәк тә оҡшатты.

«Эй йөк ташыусы ғәзиз туғаным минең, — тине ул, күңеле тулып, — минең тормошом да иҫ китерлек ваҡиғаларҙан тора. Әлеге дәрәжәмә ирешеп, ошонда рәхәт сигеп ултырғанға тиклем, минең башымдан ниҙәр генә кисмәне! Ҡайҙарҙа ғына булманым мин! Был бәхетте, тормоштағы был урынымды мин әҙәм ышанмаҫлыҡ ҡыйынлыҡтар кисереп, ҡот осҡос хәлдәрҙән ҡөҙрәт көсө менән генә ҡотолоп, тәҡәтһеҙ булып йонсоғас ҡына табыуға ирештем. Нимәләр генә күрмәне минең ғәзиз башҡайым был донъяла! Маңлайҙарыңа яҙмышың яҙғандан ҡасып ҡотолоп булмай икән. Миңә ете тапҡыр сәйәхәттә булырға тура килде. Етеһендә лә әҙәм ышанмаҫлыҡ ваҡиғаларға тарыным. Бына хәҙер мин һиңә шуларҙы бәян итеп сыҡмаҡсы булам».

# БЕРЕНСЕ САЙАХАТ



Әй хөрмәтле әфәнделәр, һеҙгә шул да мәғлүм булһын ки, минең атайым — сауҙагәр, әйтергә кәрәк, бик данлыҡлы, серегән бай сауҙагәрҙәрҙең береһе ине. Уның аҡсаһы һанап-хисаплап та бөтөрмәле түгел ине. Сабый ғына сағымда ул миңә барлыҡ аҡсаларын, ер биләмәләрен, ауылдарын ҡалдырып, фани донъяны ҡуйҙы.

Әҙерәк үҫә төшөп, иҫ йыйғас, мин быларҙың һәммәһен дә усыма йыйып йомарлап алдым да, әйҙә, тотондом типтереп йәшәргә. Ашағаным — донъялағы иң затлы аштар, эскәнем — ҡиммәтлеләрҙән дә ҡиммәтле шараптар, кейгәнем — шаһзадаларҙыҡы ише уҡтан-суҡтан бөткән ҡупшы кейемдәр. Үҙем шикелле бай йәш-елкенсәк менән дуҫлашып алдым. Әшнәләрем менән йәшәүҙең кәрәген бирәбеҙ генә. Был тормошом миңә бик оҡшай һәм миңә ул ғүмер баҡый шулай дауам итер һымаҡ тойолғайны. Шул рәүешсә ғәмһеҙлектә байтаҡ йәшәп ташлағанмын.

Шунан бер мәл килеп, ошо ғафиллығымдан ҡапыл тертләп уянып киткәндәй булдым, аңымды йыйҙым. Баҡтиһәң, атайҙан ҡалған мал ағын һыу кеүек аҡҡан да киткән, аҡса бөткәс, дуҫ-иш тә таралған, кеше-ҡара араһында дәрәжәм тамам кәмегән дә ҡуйған. Бына шулай һәммәһенән дә бер юлы ҡолаҡ ҡаҡҡанмын.

Ҡайғы-хәсрәттән тамам ғажиз булып, һушһыҙланып ултыра торғас, бер аҙҙан аңым асыҡланып, атайымдан ишетеп ҡалған Дауыт ибне Сөләймән хаҡындағы бер ҡисса иҫемә төштө. Шул әйтер булған икән, йәнәһе: «Өс әйберҙән яҡшыраҡ өс әйбер бар: тыуған көндән үлгән көн артығы-

булмаç борон, утрау тигәнегеҙҙән ҡасып ҡотола һалығыҙ. Һеҙҙең утрау тип алданғанығыҙ — утрау булмаған икән. Ул бит — шөкәтһеҙ ҙур балыҡ. Балыҡ диңгеҙҙә йөҙгән еренән йоҡоға талған да, уның өçтөнә ләм, ҡом ултырып, ағастар, ҡыуаҡтар үçеп сыҡҡан. Һеҙ усаҡтар яҡҡас, арҡаһы бешә башлағанын тойоп, балыҡ уянды, ҡыбырлай башланы. Ул хәҙер һеҙҙе алып, диңгеҙгә сумып китәсәк. Йәндәрегеҙ аяулы булһа, йәһәтерәк унан ҡасып ҡотолоу сараһын күрегеҙ...»

Мосафирҙар, капитандың оранын ишетеп, ығы-зығы килделәр, аш бешерергә тип үҙҙәре менән ҡоро ергә алып сыҡҡан ҡаҙан, табаларын, ғәйре әйберҙәрен бырағтырып ташлап, карапҡа ҡарай ҡабаланып йүгерҙеләр. Бәғзеләре карапҡа менеп өлгөрҙө, ҡалғандары өлгөрә алманы. Балыҡ ҡуҙғалды, яландай ҡойроғон бер уңға, бер һулға һелтәне лә, өçтөндә ҡалған бәхетһеҙ бәндәләрҙе алып, диңгеҙ төбөнә сумды. Мин карапҡа менеп өлгөрә алмаған бәхетһеҙҙәр араһында инем, шулар менән бергә үкерешеп ҡайнап торған тулҡындар иркендә ҡалдым. Тик ғүмерем бөтмәгән икән әле. Һыу өçтөндә тулғанып йөҙгән бер ағасҡа барып йәбештем. Был — караптағы кешеләр кер йыуырға тип утрауға үҙҙәре менән алып төшкән ҙур бер ялғаш булып сыҡты. Мин, бар көсөмдө йыйып, уға менеп атланып ултырҙым да ишкәк урынына аяҡтарымды тарбаңлатып ишергә керештем. Тулҡындар минең ялғашымды, әлбиттә, ҡаурый урынына ла күрмәй, уңға-һулға ырғытып, айҡап-сайҡап йөрөтөргә кереште.

Капитан, диңгеҙгә батып барыусыларға ыжлап та бирмәй, елкәндәрҙе күтәрергә ҡушты ла, ка-



рапҡа менеп өлгөргәндәрҙе алып, һәләкәт булған урындан алыҫыраҡ китергә ҡабаланды.

Шунда ла инде мин тере ҡалыуҙан тамам өмөт өҙҙөм.

Ҡараңғы төштө, төн булды, төн артынан йәнә көн тыуҙы. Һәм, ҡайһылай шатлыҡ, ел ыңғайына аға торғас, минең ялғашым ҡотороп үҫкән йәшел ағастарға сумған бер утрауҙың ярына барып яғылды. Уларҙың тарбағай ботаҡтары диңгеҙ өҫтөнә үк һәленеп төшөп йәйелешкән. Мин шуларҙың береһенә матҡып йәбештем дә, тулҡын ыңғайына ярға илтеп бәрелеп һәләк булыуҙан ҡотолоп ҡалып, тегеләргә аҫылына-аҫылына ҡоро ергә сыҡтым.

Аяҡтарым һыуҙа бүрәнә кеүек булып шешенгәйне. Улар балыҡтар тешләүенән сей ҡанға туҙышып бөткән. Тик улар менән артыҡ мауығып тора алманым. Йонсоуым шул дәрәжәгә еткәйне ки, баҫҡан еремдә ауҙым да, һушымдан яҙып, үлек кеүек, тәрән йоҡоға талдым. Шул рәүешсә бер тәүлек йоҡлағанмын да ҡуйғанмын.

Баш осомда ҡыҙарып ҡояш сыҡҡан. Уянып киткәс тә, үҙемдең яңы утрауҙа икәнем иҫемә төштө. Аяҡтарым әүәлгенән дә яманыраҡ булып шешкәйне. Шуға ҡарамаҫтан, мин ҡайҙа табан булһа ла барырға кәрәк тигән ҡарарға килдем. Әле мүкәйләп, әле түшемә ятып шыуышып, башым һуҡҡан яҡҡа юл алдым.

Утрауҙа емеш-еләк бик күп. Эсергә яраҡлы сөсө һыулы шишмәләр селтерәшеп ағып ята. Мин юл өҫтөндә туйғансы ашай-эсә килдем.

Бына шулай әллә нисә көн, әллә нисә төн барҙым да барҙым. Үлемдән ҡотолоу шатлығынан

йөрәгем елкенде. Боттарымдың шеше лә әкренләп ҡайта ине. Мин артабан төҙ баҫып, атлап барыр хәлгә килдем. Бик елле бер таяҡ һындырып алдым да, утрауҙың матурлығын хозур ҡылып, алға табан атлауымда булдым.

Бер мәл көтмәгән ерҙән ҡаршыма бер әҙәм заты килеп сыҡты. Ул миңә аптырап ҡарап торҙо-торҙо ла былай тип һораны: «Һин ҡайҙан? Был ерҙәргә нисек килеп сыҡтың?» «Эй әфәндем, — тип яуап бирҙем мин уға, — мин алыҫ илдәрҙән килгән бер бәхетһеҙ мосафирмын. Бәләгә тарып, диңгеҙ өҫтөндә яңғыҙ тороп ҡалғас, әжәлем етмәгәнгә, бер ялғаш тап итеп, шуға барып аҫылын-



дым. Ана шул ялғаш был утрауға килтереп түңкәрҙе лә инде мине».

Ошо һүҙҙәремде ишеткәс, теге әҙәм мине ашаты-эсерҙе лә: «Әйҙә киттек!» — тип, яҡшы атҡа атландырҙы. Көн барҙыҡ, төн барҙыҡ, ахырҙа батшаһы әл-Миһерйән тигән кеше булған бер ҡалаға килеп еттек. Юлдашым, батшаға инеп, минең хаҡта белдерҙе. Теге мине үҙе янына алып инеүҙәрен талап итте. Мин уның алдына тубыҡланып ихтирамымды күндерҙем, уға сәләмәтлек, оҙон ғүмер, бөтмәҫ бәрәкәт теләнем. Ул миңә аяғыма баҫырға ҡушты: «Рәхим итәһегеҙ!» — тине. Батша йәнә кем булыуымды, ҡайҙан килеүемде һорашырға кереште. Мин ҡабаттан төшөп, башымдан кискән шаҡ ҡатырлыҡ хәлдәрҙе һөйләп бирҙем. «Эй әҙәм балаһы, — тине ул, — оҙон ғүмер бирелгәнгә күрә генә, шул бәлә-ҡазанан именаман ҡотолоп ҡалғанһың икән. Иҫән булыуыңа шөкөр!..»

Шунан әл-Миһерйән, оло хөрмәт күрһәтеп, шәфҡәт менән солғап, мине үҙ ҡанаты аҫтына алды, яҡын кешеһе итте. Ул миңә ҙур дәрәжә биреп, диңгеҙ гаванының башлығы итеп ҡуйҙы. Мин, батшабыҙ биләмәһенең ярына килеп яғыла торған караптарҙы теркәп, иҫәпкә ала барҙым, батша ҡушҡан һәр йомошто еренә еткереп, оло ыҡтыматлыҡ менән үтәнем. Әл-Миһерйән һәр тарафтан миңә үтә лә мәрхәмәтле булды.

Шул рәүешсә мин был ерҙә байтаҡ йәшәнем. Тик ниндәй генә рәхәт тормош кисерһәм дә, ярға килеп туҡтаған һәр караптағы сауҙагәрҙәрҙән, Бағдад тигән ҡаланы беләһегеҙме, ул ҡайһы яҡта икән, тип, ҙур өмөт менән һораша торҙом. Белеүсе

булып, сауҙагәрҙәрҙең бәғзе береһе шул яҡтыҡы булып сыҡһа, карабына ултырып, тыуған еремә юл алырға эстән генә ниәтләй инем. Тик Бағдадты белеүсе лә, күреүсе лә юҡ. Мин, сит ерҙә оҙағыраҡ йәшәгән һайын, нығыраҡ яманһыулай барҙым.

Шулай байтаҡ ғүмер һөргәс, бер мәл әл-Миһерйән батша янына индем. Уның ҡашында бер төркөм һинд кешеләре ултыра ине. Мин уларға сәләм биреп, сәләмәтлек теләнем. Тегеләрҙән дә шуны уҡ ишеттем. Улар минең илем хаҡында һораштылар. Сират миңә уларҙыҡы хаҡында һорашырға етте. Улар һинд халҡының етмеш ике ҡатламға бүленгәнен әйттеләр. Шулар араһында иң хөрмәтле, иң ҡеүәтлеләренең береһе ғәскәриҙәр ҡатламы булған шәкириттар икән. Шәкириттар берәүҙе лә ҡыйырһытмай, кәмһетмәй, ти. Араларында брахмандар тип йөрөтөлгәндәре бигерәк затлы бәндәләр имеш тә баһа: шарап эсмәйҙәр, бары уйын-көлкө ойоштороп, музыка тыңлап, ирек асып ҡына йәшәйҙәр икән, йылҡы, мал-тыуар аҫрайҙар.

Мин әл-Миһерйән батшалығында, йәнә лә килеп, Касил тип йөрөтөлгән бер утрауҙы күрҙем. Унда төнө буйы шөңгөрҙәр сыңлаталар, барабан ҡағалар; бында бик яҡшы күңелле олпат кешеләр йәшәй икән. Ошондағы диңгеҙҙә мин ике йөҙ терһәк оҙонлоҡ балыҡ күрҙем. Хатта ябалаҡ башлы балыҡтар ҙа бар бында. Үҙем күргән барса хикмәттәрҙе, ғәләмәттәрҙе бәян итә башлаһаң, хикәйәтебеҙ бик оҙонға китер ине.

Утрауҙарға хозур ҡылып, ғәҙәтемсә таяҡҡа таянып яр буйлап йөрөп ятҡанда бер мәл яҡынлашып килеүсе бер ҙур карапты күрҙем. Карап

ҡаланың гаванына килеп туҡтағас, унда бик күп бай сауҙагәрҙәр тейәлешкәнен белдем. Ярға яғылғас, капитан елкәндәрҙе төрөргә бойорҙо; баҫмалар төшөрөлдө, матростар йүгерә-йүгерә карапта булған көллө нәмәне ҡоро ергә ташырға кереште. Мин, тейешенсә, уларҙың барыһын да теркәй барҙым.

Бушатынып бөткәс, капитандан: «Карабыңда тағы ла берәй нәмә ҡалдымы?» — тип һорайһы иттем. «Әйе, әфәндем, карабымдың трюмында тағы ла бер аҙ тауар бар-барлыҡҡа, тик бынан алыҫ диңгеҙҙә йөҙгәндә бер утрау тәңгәлендә уның хужаһы батып үлде. Бына шул әйберҙәр беҙҙең ҡул аҫтында ҡалды. Беҙ ул тауарҙы һатырға ла хаҡын Бағдадҡа алып ҡайтып, мәрхүмдең туғандарына бирергә уйлайбыҙ», — тине капитан.

«Был нәмәләрҙең хужаһының исеме кем ине?» — тип түҙемһеҙләнеп һораным мин. «Диңгеҙгә батып үлгән сауҙагәр сәйәхәтсе Синдбад атлы кеше ине», — тине капитан.

Ауыҙынан шул һүҙҙәрҙе ишеткәс, мин капитанға текләберәк ҡараным һәм, уны танып, аптырашымдан ҡысҡырып ебәрҙем: «Әй капитан, шуны бел, һин телгә алған тауарҙың хужаһы — мин. Сәйәхәтсе Синдбад мин булам. Башҡа сауҙагәрҙәр менән бергә мин дә теге хикмәтле утрауға төшкәйнем. Шунан һин беҙгә ҡысҡырҙың. Карапҡа менеп өлгөргәндәр ҡотолоп ҡалды, ҡалғандары батты. Мин дә батыусылар араһында инем. Әммә хоҙай миңә бөйөк мәрхәмәтен күрһәтеп, бер ялғаш ебәрҙе. Мин шуға атланып ултырып алдым да аяҡтарым менән ишергә керештем, ел һәм тулҡындар ярҙамында бына ошо утрауға килеп юлы-

ғыу бәхетенә ирештем. Әл-Миһерйән батшаның ярандары мине тап итеп, ошо ҡалаға алып килде. Батша, оло шәфҡәт һәм мәрхәмәт күрһәтеп, мине гаванға караптар теркәүсе итеп ҡуйҙы. Бәс, һинең карабыңдың трюмындағы тауарҙар минеке булып сыға инде...»

Һүҙҙәремде тыңлағас, капитан, нәфрәтләнеп: «Әҙәм балаһында намыҫ тигән нәмә булмаһа булмай бит!» — тине. «Эй капитан, ниңә улай әйтәһең? — тинем мин, рәнйеп. — Һин бит минең һөйләгәндәремде ишеттең». «Юҡ, һин миндәге тауарҙың хужаһы батҡанын белеп ҡалдың да уларҙы үҙ ҡулыңа алырға мәкер ҡораһың. Беҙ бит диңгеҙҙә башҡалар менән бергә Синдбадтың да батҡанын күреп торҙоҡ. Береһе лә ҡотолоп ҡала алманы. Шулай булғас, был әйберҙәр үҙеңдеке тип әйтергә нисек намыҫың етә?» — тине капитан.

«Улайһа, капитан, минең башымдан уҙғандарҙы ҡабатлап иғтибар менән тыңла. Шунан һин минең һүҙҙәремдең хаҡ икәненә инанырһың. Алдау бит — ике йөҙлө бәндәләр һөнәре». Шулай тинем дә тегеләр менән бергә Бағдадтан карапҡа ултырып- сығып киткән мәлдән башлап нимәләр булғанын бәйнә-бәйнә бәян итергә керештем; үҙҙәре менән бергә кисергән хәлдәргә ентекле туҡталдым, иҫемдә ҡалғандарының исемдәрен дә атап өндәштем. Тегеләр, ахыр килеп, һүҙемдең хаҡлығына инандылар, мине танынылар, үлемдән ҡотолоп ҡалыуым менән ҡотланылар: «Беҙ һинең әжәлдән ҡалып, яңы тормош менән йәшәй башларыңа һис өмөт тотмағайныҡ», — тиештеләр.

Шунан улар минең тауарҙарымды бөрәмекләп кире ҡайтарып бирҙеләр. Уларҙың һәр ҡайныһы-

на минең исемем яҙылған. Исмаһам, бер төргәге лә юғалмаған, исраф ителмәгән.

Мин уларҙы тағатып ҡараным да иң затлы, иң ҡиммәтлеләрен генә һайлап, матростарға йөкмәттем һәм батша һарайына илтеп, әл-Миһерйәнгә бүләк итеп бирҙем. Үҙемдең юғалған тауарҙарымдың, исраф ителмәй, теүәл көйөнсә ҡулыма ҡайтыуын, был бүләктәрҙең шулар араһынан бер өлөш булыуын әйттем. Батша, был хәлдәрҙе ишетеп, шаҡ ҡатты; ул минең намыҫлы кеше булыуыма тағы ла ныҡыраҡ ышанды.

Батша мине тағы ла ныҡыраҡ яратты, миңә ҡарата ихтирамы тағы ла артты. Бүләгемә ҡаршы ул да бик күп ҡиммәтле бүләктәр бирҙе.

Утрауҙа мин тауарҙарымды йүн генә хаҡтарға һатып, ярайһы ҙур килем йыйҙым. Был ҡалала, ҡайтҡас һатыр өсөн, күп кенә үтемле тауарҙар алдым, юлға аҙыҡ-түлек, кәрәк-яраҡ әҙерләнем; мосафир сауҙагәрҙәр кире юлланырға йыйынғас, уларҙы карапҡа тейәнем. Шунан оло шәфҡәте һәм ҡунаҡсыллығы өсөн батшаға барып сикһеҙ рәхмәттәремде белдерҙем дә уның биләмәһен ҡалдырып китергә фатихаһын алдым, үҙ илемде, туған-тыумасамды бик һағыныуымды әйттем. Батша фатихаһын бирҙе. Хушлашҡанда ул был ҡаланың тағы ла бик ишле тауарҙарын миңә бүләк итте әле. Уның менән айырылышҡас, мин карапҡа күтәрелдем дә, аллаға тапшырып, юлға тәүәккәлләнем.

Яҙмышыбыҙға шөкөр, бәхетебеҙ алға сыҡҡан икән, көнө-төнө йөҙә торғас, ел-ямғыр теймәй тигәндәй, имен-һау ғына Баһру ҡалаһына ҡайтып юлыҡтыҡ. Ҡалаға караптан бушатындыҡ та ун-

да бер аҙ торҙоҡ. Мин үлемдән ҡотолоп, үҙ илемә ҡайтып етеүемә һөйөнөп бөтә алманым.

Шунан һуң мәғлүм бик күп ҡиммәтле тауарҙарымды, кәрәк-ярағымды тейәп, донъя йөҙөндәге гүзәлдәрҙән-гүзәл Бағдад ҡалаһына ҡарай юл тоттом. Ниһайәт, ҡалалағы үҙебеҙҙең мәхәлләгә, үҙемдең өйөмә ҡайтып ауҙым. Дуҫ-иштәрем, туған-тыумасам күрергә йыйылды. Шунан мин үҙемә хеҙмәтселәр, аҫрауҙар, ҡолдар, кәнизәктәр һатып алырға керештем. Улар минең ҡарамағымда бик ишле булып китте. Шунан өйҙәр, ер биләмәләре, ғәйре мөлкәт һатып алдым. Улар әүәлге менән сағыштырғанда самаһыҙ күберәк булып сыҡты. Бәс, ҡулға байлыҡ ингәс, шунда уҡ дуҫ-иш тә табылды. Тегеләр, һин дә-мин, килеп-китеп йөрөй. Улар менән йәнә күңел асырға, ҡайғы-хәсрәтһеҙ типтерергә тотондом. Шул йыуаныстар эсендә ситят ерҙәрҙә ыҙа сигеп, тыуған илемә ҡайтырға зар-интизар булып, тилмереп йөрөгәндәрем, арыуталсығыуҙарым, ҡул менән һыпырып ташлаған һымаҡ, юҡҡа сыҡты. Элеккесә теләгән затлы кейемдәр кейәм, йәнем тартҡанды ашайым, эсәм, рәхәт сигеп көн итәм...

Бына шуларҙан ғибарәт минең тәүге сәйәхәтем. Әгәр бойорған булһа, барлыҡ ете сәйәхәтемдең икенсеһе хаҡындағы хикәйәтемде иртәгә һөйләрмен».

Шунан сәйәхәтсе Синдбад йөк ташыусы Синдбадты киске аш менән һыйланы ла уға йөҙ мыҫҡал алтын бирергә бойорҙо; «Үҙеңдең ғаҡыллы сүрәләрең менән һин бөгөн беҙҙең күңелдәребеҙҙе ғайәт тә күтәрҙең. Рәхмәт һиңә!» — тине. Йөк ташыусы ла үҙ сиратында бай аҙашына сикһеҙ рәх-

мәттәрен әйтте һәм, хужа биргән бүләкте алып, өйөнә ҡарай атланы. Ул тегенең йомартлығына хайран ҡалғайны, шатлығы эсенә лә һыймай ине.

Ул төнө буйы өйөндә рәхәт сигеп йоҡланы ла, таң атып йәнә көн тыуғас, кисә вәғәҙәләшкәнсә, сәйәхәтсе Синдбад өйөнә йүнәлде.

Тегеһе уны, ҡосаҡ яҙып, «Әйҙүк!» тә «Әйҙүк!» — тип ҡаршыланы, үҙ янынан иң хөрмәтле урынды бирҙе. Башҡа дуҫ-иштәре лә йыйылып бөткәс, ғәҙәттәгесә, алдарына бик мул һый, бик затлы шараптар килеп теҙелде. Мәжлестәгеләр рәхәт сигеп ашау-эсеү менән мәшғүл булдылар.

Шуның артынса, ҡунаҡтар хушланып алғас, диңгеҙсе Синдбад йәнә һүҙенә кереште:

# ИКЕНСЕ САЙАХӘТ



Бына шул рәүешсә йәннәт тормошо менән йәшәп ятҡан бер мәлдә башыма сит ерҙәргә сәйәхәт ҡылып, кинәнгәнсе донъя күреп, алыш-биреш итеп, байлығымды ишәйтеп әйләнергә тигән уй төштө.

Ахыр килеп, мин шул эшкә тәүәккәлләнем; бик күп аҡса түгеп, тауарҙар, сәйәхәт өсөн кәрәк-яраҡ һатып алдым, уларҙы төйнәштерҙем. Бик яҡшы туҡымаларҙан тегелгән ныҡлы һәм ҡупшы елкәнле ҙур бер яңы карапҡа күҙем төштө. Уға үтә лә затлы йыһаздар ҡуйылған, бик күп кешеләр тейәлгән.

Башҡа сауҙагәрҙәр менән ҡатарҙан мин дә уға үҙемдең төйөн-төргәктәремде тейәнем. Беҙ шул көндө үк юлға ла сыҡтыҡ. Ел ыңғайға иҫте, беҙҙең сәйәхәтебеҙ гел уңайға барҙы; диңгеҙҙән диңгеҙгә, утрауҙан утрауға күстек. Ҡайһы ғына ярға барып яғылһаҡ та, унда беҙҙе төркөм-төркөм менән сауҙагәрҙәр, ғәйре бай әҙәмдәр, батшалыҡтың юғары дәрәжәле кешеләре ҡаршыланы, улар беҙҙәге тауарҙарҙы һатып алды йә үҙҙәрендәгеләргә алмашты.

Юлыбыҙ ҡыйып баҡҡыһыҙ бер гүзәл утрауға барып төртөлгәнсе, сәйәхәтебеҙ бына шул рәүешсә дауам итте. Утрау емештәре һәлмәклегенән бөгөлөп төшкән һәр төрлө ағастарға, хуш еҫ аңҡытып ултырған гөл-сәскәләргә күмелгән. Ботаҡтан ботаҡҡа пырылдашып күсеп, ҡоштар кинәнешеп һайрай. Саф һыулы шишмәләр селтерәшеп аға. Тик унда, исмаһам, бер генә торлаҡ эҙәре лә, торлаҡтарҙа усаҡ көйрәтерлек бер генә әҙәм заты ла күҙгә салынмай.

Капитаныбыҙ карапты ошо утрау ярына килтереп туҡтатты. Мосафирҙар, ергә төшөп, ундағы матурлыҡтар менән хайран ҡалып хозурланырға керештеләр. Аллаға тапшырып, мин дә уларға эйәрҙем, бер шишмә буйына ағас күләгәһенә ял итергә ултырҙым; төргәгемде сисеп, хазинамда бар ризыҡты ҡапҡылап алмаҡсы булдым. Тирәяҡ бик күркәм, баш осомда салт-аяҙ күк, күңелемдә бер тамсы ла ғәм-хәстәр юҡ. Шунда мине серемгә тарта башланы. Талғын иҫкән еләҫ елгә, гөл-сәскәләрҙең иҫерткес хуш еҫенә ирәйеп, тәрән йоҡоға талғанмын.

Күпме шулай йоҡлағанмындыр. Бер мәл уянып китеп, әйләнәмә күҙ һалам. Әммә унда кеше заты түгел, ен-пәрей ғәләмәте лә күрә алманым. Баҡтиһәң, карап юлсыларын тейәгән дә, мине йоҡлаған хәлемдә ошонда ҡалдырып, диңгеҙгә сығып олаҡҡан. Исмаһам, бер генә сауҙагәр ҙә, матрос та мине иҫенә төшөрмәгән. Утрауҙа япаяңғыҙ торғанмын да ҡалғанмын.

Ә бит минең янымда бер генә нәмәм дә: ашайым тиһәм — бер валсыҡ ризығым да, эсәйем тиһәм бер йотом эсемлегем дә, бәғзе кәрәк-ярағым да юҡ. Ҡапыл йөрәгемде ҡара ҡайғы сорнап алды. Тамам күңел төшөнкөлөгөнә, өмөтһөҙлөккә бирелеп, үҙ-үҙемә былай тинем: «Ҡапҡан һайын ҡалъя эләкмәй. Теге саҡта башым бәләгә тарығанда, бәхетем өҫкә ҡалҡҡайны, миһырбан тулы күңелле кешеләр йәшәй торған утрауға барып юлыҡтым. Ундағы әҙәм балалары мин мосафирҙы шәфҡәт һәм хөрмәткә сорнанылар. Гел генә бәхет алдыма саптырып сығып тормаҫ бит. Был юлы тәҡдир миңә, моғайын, әжәл әҙерләгәндер.

Шунда тамам сабырлығымды юйып, өмөтһөҙлөккә төшөп, үкһеп-үкһеп иларға керештем; тыуған илемдә, йәннәт һарайҙарыңа биргеһеҙ үҙ өйөмдә кинәнеп, бер хәсрәтһеҙ йәшәмәйсә, ирекле көнөмдән ошондай ауыр, һәләкәтле сәйәхәткә сығып киткәнем өсөн үҙ-үҙемде аяуһыҙ битәрләп, үкендем дә сабындым. Йә инде, ашар-эсәремә юҡ инеме, йүнле кейемгә мохтаж инемме; аҡсам юҡ инеме лә, башҡаға ҡытлыҡ кисерә инемме?..

Йә инде, ниңә генә күңелем ашҡыныуына буйһоноп, гүзәл Бағдадымды ташлап, йәнә лә бер ауыр сәйәхәткә юлланыр булдым. Беренсе сәйәхәтемдә үлмәктән ҡөҙрәт көсө менән ҡотолоп ҡалыуым һис кенә лә һабаҡ булмаған икән миңә!..

Шулай тамам ғажиз булғас, ирекһеҙҙән аяғыма баҫтым да урынымда артабан сыҙашып ултырыр әмәлем ҡалмағас, утрау буйлап ары-бире йөрөнөргә керештем; йөрөй торғас, бер бейек ағас башына менеп, тирә-яғымды байҡамаҡсы булдым. Тик, үкенескә ҡаршы, әйләнәмдә, баш осомда зәңгәр күктән, сикһеҙ даръя булып йәйелгән диңгеҙҙән, ағастарҙан, ҡомлоҡтарҙан башҡа бер ни күрә алманым.

Нимәлер өмөт итеп, тағы ла диҡҡәтләберәк ҡарарға тотонғайным, ҡапыл алыҫта-алыҫта ниндәйҙер ап-аҡ нәмәкәй ялтырап күренде. Мин ағас башынан йылдам ғына төшә һалдым да шул яҡҡа кисекмәҫтән юлға сыҡтым. Барҙым, барҙым. Барып етһәм, ни күҙем менән күрәйем, был нәмә иңен-буйын-бейеклеген күҙ иңләмәҫлек ғәшиптән тыш ҙур бер йомро ап-аҡ йылтыр әйбер булып сыҡты. Мин уны мотлаҡ үҙенә күрә шулай йомролап, көмбәҙләп яһалған берәй төрлө торлаҡ йә

иһә һарайҙыр тип уйлағайным. Тик, әйләнәһен нисәмә әйләнеп сыҡһам да, унда бер генә ишеккә йәки тәҙрәгә ишара булырҙай уйым күрмәнем. Аптырағас, уның түбәһенә менеп ҡарарға ла самалағайным, тик ул кеше аяғы түгел, себен тайып төшөрлөк шыма булып сыҡты.

Мин шунда был ғибрәттең әйләнәһе күпме икән тип билгеләргә уйланым; үҙем әле баҫып торған ергә тамға һалдым да тегене түңәрәтеп аҙымлап киттем. Ни тиклем оҙон-оҙон баҫырға тырышһам да, әйләнәһе илле аҙым булып сыҡты.

Шул арала ҡояш байып, эңер төшөр мәл дә яҡынлаша башланы. Мин был йомаҡ кеүек серле ҡоролманың эсенә үтеп инер хәйлә эҙләп баш ватырға керештем. Һәм ҡапыл шул мәлдә күкте ниндәйҙер шомло ҡараңғылыҡ ҡапланы, ҡояш йөҙөн ниндәйҙер дәһшәтле ҡара болот күләгәләне. Шуға ғәжәпләнеп, башымды күтәреп ҡарауым булды, ҡотом алыныуҙан артыма ҡолап китә яҙҙым. Кәүҙәһе, шөкәтһеҙ киң, оҙон ҡанаттары менән ҡояшты, тотош күк йөҙөн ҡаплап, ғәшиптән тыш ҙур бер ҡош осоп килә ята ине.

Шул күренешкә шаҡ ҡатып ҡарап торған арала элегерәк кешеләрҙән ишетеп ҡалған бер нәмә иҫемә төштө. Сәйәхәттә күп йөрөгән әҙәмдәр ҡайһылыр бер утрауҙа рух тигән һуш киткес дәү ҡоштар йәшәй икән тип һөйләйҙәр ине. Йәнәһе, улар тырнаҡтары менән филдәрҙе тибеп эләктереп килтереп себештәрен туйындыралар имеш, ти.

Мин шунда был иҫ китмәле нәмәнең — рухтың йомортҡаһы икәнен белдем. Ярабби, ниҙәр генә юҡ донъяла!

Ул да булмай, рух тигән әлеге дәү ҡош йомортҡаһы өҫтөнә төштө лә, уны ҡанаттары менән ҡаушырып ҡосаҡлап, тәпәйҙәрен йөҙ аршынға һуҙып ебәреп, йоҡоға талды. Мин, йәһәт кенә бер фекергә килеп, башымдан сәлләмде тағатып алдым да уны арҡан кеүек итеп иштем; шул бау менән билемдән уратып алып, ҡоштоң аяғына нығытып бәйләнем. Үҙем: «Тотҡондағы шикелле, бынауында ҡаңғырып ултырғансы, ошолай тәүәккәлләгәнем мең артыҡ. Бәлки, рух мине кеше йәшәй торған, ҡала, ауылдар булған ерҙәрҙең береһенә илтеп ташлар», — тип уйланым.

Ҡош осоп киткән мәлдә ғафил булып ҡалмайым тип, мин был төндә бөтөнләй йоҡоһоҙ уҙғарҙым.

Таң атып, ҡояш сығыуға, ғәләмәт ҡош йомортҡаһынан ҡалҡынып, ҡолаҡ ярырлыҡ итеп бер ҡысҡырҙы ла, мине тәпәйенә эләктергән көйөнсә, һауаға күтәрелде, оҙаҡламай болоттарҙан да юғарыға олғашты. Шулай осто, осто ла, бер арала түбәнәйә барып, бер ҡалҡыу ергә төштө. Ул ултырыу менән, һиҙеп ҡала-нитә күрмәһен, тип шөрләп, мин сәллә-бауымды аяғынан ысҡындырып ала һалдым. Бәхетемә ҡаршы, рух тоймай ҙа ҡалды.

Сослоғом еткән икән. Сөнки сәлләмде тағатып, уның аяғынан ысҡыныуым булды, рух тырнағына ниндәйҙер бер табыш эләктереп, һис йыуанып тормай, яңынан күккә күтәрелде. Диҡҡәтләберәк ҡараһам, ул типкән нәмәнең ҡот алынмалы булып борғоланып-һырғаланып барған аждаһа-йылан икәнен таныным.

Аяғым ергә тейгән урындың тирә-яғы менән танышып сыҡмаҡсы булдым. Әйткәнемсә, мин бер ҡалҡыуҙа торам, ә уның әйләнәһенә күҙ күременә яланғас дала йәйелгән. Дала офоҡта түбәһенә әҙәм күҙе еткеһеҙ бейек тауға барып ялғана. Моғайын, уға менергә бер әҙәм балаһының да хәленән килмәйҙер.

Минең күңелемде йәнә бошонҡолоҡ, әсе үкенес биләп алды. Теге утрауҙа ҡалыуым биш артыҡ булған икән. Был ҡом сүленә ҡарағанда, уның сағыштырғыһыҙ яҡшы булыуын һөйләп тораһы ла юҡ. Унда мин, ашайым тиһәм, шәрбәте тамып торған емеш-еләк, эсәйем тиһәм, күҙ йәше кеүек тонoҡ шишмә һыуын тиҙ үк таба ала инем. Ә бында ағас, емеш, йылға тигәндәрҙең эҫәре лә юҡ. Яҙмышым шулдыр инде: бер бәләнән ҡотолорға ла өлгөрмәйем, ҙурыраҡ икенсеһенә тарыйым.

Мин, үҙемдә көс-ҡеүәт табып, урынымдан ҡалҡындым да уйһыу ерҙе ҡыҙырып йөрөргә керештем һәм аяҡ баҫҡан еремде абайлап, иҫем китте: ул һәр төрлө мәғдәнде[1], быяла һәм сынаяҡты киҫергә уйламай ҙа эшкинә торған ҡиммәтле алмас таштарынан ғибарәт ине. Был ҡоро һәм ҡаты ташты тимер ҙә, саҡма таш та алдыра алмай. Уны был ерҙән, ҡурғаш ташынан башҡа, бер ни менән дә уйып алып булмалы түгел. Өҫтәүенә, был уйпатта һәр төрлө йыландар мыжғып тора. Уларҙың иң ҡыҫҡа тигәне лә иң бейек ағас оҙонлоҡ булыр. Әгәр ошонда абайламаҫтан фил килеп сыҡһа, уйламай ҙа ҡабып йоторҙар ине. Әҙәм ышанмаҫлыҡ был дәү йыландар көндөҙҙәрен оя-

[1] Металл.



ларында боҫоп яталар ҙа һунарҙарына төндә генә сығалар, сөнки көндөҙ күҙгә салынғандарын рух йәки башҡа ҙур бөркөттәр тибеп алып китергә аңдып ҡына йөрөй.

Валлаһи тип әйтәм, мин был ергә килеп эләгеп, үҙемдең әжәлемде генә яҡынайттым. Ҡояш кискелеккә ауышҡас, уйһыуҙа үҙемә ҡуныр урын эҙләргә тотондом; әлеге шөкәтһеҙ йыландарҙан ҡан ҡалтырап ҡурҡыуҙан ашау-эсеү хаҡында ла оноттом. Бәндәнең йәне аяулы бит.

Оҙаҡламай бер мәмерйә янына барып сыҡтым. Тик уның ауыҙы үтә лә тар ине. Мин уның эсенә үрмәләп, шыуышып ҡына инә алдым. Мәмерйә ауыҙы тәңгәлендә эс яҡта ҙур таш ята. Мин, уны көс-хәлгә генә ҡуҙғатып, өң ауыҙын шуның менән томалап ҡуйҙым, үҙем: «Аллаға шөкөр, хәҙер миңә бер ҡурҡыныс та янамай!» — тип күңелемде тынысландырҙым.

Тик, ҡараңғыға күҙем эйәләшеүе булды — мәмерйә уртаһында йомортҡаларын баҫып ятҡан ҡот осмалы ҙур йыланды күрҙем.

Йылан мине күрмәне, һиҙмәне булһа кәрәк. Башын ҡалҡытып та ҡараманы. Мин яҙмышымды хоҙай иркенә тапшырҙым да аулағыраҡ бер мөйөшкә барып сүгәләнем.

Төнө буйы йоҡо төҫө күрмәнем. Мәмерйә ауыҙынан таң шәүләһе төшөү менән, өң ауыҙындағы ташты кире шыуҙырҙым да был йәһәннәм мәмерйәһенән тиҙерәк сығып олағыу яғын ҡараным. Йоҡоһоҙлоҡтан, ҡурҡыуҙан һәм асығыуҙан алйып, мин иҫерек кеше кеүек атлайым.

Шул рәүешсә уйһыу буйлап китеп бара инем, ҡапыл алдыма ҡайҙандыр ҙур ит киҫәге килеп

төштө. Тирә-яғыма күпме генә борғоланып ҡараһам да, бер генә йән эйәһе лә күрмәнем. Иҫем китеп торған арала күп илдәр гиҙгән, донъяны күп күргән сәйәхәтсе сауҙагәрҙәрҙән ишеткән бер хикмәт иҫемә төштө. Йәнәһе лә, ҡайҙалыр бар икән алмас ташынан торған тауҙар. Унда шул тиклем ҡот осмалы йән эйәләре йәшәй, ти, ки, уның янына барырға берәүҙең дә баҙнаты етмәй, ти. Әммә алмас ташы менән кәсеп иткән сауҙагәрҙәр шулай ҙа уға яҡынлашыу хәйләһен табалар икән. Һарыҡты һуйып тунайҙар ҙа итен киҫәктәргә турап, тауҙан уйһыулыҡҡа ырғыталар. Дымлы иткә шунда уҡ алмас киҫәктәре һырығып йәбешә, ти. Бөркөттәр, ҡоҙғондар, уйһыуға төшөп, шул иттәрҙе тибәләр ҙә, тырнаҡтарына элеп, әлеге түбәһе күренмәҫ тау түбәһенә алып менәләр имеш, ти. Ҡоштар менеп еткәс кенә, хәйләкәр сауҙагәрҙәр ҡырағай тауыштар менән аҡырышып ебәрәләр. Ҡурҡыштарынан ҡоштар табыштарын ташлап ҡасалар. Шуны ғына көткән сауҙагәрҙәр йәһәт кенә ябырылып, иттән алмас таштарын һыҙырып айырып алалар. Итте, әлбиттә, ҡош-ҡортҡа ҡалдыралар, ә алмасты бик ҡиммәткә һатыр өсөн илдәренә алып китәләр. Алмас яланына яҡын барыуҙың шунан башҡа бер әмәле лә юҡ икән, ти... Шул имеш-мимеште иҫкә төшөргәс, мин ит киҫәгенә яҡын килдем, уның тирәһендә ятҡан алмас таштарҙы ҡулдарым менән көрәп йыйып, кеҫәмә, ҡуйыныма, ҡуңыстарыма, хатта башымдағы сәлләмдең ҡатлауҙарына тиклем тыңҡыслап тултырҙым. Шул ике арала яҡында тағы ла бер ҙурыраҡ ит киҫәге күҙемә салынды. Мин ергә салҡан яттым да итте күкрәгемә, эсемә ҡаплап һалып, әлегесә

сәләм менән үҙемә ҡуша урап бәйләнем. Хәҙер инде ит, тауҙай ҡалҡынып, әллә ҡайҙан күҙгә салынырҙай булып ята ине.

Ҡапыл шунда ергә оло бер бөркөт ҡыйылып осоп төштө. Ул, күп уйланып тормай, итте тырнаҡтары менән маҡыны ла һауаға күтәрелеп тә китте; осто-осто ла, ниһайәт, теге бейек тауҙың иң түбәһенә барып ҡунды. Бөркөт ырғаҡтай суҡышы менән иттән бер киҫәкте умырып суҡып алырға ғына иткәйне, алыҫ түгел урындан ҡот алғыс тауыш менән яман аҡырып ебәргән кеше тауыштарын ишеттем; шуға өҫтәп ағасҡа ағасты шаҡылдатып һуға башланылар.

Бөркөт ҡурҡып тертләне, ҡанаттарын лап-лоп итеп һелтәп, күккә күтәрелде. Мин йәһәт кенә үҙемде сисеп алдым да ит янына аяҡ өҫтө баҫтым. Кейемем ҡарар ере ҡалмай ҡанға буялып ҡаҡашҡайны. Бөркөттө аҡырып ҡурҡытҡан сауҙагәр ит янына яҡынлашты, тик, мине күреүгә, шөрләүенән телдән ҡалды.

Шулай ҙа уның нәфсеһе ҡурҡыуынан көслөрәк булып сыҡты, күрәһең. Ул иткә яҡын барырға баҙнатсылыҡ итеп, уға ташланды һәм ҡомһоҙ рәүештә ҡабаланып әйләндергеләй башланы. Тик унда бер генә киҫәк алмас ташы ла таба алманы. Ул һемәйеүенән йоҙроҡлап башына һуҡты, сәстәрен йолҡорға керешерҙәй булды. «Эй тәңре, ниңә мине мәрхәмәтеңдән мәхрүм ҡылдың?!» — тип иңрәне.

Мин уның янына килдем дә: «Һин кем булаһың, был ерҙә ни шөғөл менән йөрөйһөң?» — тигән һорауын ишеттем. «Һин минән ҡурҡма, — тип тынысландырырға тырыштым мин уны, — мин

яман заттан түгелмен. Мин һинең кеүек үк бер сәйәхәтсе сауҙагәр инем. Тик ҡот осҡос бәләгә тарыным. Уны һөйләһәң дә, әҙәм ышанмаҫ. Бына шуның арҡаһында ла ошо яманаты сыҡҡан уйһыуға килеп ҡаптым. Борсолма, миндә һине ҡыуандырырлыҡ әмәл бар. Үҙем менән бик күп алмас киҫәктәре алып мендем бында. Ундайҙы төшөңдә лә күргәнең юҡтыр. Һиңә лә мул ғына өлөш сығарырмын. Ҡайғырма ла, ҡурҡма ла».

Теге әҙәм миңә сикһеҙ рәхмәттәрен белдерҙе, минең менән ихласланып һөйләшергә кереште. Беҙҙең һөйләшкәнебеҙҙе башҡа сауҙагәрҙәр ҙә ишетте. Улар ҙа тауҙан түбәнгә ит киҫәктәре ырғытып, үҙҙәренә яҙған табыштарын көтөп ултырған булған икән. Сауҙагәрҙәр яныма килеп етте, шаулашып сәләм бирҙе, үлемдән ҡотолоуым менән тәбрикләне, үҙҙәре янына саҡырҙы. Мин уларға үҙемдең икенсе сәйәхәтемдә тарыған иҫ киткес ваҡиғаларҙы, был уйһыуға нисек килеп эләгеүемде бәйнә-бәйнә һөйләп сыҡтым. Шуның артынса үҙем аҫылынып тау башына менгән ит киҫәгенең хужаһына вәғәҙә иткән миҡдарҙа алмас таштары бүлеп бирҙем. Улар, ғәйәт тә ҡыуанып, миңә ҡат-ҡат рәхмәттәр уҡының, иң изге теләктәр теләнеләр. «Бәхетең бар икән. Һин килеп төшкән урынға эләккән бер генә әҙәм заты ла тереләй кире сыҡҡаны юҡ ине әле быҒаса», — тинеләр. Улар бер генә хәүеф-хәтәр ҙә булмаған бик тә күркәм урында төн уҙҙырҙылар. Мин дә улар араһында инем. Йыландар төйәгенән имен-аман ҡотолоп, кешеләр йәшәй торған ергә кире сыға алыуыма һуң дәрәжәлә һөйөндөм.

Ҡояш сығыу менән, беҙ тау башлап юлға ҡуҙғалдыҡ. Түбәндә уйһыу ерҙә — һаман да шөкәтһеҙ йыландарҙың ҡымйышыуы күренеп тора ине.

Эй барҙыҡ, эй барҙыҡ, бара торғас, гүзәл утрауҙағы ҙур бер баҡсаға барып еттек. Унда камфара ағастары үҫә икән. Ағастарҙың һәр ҡайныһының күләгәһендә йөҙ кеше бер юлы ултырып хәл алырлыҡ. Берәйһе унан камфара алырға теләһә, ағастың олонон быраулап тишә икән дә камфара һутын ағыҙып ала икән. Һут шунда уҡ ҡуйырып, елем кеүек шыйыҡсаға әйләнә, ти. Бынан һуң инде ағас ҡорой һәм бары утынға ғына яраҡлы булып ҡала.

Утрауҙа тағы мөгөҙморон тигән ғәләмәт хайуандар йәшәй. Улар, беҙҙәге ҡәҙимге һыйырҙар һымаҡ, көтөүе-көтөүе менән утлап йөрөй. Мөгөҙморондар үлән менән туҡлана, тик улар һыйырҙан да, дөйәнән дә кәүҙәгә әллә нисә мәртәбә дәүерәк. Уларҙың башының ҡап урталығында ун терһәк буйы берҙән-бер мөгөҙҙәре һерәйеп тора. Уға кеше һүрәте төшкән.

Утрауҙа һыйыр нәҫеленән булған хайуандар ҙа бар.

Күп сәйәхәт итеп, күпте күргән диңгеҙселәр, сәйәхәтселәр тағы ла былай тип тә һөйләйҙәр: әлеге мөгөҙморон тигән януар, имештер, мөгөҙөнә тотош бер филде элеп йөрөй икән. Ҡыҙыу ҡояшҡа филдең майҙары мөгөҙморондоң күҙенә ағып төшә лә, теге һуҡырая имеш, ти.

Шунан мөгөҙморон яр буйына килеп ауа ла, уны моронона ҡаҙалған филе-ние менән рух тигән ҡош тибеп, күтәреп алып китеп, себештәрен туйҙыра икән, ти.

Был утрауҙа буйволдар ҙа бик күп йәшәй.

Унда мин алмас таштарын һаттым. Улар бик үтемле булды. Алмас таштарына урындағы сауҙагәрҙәр дихем һәм динар тип йөрөтөлгән аҡсалар түләне йәки үҙҙәрендәге тауарҙарға алмашты.

Шулай алыш-биреш итеп, ерҙән ергә, илдән илгә, ҡаланан ҡалаға күсә-күсә килә торғас, ахыр сиктә, беҙ Баһру ҡалаһына юлыҡтыҡ. Унда оҙаҡ та тормай, мин гүзәл Бағдадыма ҡайтып етергә ҡабаландым. Бына үҙ мәхәлләмә еттем, бына үҙ өйөмдөң тупһаһын аша атланым. Ә янымда күпме алмас ташы, күпме аҡса, күпме үтемле тауар! Туған-тыумасам, ҡәрендәш-ырыуым, дуҫишем, таныш-белешем күрергә йыйылды. Мин уларға бик күп бүләктәр тараттым. Фәҡирҙәргә мулы менән хәйер-саҙаҡа өләштем.

Күпме ыҙалар күреп, өйөмә имен-аман ҡайтып ауыу шатлығынан мин, ҡайғы-хәсрәт белмәй, типтереп йәшәргә керештем. Теләгән әҙәмдәр менән дуҫлашам, теләгәнемде кейәм, йәнем теләгәнде ашайым-эсәм. Ғазап сигеп йөрөгәндәрем башымдан тамам ел булып осто ла бөттө. Ашау-эсеү, уйын-көлкө араһында теләүселәргә үҙемдең башымдан кискән иҫ китмәле ваҡиғаларҙы һөйләйем. Сит-ят ерҙәрҙәге тормош, ундағы мөғжизәләргә уларҙың иҫтәре китә. Мине үлемдән ҡотолоп ҡалыуым менән тәбрикләйҙәр.

Бына икенсе сәйәхәтемдә башымдан үткәндәр ошоларҙан ғибарәт».

Диңгеҙсе Синдбад һүҙен шулай тамамланы ла мәжлестәгеләрҙе киске аш менән һыйланы, ә йөк ташыусы Синдбадҡа бүләккә йәнә йөҙ мыҫҡал алтын бирергә бойорҙо.

Өйөнә ҡайтҡас, йөк ташыусы үҙенең аҙашы сикһеҙ мәрхәмәтле диңгеҙсе Синдбад шәрәфенә бик бирелеп, бик оҙаҡ доға ҡылды. Төн уҙып, таң ҡыйылып, йәнә лә бер иҫ китмәле матур ҡояшлы көн тыуғас, йөк ташыусы Синдбад тороп, тәһәрәт алып, иртәнге намаҙын уҡыны ла, килешелгән буйынса, йәнә сәйәхәтсе Синдбадтың һарайына китте.

Ул, мәғлүм өйгә инеп, хужаны хәйерле иртә менән ҡотланы, уға һаулыҡ-сәләмәтлек, ырыҫ, йортона именлек, бәрәкәт теләне. Хужа уны яҡты йөҙ менән: «Рәхим итәһегеҙ!» — тип әйҙүкләп ҡаршыланы. Башҡалар йыйылғылағансы, улар икәүҙән-икәү көңөр-ҡаңғыр килеп ултыра торҙолар. Тегеләр килгәс, тәмле-татлынан ашанылар-эстеләр, уйнап-көлөп әҙерәк кәйеф-сафа ҡорҙолар ҙа хужаны тыңларға әҙерләнделәр.

Диңгеҙсе Синдбад һүҙгә кереште.

# ӨСӨНСӨ СӘЙӘХӘТ



Туғанҡайҙарым, хәҙер минең өсөнсө сәйәхәтем хаҡында хикәйәт тыңлағыҙ. Быныһы һеҙ ошоға тиклем ишеткәндәргә ҡарағанда ла ҡыҙығыраҡ, мөғжизәләргә байыраҡ.

Икенсе сәйәхәтемдән иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡас, шатлығымдан мин барса тормош кинәнестәрен кисереп, рәхәт сигеп йәшәй башлағанымды һөйләгәйнем инде. Кисә әйткәнемсә, сит ерҙәрҙән алып ҡайтҡан тауарҙарым бик күп аҡса килтерҙе. Юғалтҡан мөлкәтем бише-уны менән кире ҡайтты. Бына шулай Бағдадта бер талай ваҡыт, май эсендәге бөйөр кеүек, хәсрәтһеҙ йәшәнем.

Шул арала күңелем, иләҫ-миләҫ килеп, сәйәхәткә, донъя гиҙергә өндәй башланы. Мажараларҙы юҡһынып, йөрәгем һулҡ-һулҡ тибә. Һатыу-алыу, байлыҡ арттырыуға нәфсем ҡабара бара.

Һәм мин йәнә лә бер мәртәбә тыуған еремде, ғафил йәшәр төйәгемде ташлап китергә ниәт ҡылдым. Бик күп тауар, оҙон сәйәхәт өсөн ғәйре кәрәк-яраҡ һатып алдым, бөхтәләп төйнәштерҙем дә, уларҙы алып, Бағдадтан Баһруға йүнәлдем.

Мин, түҙемһеҙләнеп, йылға буйына барҙым. Унда ҙур бер карап күрҙем. Карапҡа бик күп сауҙагәрҙәр, башҡа юлсылар тейәлешкән. Һәммәһе лә иманлы, тәүфиҡле, гәҙел — йыйып ҡына әйткәндә, бынамын тигән һәйбәт кешеләр. Мин карапҡа ултырҙым. Беҙ, юлыбыҙҙың уң, тыныс, имен булырына өмөт итеп, яҙмышыбыҙҙы аллаға тапшырып, диңгеҙгә сыҡтыҡ. Диңгеҙҙән диңгеҙгә, утрауҙан утрауға, ҡаланан ҡалаға күсә-күсә, көн киттек, төн киттек. Көллө урында беҙҙе яҡты йөҙ, йылы һүҙ менән ҡаршыланылар; унда тауарҙа-

рыбыҙҙы һаттыҡ, яңыларын алдыҡ, кинәнгәнсе һыйланышып, уйын-көлкө, кәйеф-сафа ҡорҙоҡ.

Тик бер мәл диңгеҙ уртаһынан барғанда, дауыл ҡупты, тулҡындар ҡотороп ҡайнаша, бербереһенең өҫтөнә атлығып ташланыша башланы. Шунда, палуба ситенә баҫып, мәхшәр булып гөрләгән диңгеҙгә ҡарап барған капитаныбыҙ, шашҡан кеше һымаҡ, үҙенең башын йоҙроҡлап туҡмарға, һаҡалын йолҡҡоларға, кейемдәрен йыртҡыларға тотондо, үҙе йәнәсығына аҡырырға кереште.

«Эй капитан, һиңә ни булды?» — тип борсолошоп төпсөндөк беҙ.

Ул беҙгә былай тип яуапланы:

«Эй мосафир юлсылар! Дауыл ғәрәсәте беҙҙән көслөрәк булып сыҡты. Ул ҡоторған диңгеҙ уртаһында беҙҙе юлдан яҙлыҡтырҙы ла күрәсәгебеҙҙе күрһәтергә карабыбыҙҙы йөнтәҫ кешеләр тауы янына килтереп сығарҙы. Улар, әҙәм балаларына ҡарағанда, күберәк маймылға оҡшаған. Был йөнтәфиҙәр шул ҡәҙәре лә яуыз нәмәләр — хәҙергә әле улар ҡулына килеп ҡапҡан бәндәләрҙең ҡотолоп иҫән ҡалғандары юҡ. Йөрәгем һиҙә: беҙ һәммәбеҙ ҙә һәләк булдыҡ».

Капитаныбыҙ һүҙен тамамларға ла өлгөрмәне, карабыбыҙҙы энә төрткөһөҙ булып маймылдар уратып алды, улар аҫтында диңгеҙ күренмәй ҙә ине — бына улар ҡайһылай күп булып сыҡты, саранча тип торорһоң. Улар ҡоро ерҙе лә тултырғайны. Шунда уҡ карапҡа ла килеп тулдылар.

Беҙҙә ҡорал-яраҡ юҡ түгел ине, әлбиттә. Тик береһен генә үлтереүебеҙ булыр — улар шунда уҡ үҙебеҙҙе, бер ағзабыҙҙы иҫән ҡалдырмай, өҙгөләп

ташлар. Бигерәк ишле шул яуыздар. Ә бит, күп һанлылыҡ — батырлыҡтан да ғәйрәтләрәк, тигән һүҙ бар. Беҙ үҙебеҙҙе үлтерерҙәр тип бер ҡурҡһаҡ, ауырлыҡтар менән ҡулға төшөргән тауарҙарыбыҙ, ғәйре мөлкәтебеҙҙән ҡолаҡ ҡағырбыҙ, тип йәнә шөрләнек.

Был — ни кеше, ни маймыл түгел йән эйәләре донъялағы иң ҡәбәхәт йыртҡыстар имеш, ти ҙә баһа. Уларҙың тәнен сүбәк шикелле сәбәләнеп, ойошоп, ҡаҡашып бөткән ҡап-ҡара әшәке ялбыр йөн баҫҡан. Ҡарап тороуға ла ҡиәфәттәре ҡот осмалы. Уларҙың телен бер кем аңламай, нисек көн иткәндәрен бер кем белмәй. Сөнки был маймыл затлы әҙәмдәр донъялағы бер халыҡ менән дә аралашмай, дөм ҡырағай хәлдә йәшәй. Үҙҙәре бик ваҡ, ыбыр-сыбыр ғына, кәүҙәгә иң бейек тигәне лә дүрт ҡарыштан артмаҫ. Биттәре ҡап-ҡара, күҙҙәре имәнес һары...

Маймылдар караптағы арҡандар буйлап йыбырлап үрмәләнеләр, уларҙы тештәре менән сәйнәп өҙгөләнеләр; шулай итеп, карапты нығытып торған бер генә еп-ешеүҙе лә иҫән ҡалдырманылар. Карап ҡырынайҙы ла тегеләр йәшәгән утрауға — тау буйына барып ағылды. Ярға килеп төртөлгәс тә, маймылдар барса юлсыларҙы, сауҙагәрҙәрҙе тотоп ҡоро ергә сығарып быраҡтырҙылар; шунан карапты, ундағы бар булған әйберҙәре-ние менән, ҡайҙалыр алып олаҡтылар. Ул күҙҙән яҙғас, беҙ, ни ҡылырға белмәй, тәрән хәсрәткә сумдыҡ.

Бер нәмәһеҙ, тәғәм ризыҡһыҙ тороп ҡалғас, беҙ меҫкендәр, әжәлебеҙҙе көтөп, ни ҡылырға белмәй, утрау ҡыҙырып йөрөргә тотондоҡ; емеш-

еләк менән тамаҡ ялғаныҡ, йылғаларҙан ятып һыу эстек — бына шул рәүешсә һаман йән аҫрарға тырышыуыбыҙҙа булдыҡ.

Бына ошолай ҡаңғырышып йөрөгән арала, бер мәл утрау урталығында күҙебеҙгә бер өй һымаҡ ҡоролма салынды. Беҙ уға ҡарай йүнәлдек. Баҡтиһәң, был бик матур итеп семәрләп, баҙыҡ бағаналар менән нығытылып эшләнгән һарай булып сыҡты; ҡара ағастан юнып яһалған ҡапҡаһы ике яҡҡа шар асылып тора.

Беҙ шул ҡапҡаға барып инергә үҙебеҙҙә баҙнатсылыҡ таптыҡ. Ихатаһы бик киң. Урталағы һарайға бик күп ишектәр инеп китә. Ихата уртаһында оҙон урындыҡ тора. Уның тирәһенә һәр төрлө һауыт-һаба теҙелгән, усаҡ өҫтәренә ҡаҙандар аҫылған. Улар янында һөйәктәр өйөлөшөп ята.

Тик беҙ ишек алдында бер генә лә йән эйәһе күрмәнек, шуға аптырашып, шиккә төштөк. Шулай ҙа һарай янындағы урындыҡтарға ултырышып бер аҙ хәл йыймаҡсы булдыҡ; сөнки, утрау ҡыҙырып, ҡаңғырышып нисәмә көн йөрөй торғас, үтә лә ныҡ йонсоғайныҡ. Ултыра торғас, берәм-берәм серемгә талғанбыҙ, шул рәүешсә иртәнән алып ҡара кискә тиклем йән белмәй йоҡлағанбыҙ ҙа ҡуйғанбыҙ.

Шунда аяҡ аҫтыбыҙҙа ер һелкенгәнгә, ул да булмай, һауа ярырлыҡ геүләү ишетелеүгә тертләшеп уянып киттек. Ни күҙебеҙ менән күрәйек, һарайҙың бейек ишеген асып, иң оҙон ағас бейеклек ҡот осҡос бер дәү кеше сығып килә ята. Уның тәне ҡап-ҡара, күҙҙәре ҡуҙлы торонбаш кеүек баҙлай, ауыҙы ҡоҙоҡ ауыҙы киңлек булып өңрәй-



гән, дөйә ирендәре кеүек ирендәре күкрәгенә ҡәҙәре һалынып төшкән, ирененең ике ситенән ҡабан тештәре шикелле ике мөгөҙ-теше үткер булып тырпайышып тора; ҡолаҡтары, яҫы таш ярҡалары һымаҡ, яурынын ҡаплап ятҡан, тырнаҡтары — арыҫлан тырнаҡтарымы ни!..

Бына ошондай ҡот осмалы йән эйәһен күргәс, ҡурҡыуыбыҙҙан беҙ йән бирә яҙҙыҡ. Баҫҡан урыныбыҙ уйылып киттеме ни — йәһәннәмгә олағыштыҡ тип торабыҙ.

Уҫлаптай кәүҙәле әҙәми зат, һарайынан сыҡҡас, ишек алдындағы урындығына ултырып, әҙерәк ял итте; шунан ҡалҡынды ла беҙҙең янға килде. Сауҙагәр иптәштәрем араһынан, ни өсөндөр, мине һайлап алып, һыңар ҡулы менән генә ерҙән күтәрҙе; һис бер талымлап тормай, әйләндереп-әйләндереп, ҡапшап-ҡапшап ҡарарға кереште, гүйә лә инде, мал һуйыусы баҙарҙа ҡуй һайлай. Мин уның ҡулында шул ҡәҙәре меҫкен, бәләкәс булып күрендем, ҡурсаҡмы ни. Өҫтәүенә, ҡайғы-хәсрәттән, юл ғазаптарынан, аслыҡтан эшлектән сығып йонсоғайным, шыр һөйәккә ҡалып ябыҡҡайным. Ҡурҡыуҙан мин тағы ла йоҡараҡ, тағы ла кәгезерәк булып бөршәйгәйнем булһа кәрәк.

Ғифрит дәүмәле әҙәми зат, шуғалырмы, мин фәкирегеҙҙе ергә кире төшөрҙө лә бер иптәшемде, мине йәлпелдәтеп күтәргән шикелле үк күтәреп, ҡапшарға кереште. Уны ла оҡшатманы булды — ергә төшөрҙө. Шул рәүешсә барыбыҙҙы ла күтәреп, ҡапшап сыҡҡас, сират беҙ карабына ултырып килгән капитанға етте.

Ә ул киң яурынлы, көс-ҡеүәте ташып барған мыҡты кәүҙәле һимеҙ кеше ине. Әҙәм ашаусыға

капитаныбыҙ оҡшаны. Ул уны, мал һуйыусы ҡорбанын тотҡан шикелле, матҡып тотоп алды ла, ергә ятҡырып, муйынына баҫып, башын өҙөп ырғытты. Шунан ул, оҙон тимер шеш алып, капитан кәүҙәһенең үтәнән-үтә үңәсенән килтереп сығарҙы ла, ҡыҙыу итеп усаҡ яғып, уны ҡыҙҙырырға атламаға ҡуйҙы, шунан ит ҡурылып, тамам бешеп сыҡҡансы әйләндерҙе. Ҡурҙағы өлгөрөүенә тамам ышанғас, алпамыш уны ут өҫтөнән ысҡындырып алды, өҫтәлгә алдына һуҙып һалды ла, себеш-тауыҡты ботарлаған шикелле ботарлап, тәмләп һоғонорға кереште; бөтөнләй ашап бөтөрөп, һөйәктәрен мөнйөп ҡуймайынса туҡтаманы.

Әҙәм ҡиәфәтле ғифрит тап-таҙа итеп кимерелгән һөйәктәрҙе усаҡтағы ҡуҙ өҫтөнә ташланы ла, оҙон урындығына һуйлайып ятып, ер емерерҙәй булып, йыртҡыс кейектәй, ҡаты хырылдарға кереште. Ул төн уҙып, тамам яҡтырғансы уянмай йоҡланы. Шунан торҙо ла үҙ кәсебенә китте.

Уның инде үҙебеҙҙән алыҫта икәненә ышанғас, бер-беребеҙ менән һөйләшергә, яҙмышыбыҙ өсөн ҡайғырып, һығылып-түгелеп илашырға керештек. «Эй илаһым, әгәр беҙ диңгеҙгә батҡан булһаҡ, йә иһә теге йолҡош маймылдар тарафынан үлтерелгән булһаҡ, бында утлы ҡуҙ өҫтөндә ҡурылып бешерелеүгә ҡарағанда мең артыҡ булыр ине. Ниндәй генә гонаһтарыбыҙ өсөн ебәрелде икән беҙҙең ғәзиз баштарыбыҙға был ҡәҙәре ауыр яза?! Беҙгә инде был яҙмышыбыҙҙан уҙмыш бөтөнләйгә юҡ. Хатта бит, ҡыҙғанып, йыназабыҙҙа күҙ йәше түгеүсе лә булмаясаҡ...»

Шунан һуң беҙ урындарыбыҙҙан ҡалҡындыҡ та һарай ихатаһынан утрауға сыҡтыҡ, теге әҙәм

ашаусынан боҫоп ҡалыр урын эҙләй башланыҡ. Йәнәһе, берәй ышыҡ-тишектә йәшенеп ултырып астан үлеү усаҡ ялҡынында ҡурылыуға ҡарағанда еңелерәк.

Тик кискә тиклем эҙләһәк тә, боҫор урын тапманыҡ, ҡурҡыуыбыҙҙан йәнә һарай ишек алдына әйләнеп ҡайтырға мәжбүр булдыҡ.

Аҙ ултырҙыҡмы шулай, күптерме — ҡапыл аяҡ аҫтыбыҙҙағы ер ҡалтырана-тетрәнә башланы. Ул да булмай, теге алпамыш ҡара әҙәми зат ҡайтып инде, мәғлүм рәүештә тағы ла беҙҙе бер-бер артлы һәрмәп-ҡапшап ҡарарға кереште. Ахыр килеп, беребеҙҙең көрлөгөн ҡәнәғәтләнерлек тапты; уны ла капитаныбыҙ яҙмышына дусар итте. Тамағын туйҙырып, һөйәк-һаяғын ялап-яҫкап ҡуйғас, кисәгесә үк, урындығына һуҙылып ятып, тәрән йоҡоға талды; шулай, төнө буйы муйыны киҫелеп бөтмәгән һуғым малы шикелле, ғырылдығы сыҡты.

Ҡояш ҡалҡып, көн тыуғас, әҙәм ашаусы тағы ла үҙ юлына үҙ йомошо менән китте. Беҙ, түңәрәккә йыйылышып, хәбәрләшә, кәңәшләшә башланыҡ: «Ант итеп әйтәм, — тине беребеҙ, — әгәр хәҙер барып, диңгеҙгә ташланып, йәнебеҙҙе фиҙа ҡылһаҡ, был — әҙәм ашаусы мәлғүн тамағына инер өсөн ҡурҙаҡ булыуҙан мең артыҡ булыр! Бынан да яманыраҡ үлемде дуҫыңа түгел, дошманыңа күрһәтмәһен!»

«Юҡ, бына минең һүҙемде тыңлап ҡарағыҙ, — тине икенсе берәүебеҙ. — Беҙ был бәдбәхет ғифритте үлтереү сараһын күрәйек. Шулай итһәк, хаҡ мосолмандар йәнен һәләкәттән ҡотҡарған өсөн һәр ҡайһыбыҙ бөткөһөҙ сауаплы булыр».

«Әй туғанҡайҙар, бына минең һүҙемә лә ҡолаҡ һалып ҡарағыҙ, — тип һүҙгә керештем мин. — Әгәр ҙә был әҙәм аҡтығын юҡ итергә йыйынабыҙ икән, иң башта бынауында ятҡан бүрәнәләрҙе диңгеҙ буйына ташып, үҙебеҙгә карапҡа оҡшаған берәй нәмә этмәләргә кәрәк. Әҙәм ашаусы ғифритте теге донъяға оҙатыу әмәлен тапһаҡ, беҙ шуға ултырып, башыбыҙ һуҡҡан яҡҡа китә алабыҙ. Юғиһә, тәҡдиребеҙҙе көтөп, һаман ошонда ҡан ҡалтырап ултырырға ҡала. Хатта уны үлтерә алмаған сүрәттә лә, карап йә һалыбыҙ булһа, беҙ диңгеҙгә сығасаҡбыҙ һәм, унда батып булһа ла, әҙәм ашаусыға ҡурҙаҡ булыуҙан ғәзиз тәнебеҙҙе аяп ҡаласаҡбыҙ. Ҡотолһаҡ ҡотолоп ҡалырбыҙ, батып үлһәк — хаҡ мосолман өммәттәренсә шәһит китербеҙ. Йәнебеҙ ожмах түрҙәрендә булыр!»

«Валлаһи, был аҡыллы фекер!» — тип гөрләште барыһы ла.

Беҙ шулай килештек тә, ниәтебеҙҙе бойомға ашырырға керешеп тә киттек. Һарай алдындағы бүрәнәләрҙе яр буйындағы бер ышыҡ урынға ташып, бер-береһенә беркетеп бәйләп, һалға оҡшаған нәмә этмәләштерҙек. Шунан һарайға кире әйләнеп ҡайттыҡ.

Киске эңер төшөү менән, ҡәҙимгесә ер һелкенә башланы, шуның артынса кеше ашаусы ҡара ғифрит, ҡоторған эт шикелле ырылдап, торлағына ҡайтып инде. Ул кисәгесә, элекке көндәгесә беҙҙе күтәреп, һәрмәп-ҡапшап ҡарарға кереште; бөгөн дә беребеҙҙең көрлөгөнән ҡәнәғәт булып, шешләп ҡурып ашаны ла, урындығына һуҙылып ятып, күк күкрәгән тауыштар сығарып хырылдап, тәрән йоҡоһона талды.

Беҙ шуны ғына көтөп тора инек; оҙаҡҡа һуҙмай, эргәбеҙҙә һөйәүле торған ике тимер шеште алдыҡ та ҡыҙыу утта ап-аҡ булғансы ҡыҙҙырҙыҡ, уларҙы ҡыҫҡыс менән ҡыҫып тотоп, теге яуыз янына барҙыҡ. Ә ул ыжламаны ла, һаман ер ярырҙай хырылдап йоҡо һимертеүендә булды. Хоҙайға тапшырып, беҙ теге ҡыҙған шештәрҙе ҡапыл ғына бер юлы уның күҙҙәренә ҡаҙаныҡ. Ҡаҙандай күҙҙәр шунда уҡ бызырлап ҡайнап, эскә батып һүнде. Ғифрит ҡолаҡ ярырлыҡ тауыш менән аҡырып ебәрҙе. Ҡурҡыуыбыҙҙан йән бирә яҙҙыҡ. Тома һуҡыр ҡалған әҙәм ашаусы урынынан ырғып торҙо ла, һәрмәнеп, беҙҙе эҙләй башланы. Ә беҙ уның ҡулдарынан әле уңға, әле һулға янтайып, ҡасып ҡотола торабыҙ. Һуҡыр ҡалған был уҫлаптай йән эйәһе күҙе әрнеүҙән шул ҡәҙәре лә ярһығайны ки, беҙ инде унан ҡотолоуҙан өмөт өҙөр сиккә еттек.

Әмәлен тура килтереп, бер мәл беҙ, янтайышып, һарай ҡапҡаһынан тышҡа сығыуға ирештек. Тик ғифрит тынысланманы, үкерә-баҡыра, һәрмәнеп-ҡарманып, беҙҙе эҙәрләүендә булды. Уның үкереүенән һәм лап-лоп атлауынан ер, убылып китерҙәй булып, тетрәп торҙо.

Бер заман һәрмәнә-һәрмәнә ул беҙҙе уҙып китте. Беҙ уның артынан төштөк. Бер ни тиклем араууҡҡа әҙәм ашаусы ҡайҙалыр олағып, юғалып торҙо. Беҙ унан ҡотолдоҡ тип тә уйлағайныҡ инде. Тик шатлығыбыҙ көн элгәрерәк булған икән. Оҙаҡ та тормай, ул үҙенән дә дәүерәк, үҙенән дә яманыраҡ ҡиәфәтле бер ҡатынды эйәртеп килә ине. Уны күреүгә, ҡурҡыуыбыҙҙы һөйләп кенә аңлатмалы түгел. Ҡайҙалығыбыҙҙы шәйләп ал-

ғас, улар беҙгә табан йән-фраман йүгерергә керештеләр. Шул ике арала беҙ һалыбыҙҙы диңгеҙгә этеп төшөрөп, әҙме-күпме йөҙөп китергә өлгөрҙөк.

Шунда тегеләр асыуҙарынан яр буйындағы ҡая таштарҙы умырып алып, беҙҙең өҫкә яуҙырырға тотондолар. Күптәребеҙ йә таш тейеүҙән, йә диңгеҙ төбөнә китеп һәләк булды. Бары хәҙергә әжәлдәре етмәгән өсәү генә тороп ҡалды: ике иптәшем дә мин.

Был әҙәм ашаусы ғифриттәрҙән ҡотолғас, һалыбыҙ менән диңгеҙ иркенә бирелеп, көн йөҙҙөк, төн йөҙҙөк һәм көндәрҙең береһендә кискә табан бер ярға барып яғылдыҡ. Ҡайҙа килеп юлыҡҡаныбыҙҙы ла белмәйенсә, сиктән сығып йонсоған



хәлдә, баҫҡан урыныбыҙҙа ауып, тәрән йоҡоға талдыҡ.

Ниндәйҙер бер яман ҡыштырлауға тертләп уянып китһәм, ни күҙем менән күрәйем, ҡот осҡос ҙур бер аждаһа борғолана-һырғылана яныбыҙға килеп еткән дә юлыбыҙҙы бүлеп ятҡан. Ул да булмай, теге бер иптәшемде ҡармап алып, яурынына тиклем ауыҙына ҡапты, шунан кәүҙәһенең ҡалған өлөшөн дә һоғоноп ҡуйҙы. Беҙ бары аждаһаның ҡарынында теге меҫкендең ҡабырғалары шытырлашып сәрпәкләнгәнен генә ишетеп торҙоҡ. Ә аждаһа, бер ни булмағандай, ыжламай ҙа үҙ юлы менән китте.

Был хәлгә шаһит булып, ғажиз ҡалып торҙоҡ та, аңдарыбыҙға килгәс, иптәшебеҙ өсөн ҡайғырыша, үҙебеҙҙең аяныслы тәҡдиребеҙ өсөн һуң дәрәжәгә етеп борсолоша башланыҡ.

«Харап бит эш,—тинек беҙ.— Береһенән-береһе әшәкерәк үлем беҙҙе аҙым һайын һағалап ҡына тора. Әҙәм ашаусы ҡара алпамыштан ҡотолоуыбыҙға иртәрәк шатланғанбыҙ икән. Унан да имен-һау ҡалдыҡ, диңгеҙгә лә батманыҡ, ә бына был яуыздың һоғоноп йотоуынан нисек үҙебеҙҙе аярға?»

Аптырағас, беҙ урыныбыҙҙан ҡуҙғалдыҡ та утрау буйлап йөрөргә, осраған емеш-еләк менән ризыҡланырға тотондоҡ; һыуһаһаҡ, йылғаларҙан ятып һыу эстек. Бына кис тә яҡынлашты. Ошо саҡта беҙ алдыбыҙҙа бик бейек бер ағас күрҙек. Шунда менеп, ҡунмаҡсы булдыҡ. Миңә юғарыраҡтағы ботаҡ эләкте. Иптәшем аҫтараҡ ине. Шәфәҡ байып, ҡараңғы төшкәс, аждаһа, беҙҙе аңдып, артыбыҙҙан килеп еткән. Ул, иң оҙон ағастан да

оҙонораҡ кәүҙәһен борғоландырып, бер уңға, бер һулға ҡайырылып ҡараны ла, ағасҡа ҡушып ишелгән һымаҡ, уның олонон кәүҙәһе менән уратып, юғарыға күтәрелә башланы. Минән түбәнге ботаҡта ултырған иптәшем тәңгәленә ҡоҙоҡтай ауыҙы еткәнсе, ул шулай шылышып үрмәләне лә үрмәләне; шунан теге бахырҙы бер һоғоноуҙа йотоп та ебәрҙе. Мин яуыздың ҡарынында һуңғы юлдашымдың һөйәктәре шытырлап сәрпәкләнгәнен генә ишетеп ҡалдым.

Аҙаҡ аждаһа яй ғына итеп ағастан шылышып төштө лә үҙ юлы менән китте. Ә мин тәнөмдөң ҡалған өлөшөн ағас башында ҡалтыранып уҙғарҙым. Ҡурҡыуымдан ни үле, ни тере түгел хәлдә инем. Таң ҡыйылып, ҡояш сығып, яңы көн тыуғас, мин ағастан төштөм дә яр буйына киттем. Диңгеҙгә ташланып, батып үлеп, был ғазаптарҙан бер юлы ҡотолоу ине бар уйым. Тик әҙерәк һыуына төшкәс, ниәтемдән кире ҡайттым. Шулай ҙа ғүмер тигәнең бик ҡәҙерле нәмә икән.

Ә тере әҙәм балаһының башына аҡыл килә бит ул. Шунда яр буйында бира-тара килеп аунашып ятҡан ағас ярҡалары араһынан яраҡлыларын ғына һайлап алдым да үҙемде уратып бәйләргә керештем: аяғыма арҡыры бәйләнем, башыма арҡыры бәйләнем, эсем, аяғым буйлатып нығытып бәйләнем, шул рәүешсә арҡамды ла тотош ҡаплап, үксәмә тиклем үк еткереп бәйләнем. Шулай итеп, ныҡлы ҡалын ағас әрйә эсендә торҙом да ҡалдым. Үҙемде хәүефһеҙләндергәс, бүлмәләге кеүек тойҙом.

Ҡәҙимгесә, төн еткәс, әлеге мәлғүн аждаһа, аңдып алып, минең эргәмә шыуышып килә баш-

ланы. Яҡын килгәс тә, байтаҡ ғүмер аптырап ҡарап торҙо. Сөнки мине инде тиҙ генә һоғоноп йоторлоҡ түгел.

Аждаһа, тирә-яғымдан әйләнгеләп, мине ҡармап алыр ярыҡ эҙләне. Ҡурҡыуымдан тын да алмай башланым. Теге яуыз әле яҡын уҡ килә, әле алыҫтанырак барып ҡарап тора. Тик күпме генә хитланһа ла, мине ағас ҡумтамдан айырып алыр әмәлен таба алманы. Аждаһа кис ҡояш байығандан алып иртән ҡояш сыҡҡанға ҡәҙәр тирәмдә әйләнде лә тулғанды. Бары тамам яҡтырып, көн тыуғас ҡына, мәкер-уйынан төңөлөп, үҙ юлы менән китте. Ул миңә бик ныҡ хаслашҡан, ярһыған сифатта ине.

Ә мин иһә, шатлығымдан ни ҡылырға белмәй, йәһәтерәк эстән бауҙарҙы сисеп, үҙемде ағас ҡумтамдан азат иттем. Шунан, ҡотолоуҙың берәй төрлө әмәле сыҡмаҫмы икән тип, тәрән уйға сумып, утрау ҡыҙырып йөрөргә тотондом. Яр буйына барып сыҡҡайным, алыҫта, диңгеҙ эсендә, тулҡындар иркенә сайҡалған бер карап күреп ҡалдым.

Ҙур бер ботаҡ һындырып алдым да уны баш осомда болғарға, яу һалып ҡысҡырырға тотондом. Караптағылар мине күргәндәр. «Был нindәй йән эйәһе икән? Бәлки, ҡазаға тарыған берәй әҙәм балаһылыр», — тигән фекергә килгәндәр.

Ниһайәт, карап ярға яҡын килде; минең ысынлап та оло ҡазаға тарыған мосафир икәнемә ышандылар, караптарына алдылар. Улар төпсөп һорашырға керештеләр. Мин башымдан ниҙәр кискәнен, нindәй бәлә-ҡазаларға төшкәнемде, уларҙан ни әмәлдәр менән ҡотолоп, йырып сыҡҡанымды — береһен дә ҡалдырмай, бәйнә-бәйнә

һөйләп бирҙем. Сауҙагәрҙәр һүҙҙәремә хайран ҡалды.

Минең инәнән тыума шыр яланғас ҡалғаным мәғлүм инде. Иң башта улар мине бер ҡаттан кейендереп ташланылар, шунан алдыма ашанты ҡуйҙылар. Мин буйтым ашаным. Тәмле шишмә һыуҙары эсеп, һыуһынымды ҡандырҙым. Күңелем ауыр ғазаптарҙан тамам тынысланып, йән рәхәтлегенә бирелдем. Тағы ла бер мәртәбә күҙемә аҡырайып ҡарап торған үлемдән ҡотолоуыма шатлығымдың сиге булманы. Тора торғас, аһ-зар кисереп, тере ҡалыуҙан бөтөнләй өмөт өҙөп, ҡаңғырып йөрөгәндәрем ҡасандыр күргән ҡурҡыныс төш кеүек кенә тойола башланы.

Бәхетебеҙгә ҡаршы, ел ыңғайҙан иҫте. Карап, елкәндәрен киреп, алға барҙы ла барҙы. Бер заман көндәрҙең бер көнөндә әс-Сәләхит тигән бер утрауға яҡынайҙыҡ. Капитан карапты шуның янында туҡтатмаҡсы булды. Барса сауҙагәрҙәр ярға сыҡтылар, тауарҙарын бушаттылар һәм һатыу-алыу менән шөғөлләнергә керештеләр.

Шунда карап капитаны, миңә мөрәжәғәт итеп, былай тине: «Тыңла минең һүҙҙәремде! Эй меҫкен сит ил кешеһе, фәҡир юлдашыбыҙ беҙҙең! Һин беҙгә үҙеңдең бик ауыр ғазаптар кисереүеңде, нисәмә мәртәбә үлемдән ҡалыуыңды һөйләнең. Минең һиңә нисек тә файҙалы булғым, үҙ илеңә ҡайтып етеүеңә булышҡым килә. Бәлки, минең һаулығыма доғалар ҡылырһың...»

«Рәхмәт яуһын һиңә, изгелекле кеше! Минең доғаларым — һинең өсөн!» — тинем әүәҫ кенә.

«Шул мәғлүм булһын һиңә, бәхетһеҙ мосафир: беҙҙең менән бер сәйәхәтсе юлға сыҡҡайны. Тик,

үкенескә ҡаршы, беҙ уны юғалттыҡ. Үлеме ул, тереме — бер генә хәбәрен дә ишеткәнебеҙ юҡ. Мин һиңә уның төргәктәрен тапшырмаҡсы булам. Һин ошо утрауҙа уларҙы һат та алған килемде үҙеңдә һаҡла. Хеҙмәтең өсөн беҙ һиңә хаҡ түләрбеҙ. Ә тауарҙы һатҡан аҡсаларҙы Бағдадҡа алып ҡайтырбыҙ ҙа, теге мәрхүмдең туған-ырыуы ҡайҙа йәшәгәнен һорашып белеп, ҡалған тауарын һәм һатылғандарының хаҡын уларға ҡайтарып бирербеҙ. Бына шул эшкә тотонорға ризалыҡ бирһәң, хәҙер башҡалар менән утрауға сыҡ та сауҙа эшенә кереш».

«Әмерегеҙ баш өҫтө, мәрхәмәтле әфәндем! Һеҙҙең һүҙҙе тыңламайым буламы һуң? Һеҙ бит — мине үлем тырнағынан йолоп ҡалыусы. Мәрхәмәтегеҙ өсөн ғүмерем буйы тын алған һайын рәхмәттәр уҡыһам да, аҙ булыр».

Шунан һуң капитан әлеге тауарҙарҙы яр буйына ташып, уларҙы миңә тапшырырға әмер бирҙе.

Ошо эште башҡарғанда, караптағы мөлкәтте теркәй барыусы капитандан былай тип һораны: «Эй капитан, матростар менән йөк ташыусылар ярға ниндәй тауарҙар ташый ул? Уларҙы ҡайһы сауҙагәр исеменә яҙырға?»

«Был нәмәләрҙе, сәйәхәтсе Синдбадтыҡы, тип теркә. Ул юлға беҙҙең менән бергә сыҡҡайны. Тик, бер утрау тәңгәлендә батып ҡалып, был көндәрҙе күрә алманы, — тине капитан. — Беҙ был сит ил кешеһенә уларҙы һатып, аҡсаһын үҙебеҙгә килтереп биреүҙе ышандырҙыҡ. Аҙаҡ түккән хеҙмәте өсөн килемдең бер өлөшөн уға хаҡ рәүешендә түләйәсәкбеҙ ҙә ҡалғанын үҙебеҙ менән Бағдад ҡалаһына алып ҡайтмаҡсыбыҙ. Эйәһен тапһаҡ, уны

үҙенә ҡайтарып бирербеҙ, тапмаһаҡ, туған-тыумасаһына тапшырырбыҙ».

«Уйығыҙ бик һәйбәт, ниәтегеҙ изге», — тине тауарҙар теркәп тороусы.

Капитандың ошо һүҙҙәрен ишеткәс, үҙ алдыма былай тип уйлап алдым: «Бәй, сәйәхәтсе Синдбад тигәндәре мин үҙем булып сығам да баһа. Валлаһи, мине теге ваҡытта батҡан тип иҫәпләгәндәр икән».

Сауҙагәрҙәр алыш-биреш хаҡында көңгөр-ҡаңғыр килеп, караптан бушатынышып, үҙ юл-



дары менән киткән арала, мин ауыҙымдан бер өн сығармай түҙҙем-түҙҙем дә, улар таралышып бөткәс, капитан янына ҡабат килеп былай тинем: «Әй әфәндем минең! Үҙегеҙ һатырға тип миңә ышандырып тапшырған тауарҙарҙың хужаһының кем булғанын миңә йәнә лә бер мәртәбә асыҡ ҡына итеп аңғартып бирегеҙ әле. Һатҡанда мин уларҙың кем мөлкәте икәнен белеп һатайым».

«Мин уның баймы, ярлымы, юғары дәрәжәле кешеме, түгелме икәнен асыҡ ҡына белмәйем. Бары миңә уның сәйәхәтсе Синдбад атлы әҙәм булыуы ла Бағдад ҡалаһынығы икәне генә мәғлүм, — тип яуапланы капитан. — Беҙ бер утрау тапҡырында туҡталыш яһағайныҡ. Унда бик күп халҡыбыҙ батып һәләк булды. Синдбад тигәнебеҙ ҙә шулар араһында ине буғай. Уның хаҡында беҙҙә ошо көндән башҡаса бер мәғлүмәт тә юҡ».

Мин шунда, артабан да сыҙашыр әмәлем ҡалмай, ҡысҡырып уҡ ебәрҙем: «Әй изге күңелле капитан, шуны бел, сәйәхәтсе Синдбад — мин ул! Мин батманым. Иҫеңдәме, һин теге утрауҙың ярына туҡталырға әмер биргәс, башҡалар рәтендә, аҙыҡ-түлегемде алып, мин дә ҡоро ергә сыҡҡайным. Шуларҙан ауыҙ итеп, тамағымды ялғағас, мине серемгә тарта башланы. Ағас күләгәһендә тәрән йоҡоға талғанмын. Уянып китһәм, янымда бер әҙәм заты ла юҡ. Карап та ғәйеп булған. Был мөлкәт, был тауарҙар — минеке. Әгәр ҙә был карапта алмас таштары менән һатыу итеүселәр булһа, улар танып. Сөнки улар мине алмас тауында булған сағымда осратҡайны. Улар минең ысынлап та сәйәхәтсе Синдбад икәнемде тәсдиҡләп әйтеп бирерҙәр. Мин уларға үҙемдең башымдан уҙ-

ған хәлдәрҙе, шул имләнән һеҙҙең мине әлеге утрауҙа онотоп ҡалдырғанығыҙҙы ла бәйнә-бәйнә һөйләгәйнем. Бына шул мосафир мин үҙем булам бит инде».

Был һүҙҙәрҙе ишетеүгә, сауҙагәрҙәр, башҡа юлсылар мине уратып алды. Бәғзеләре һөйләгәнемә ышанды, икенселәре алдаҡсыға иҫәпләне. Шул ваҡыт, алмас тауы хаҡында һүҙ сыҡҡанын ишетеп, бер сауҙагәр, ултырған урынынан ҡалҡынып, яныма килде һәм былай тине: «Эй кешеләр, тыңлағыҙ минең һүҙемде! Мин һеҙгә үҙем сәйәхәт ҡылған саҡтарҙа осраған иң ғибрәтле, иң мөғжизәле хәлдәр тураһында һөйләгәйнем бит инде. Тау башынан алмас уйһыуына ит киҫәктәре ырғытҡанымды ла ишеткәйнегеҙ, уға үҙен бәйләп, ҡош тырнағына эләгеп уйһыуҙан тауға күтәрелгән кеше хаҡында ла һөйләгәйнем бит. Һеҙ миңә ышанмағайнығыҙ, ялғансы тип атағайнығыҙ. Шулай бит?»

«Эйе, һин беҙгә быны һөйләгәйнең. Беҙ уға ышанмағайныҡ», — тип яуап бирҙеләр уға.

«Ит киҫәгенә йәбешеп, алмас уйһыуынан үҙен ҡотҡарған кеше — бына һеҙҙең алдығыҙҙа! — тине сауҙагәр. — Ул миңә донъяла ише булмаған иң яҡшы, иң ҡиммәтле алмас таштары бүләк итте. Беҙ уны үҙебеҙ менән алдыҡ. Бергәләп Баһру ҡалаһына тиклем барҙыҡ. Шунан ул үҙ иленә ҡайтып китте. Беҙ үҙ яғыбыҙға йүнәлдек. Бына алдыбыҙҙа торған әфәнде тап ошо кеше була инде. Ул үҙенең аты сәйәхәтсе Синдбад булыуын да, теге утрауҙы карабығыҙ ташлап киткәндә үҙенең унда йоҡлап тороп ҡалыуын да һөйләп бирҙе. Әйтерһең, был кеше мин һеҙгә һөйләгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ-

ләр өсөн генә килгән! Һәммә был тауарҙар — уның мөлкәте. Ул һеҙгә барын да һөйләне бит инде. Уның һүҙҙәре тик дөрөҫлөктән генә ғибарәт.

Әлеге сауҙагәрҙе тыңлап бөтөргәс, капитан урынынан ҡуҙғалды ла минең яныма килде; бер талай диҡҡәт менән йөҙөмә текемләп ҡарап торғас: «Төргәктәрҙе ҡутарып ҡарамай ғына тауарҙарыңдың исемен, затын, төҫтәрен, миҡдарын әйтеп бирә алаһыңмы?» — тине.

Мин, бер ҡыйынлыҡһыҙ, тауарҙарымдың исемдәрен, миҡдарҙарын, төҫтәрен атаным да сыҡтым. Бары ла дөрөҫ булды. Шуға өҫтәп, Баһруҙа карапҡа ултырғанда капитан менән икәүебеҙ-ара булған бер мәрәкәне лә иҫенә төшөрҙөм. Шунда ла инде ул, минең ысынлап та сәйәхәтсе Синдбад булыуыма тамам ышанып, ҡосаҡлап алды, үлемдән ҡотолоуым менән тәбрикләне, иң-иң изге теләктәр теләне. «Валлаһи, һинең башыңдан әҙәм ышанмаҫлыҡ хәлдәр уҙған. Иҫән ҡалып, мөлкәтеңдең дә үҙеңә ҡайтыуына мин ғәйәт тә шатмын!» — тине капитан.

Мин ҡулыма кире ингән тауарҙарымды йүн генә хаҡтарға һатып, был сәйәхәтемдә лә арыу уҡ ҙур килем алдым. Үҙемде үлемдән ҡалыу, байлығымдың кире ҡайтыуы менән тәбрикләнем.

Алыш-биреш итә-итә, утрауҙан-утрауға күсеп бара торғас, бер килеп, беҙ Синд тигән илгә килеп еттек. Унда ла һатыу-алыу менән шөғөлләндек. Бындағы диңгеҙҙә мин күргән хайран ҡалырлыҡ мөғжизәләрҙе һанап та, һөйләп тә бөтөрлөк түгел. Шулар араһында берҙәре һыйыр башлы, икенселәре ишәк башлы балыҡтар ҙа бар. Тағы ла мин унда диңгеҙ ҡабырсағында йәшәй торған хикмәт-

ле ҡоштар ҙа күрҙем. Улар йомортҡаларын диңгеҙ өҫтөнә һалып, себештәрен шунда баҫып сығаралар. Улар ғүмерҙәрендә, исмаһам, бер генә тапҡыр ҙа ҡоро ергә баҫмай икән.

Шунан һуң беҙ диңгеҙҙән диңгеҙгә йөҙҙөк тә йөҙҙөк. Ел ғел генә ыңғайҙан иҫте. Сәйәхәт бик тә күңелле дауам итте. Бына шул рәүешсә беҙ Баһру ҡалаһына килеп юлыҡтыҡ. Мин унда аҙмы-күпме торҙом да һөйөклө Бағдадыма ҡарай юл алдым. Мәхәлләмә ҡайтып еттем, үҙ өйөмдөң тупһаһын аша атланым, туған-тыумасама, дуҫ-ишемә, таныш-белешемә сәләм бирҙем. Үҙемдең тағы ла бер мәртәбә әжәлдән ҡотолоуыма ғәйәт тә шат булып, илемә, еремә, тыуған ҡалама имен-һау ҡайтып төшөүемә сикһеҙ ҡыуаныстан фәҡирҙәргә хәйер-саҙаҡа тараттым, бик күп етем-еҫерҙе кейендерҙем, тамаҡтарын туйҙырҙым. Аҙаҡ дуҫишемде йыйып алдым да кинәнгәнсе ашап-эсеп, уйнап-көлөп, кәйеф-сафа ҡорорға керештем. Сауҙа итеп, иҫәбенә сыҡҡыһыҙ аҡса туплағайным. Яратҡан әҙәмдәрем менән зыҡ ҡубып типтерә торғас, үҙемдең башымдан кискән ҡот осҡос хәлдәр, йәнемдең ҡыл өҫтөндә торған мәлдәре, ҡурҡыныс төш кеүек кенә булып, башымдан елләнеп осто ла бөттө.

Был сәйәхәтемдә күрәсәгемә яҙған шаҡ ҡатырғыс ваҡиғалар бына ошоларҙан ғибарәт, ҡәҙерле дуҫтарым. Әгәр инде бойорған булһа, иртәгә тағы ла ошонда йыйылышырһығыҙ. Мин һеҙгә дүртенсе сәйәхәтемде һөйләрмен. Уныһы быларынан да ҡыҙығыраҡ, хикмәтлерәк.

Шунан һуң сәйәхәтсе Синдбад фәҡир аҙашы йөк ташыусы Синдбадҡа йөҙ мыҫҡал алтын үлсәп

бирергә бойорҙо. Мәжлестәгеләр, йорт хужаһының һөйләгәненә хайран ҡалышып фекерләшә-фекерләшә, күңелле итеп киске аш ашанылар ҙа өйҙәренә таралыштылар.

Йөк ташыусы Синдбад та, сәйәхәтсе аҙашының һөйләгәндәрен йәнә лә бер мәртәбә башынан кисереп, өйөнә ҡарай йүнәлде. Ул төнөн рәхәт йоҡола уҙғарҙы. Иртән матур булып ялтлап ҡояш ҡалҡҡас, тәһәрәт алып, намаҙ уҡыны ла, килешелгән буйынса, сәйәхәтсе Синдбад өйөнә китте.

Бай сауҙагәр уны асыҡ йөҙ менән әйҙүкләп ҡаршыланы, хөрмәтләп үҙ эргәһенән урын күрһәтте. Башҡалар ҙа йыйылышып бөткәс, алдарына бик мул тәмле-татлы һый килде. Кинәнгәнсе ашап-эсеп, уйнап-көлөп, кәйеф-сафа ҡороп алғас, Синдбад һөйләргә тотондо.

# ДҮРТЕНСЕ СӘЙӘХӘТ



Дуҫкайҙарым, мин һеҙгә, Бағдад ҡалаһына ҡайтып төшкәс, тыуған төйәгемдә яҡындарым менән күрешеп, рәхәт сигеп йәшәй башлағанымды әйткәйнем инде. Ғәмһеҙ тормош кинәнестәре әүәлге сәйәхәтемдә татыған михнәттәрҙе тамам онотторҙо ла ҡуйҙы. Шулай аҙмы-күпме ваҡыт үткәс, күңелемдәге иблес мине яңынан алыҫ ерҙәргә сәйәхәткә сығырға, ят ерҙәр, мажаралар күрергә, яңы кешеләр менән танышырға, һатыу-алыу менән шөғөлләнеп, мөлкәтемде ҡалынайтырға ҡоторта башланы.

Күңелем болоҡһоуына артабан да сыҙашып тора алмай, мин юлға тәүәккәлләргә ҡарар ҡылдым. Күп итеп бик затлы тауарҙар һатып алдым. Улар сит ерҙәрҙә үтемле буласаҡ. Диңгеҙҙә сәйәхәт өсөн кәрәк-яраҡ менән үҙемде тәьмин иттем. Быларҙың барыһын да йәпләп төрөп-төйнәштерҙем дә Бағдад ҡалаһынан Баһруға йүнәлдем. Шуны ла әйтәйем, был юлы тауарҙарым, элекке сәфәрҙәремдәгегә ҡарағанда, сағыштырғыһыҙ мулыраҡ булып сыҡты.

Төргәк-төйөнсөктәремде карапҡа тейәнем һәм Баһруҙың үҙем кеүек үк хәлле-маллы әҙәмдәре менән юлға сыҡтым.

Диңгеҙ шаулауын, тулҡындар сәпелдәшеүен тыңлап, икһеҙ-сикһеҙ киңлектәргә хозурланып, шулай йөҙҙөк тә йөҙҙөк. Диңгеҙҙән диңгеҙгә, утрауҙан утрауға күсә-күсә, көн барҙыҡ, төн барҙыҡ. Бер мәлде елдәр, бер булышып, һәр яҡлап көслө иҫергә, диңгеҙҙе айҡалтырға-сайҡалтырға керешә. Ул да булмай, дәһшәтле дауыл ҡоторорға тотондо. Карабыбыҙҙың батыуынан шөрләп,

капитан диңгеҙ уртаһында якорь ташлап, туҡталырға мәжбүр булды.

Тик был ғына ярҙам итә алманы. Дауыл сиктән тыш шашынып, барса елкәндәрҙе йолҡҡолап, йыртҡылап бөтөрҙө; караптағы кешеләрҙе тауарҙары, төргәктәре-ние менән бергә диңгеҙгә быраҡтырҙы. Ҡапыл иҫкән бер мәкерле ел мине лә улар артынан ырғытты. Бата башлағанымды һиҙеп, мин бар көсөмә тарбаңлап йөҙөргә керештем. Ярты көн тирәһе шулай һыу өҫтөндә үлмәктән-калмаҡ йөҙгәс, тамам хәлдән тайып, тере ҡалыуҙан бөтөнләй өмөт өҙҙөм.

Шул мәлдә, бәхетем өҫкә ҡалҡып, бер таҡтаға барып тотондом. Баҡтиһәң, был үҙебеҙҙең караптың һыныҒы икән. Бергә сәфәр сыҡҡан тағы бер нисә сауҙагәр иптәшем дә иҫән булып сыҡты. Улар менән бергәләп, әлеге киң оҙон таҡтаға атланып ултырып алдыҡ. Бер-беребеҙгә һыйынышты ҡ та, әйҙә, аяҡ-ҡулдарыбыҙ менән ишен, өҫтөбөҙгә ябырылған хәүеф-хәтәргә ҡаршы көрәшергә керештек. Тора торғас, дауыл баҫылып, тулҡындар ҙа йыуашайҙы. Ел үҙе беҙгә ярҙамға килде.

Бына ошо хәлдә тағы бер көн, тағы бер төн яфаландыҡ. Тик алдағы таңда ел ҡабаттан көсәйҙе. Тулҡындар беҙгә ҡаршы тырпайышты, һәм шуларҙың аяуһыҙ көслө бәрәүһе беҙ бәхетһеҙҙәрҙе ниндәйҙер утрау ярына илтеп атып бәрҙе. Йоҡо төҫө күрмәүҙән, сиктән сығып йонсоуҙан, һалҡындан, аслыҡтан, ҡурҡыуҙан, һыуһауҙан ҡыл өҙөр хәлебеҙ ҡалмай миктәгәйнек.

Килеп ауған еребеҙҙә йән белмәй йоҡлап алғас, әҙерәк көс ингәндәй булды. Беҙ ҡотороноп үҫкән үҫемлектәр менән ҡапланған утрау буйлап йөрөнә

башланыҡ. Йән аҫрау өсөн япраҡ-маҙар сәйнәштерәбеҙ. Утрауҙың яр буйында тағы ла бер төн ҡунғас, йәнә алға ҡуҙғалдыҡ. Уңға барабыҙ, һулға боролабыҙ. Ҡараһаҡ, алдыбыҙҙа ниндәйҙер ҡаралты пәйҙа булды.

Беҙ күҙебеҙгә салынған ана шул алыҫтағы ҡоролмаға ҡарай атланыҡ. Барҙыҡ, барҙыҡ, бара торғас, тегенең ҡапҡа алдына барып еттек. Ни ҡылырға белмәй торған сағыбыҙҙа ҡапыл ҡаршыбыҙға шыр ялангас кешеләр төркөмө эркелешеп килеп сыҡмаһынмы! Улар беҙҙең менән һөйләшеп тә торманылар, ҡармап тотоп алдылар ҙа үҙҙәренең батшаһы ҡашына алып киттеләр.

Теге беҙгә ултырырға бойорҙо, алдыбыҙға ашанты ҡуйҙырҙы. Ундай ризыҡты беҙҙең ғүмеребеҙҙә ашағаныбыҙ ҙа, күргәнебеҙ ҙә юҡ ине. Мин унан ерәндем дә ашамаҫ булдым. Ул тамағымдан үтер һымаҡ түгел ине. Ә юлдаштарым, аслыҡтың сигенә сыҡҡанға, һис талымлап тормай, һоғондолар ғына. Һәм мин, шунда тыйылып, ул нәмәләрҙән ауыҙ итмәүемә әле булһа шөкрана ҡылып бөтөрә алмайым. Тере килеш әле һеҙҙең алдығыҙҙа һин дә мин ултырыуыма шул сәбәпсе.

Иптәштәрем ҡабаланып-ҡарһаланып ашауҙарында булдылар. Шул ыңғайҙан улар миңә торған һайын сәйерерәк күренә барҙы. Уларҙың аҡылына көс килгәйне. Ашаған һайын нығыраҡ асыҡҡан шикелле, бер туҡтауһыҙ тығыналар ҙа тығыналар. Күҙҙәре аҡайышты. Тәндәре күҙгә күренеп ҡабара, шешенә бара. Ялангас кешеләр, етмәһә, ашантыға өҫтәп, теге бахырҙарға кокос майы ла килтереп эсерҙеләр. Ҡалғанын тәндәренә һөрттөләр. Унының һемергәс инде, меҫкен юлдаштарым-

дың күҙҙәре атылышып уҡ сыҡты. Майҙы тәндәренә буяғас, тегеләрҙең ҡорһаҡтары оторо кәпәйҙе. Улар инде алдарындағы ашты, ҡулдары менән дә тотоп маташмай, хайуан шикелле, ауыҙҙары менән ҡармап, лапылдатып ялмап йоторға тотондолар.

Мин инде, беренсенән, үҙемдең яҙмышым өсөн тәрән хафаға сумып, икенсенән, күрәләтә хайуанға әйләнгән иптәштәрем өсөн борсолоп, ни ҡылырға белмәй, ғажиз ҡалдым. Яланғас тәнле был әҙәми заттарҙың яуызлығына нәфрәт утында яндым.

Баҡтиһәң, был бәндәләр сихырсылар тоҡомонан булып сыҡты. Уларҙың батшаһы бирән зат икән. Уның ярандары был утрауға килеп эләккән берәүҙе шулай ҡаршы сығып, тотоп алалар ҙа әлеге мәғлүм аҙыҡтар менән алҡынғансы һыйлайҙар, әлеге майҙы һөртәләр; ҡорһаҡтары тағы ла киңәйеп, аңдары тамам томаланып, тегеләр күпме ашағандарын да белмәй башлайҙар. Ә сихырсылар уларҙы көсләп-көсләп, уның һайын күберәк ашатырға тырышалар. Шулай тиҙ арала мискәләй йыуанайып, ғәшиптән тыш һимерешкәс, был ҡорбандарҙы мал урынына һуялар ҙа батшаларына ашаталар имеш.

Был ҡәбәхәт әҙәмдәр кеше итен хатта бешереп тә тормай, сей килеш ашайҙар икән.

Бына ошоларҙы белеп, хәлдең үтә лә аяныслығын һиҙеп алғас, үҙем өсөн дә, меҫкен юлдаштарым өсөн дә ҡара ҡайғыға ҡалдым. Ә тегеләр төптө аҡылдарын юйған хәҙер; бар тип тә белмәй, күпме ашарға бирһәләр, шуны ҡабаланып-ҡарһаланып һоғоналар ғына.

Өйҙә ашатҡандары ғына етмәй, тегеләрҙе тояҡлы мал урынына тибенгә көтөүгә алып сығалар, өҫтәп шунда үлән ашаталар.

Ә миңә килгәндә иһә, тәғәм ризыҡ ҡапмай, көнө-төнө ас тороуҙан, ҡурҡыуҙан тәнем ҡаҡ һөйәккә ҡалып, тамам ҡорошто, үҙем бөтөнләй сиргә һабыштым.

Сихырсылар, быны күреп, минең тәнемә ит ҡунып, көрәйеүемдән, мал булыуымдан тамам өмөт өҙҙөләр, иғтибар ҙа итмәй башланылар, барлығымды бөтөнләй оноттолар тиһәң дә ярай.

Бер мәл ниндәйҙер хәйлә менән мин, бирән батша һарайының ишек алдынан ҡотолоп, киң яланға сыҡтым, унан шаҡтай алыҫҡа киттем. Күҙ күреме барғас, ҡалҡыуҙа ултырған бер әҙәмде күрҙем. Яҡынырак килгәс, уны таныным. Был һимертергә тибенгә сығарылған кешеләрҙе ҡарауысы көтөүсе булып сыҡты. Ә көтөүе бик ишле икән. Унда минең меҫкен юлдаштарымдан башҡа тағы мал булырға дусар ҡылынған әллә күпме әҙәм балаһы бар.

Көтөүсе текемләп ҡарап торҙо-торҙо ла минең үҙ аҡылымда икәнемә, иптәштәремдең өлөшөнә төшкән яфа миңә теймәгәненә төшөндө ахыры. Ул миңә алыҫтан ымланы ла: «Артыңа әйлән дә уңға ҡайырыла торған юлдан кит. Шунан солтан иленә илтә торған юлға сығырһың», — тине. Мин, был кеше күрһәткәнсә, артыма боролдом да үҙемдән уң яҡҡа ҡайырыла торған юлды күрҙем, тиҙерәк шуның менән китергә ашыҡтым. Мин,ҡыуа төшөүҙәренән шөрләп, башта, аяғым ергә теймәй йүгерҙем, бик алыҫ киткәс кенә, быуындарым тамам хәлһеҙләнгәс кенә, яй атлай башланым.

Миңә юл күрһәтеп ебәргән мәрхәмәтле әҙәм әллә ҡасан алыҫта артта ҡалды инде. Ул да мине күрмәй, мин дә уны күрмәйем хәҙер. Бына ҡояш байып, ҡараңғы ла төштө.

Мин, әҙерәк ял итеп, йоҡлап алмаҡсы булып, юл ситенә яттым. Тик артыҡ йонсоуҙан, аслыҡтан һәм ҡурҡыуҙан бер ҙә йоҡо алманы. Аптырағас, төн урталарында урынымдан ҡуҙғалдым да юлымды ары дауам иттем. Яҡтырғансы, шулай барҙым да барҙым.

Уйһыуҙарҙы, ҡалҡыуҙарҙы яҡты нурға мансып, ҡыҙарып ҡояш сыҡты. Мин тәҡәтем ҡалмай асыҡтым, арыным, сарсаным. Һәр төрлө үлән ҡыяҡтары, япраҡ-маҙар сәйнәштереп, тамаҡ алдап, тәнемдә йәнемде һаҡларға тырыштым. Әҙ генә хәл алам да, көслөк менән урынымдан ҡалҡынып, ары тәнтерәкләйем. Шул рәүешсә көн барам, төн барам. Асығыуҙан түҙер хәлдәрем ҡалмаһа, эйелеп, мал шикелле, үлән сәйнәргә керешәм.

Бына шулай ете көн, ете төн барҙым. Һигеҙенсе көнгә сыҡҡас, алдымда беленер-беленмәҫ кенә бер нәмәкәй күрҙем. Шул нәмәкәйгә ҡарап, тағы ла көнө буйы атланым һәм уның янына бары көн кискә һарҡып, ҡояш байыр алдынан ғына барып еттем. Мин үҙем күргән нәмәгә артыҡ яҡынлашмай, алыҫтан ҡарап, айышына төшөнөргә уйланым. Сөнки бик күп хәүеф-хәтәргә дусар булғанлыҡтан, йыш ҡына ауыҙым бешеп, өрөп ҡабырға өйрәнгәнмен инде.

Алыҫтан күргән нәмәм йәшәреп ятҡан борос үҫентеләре баҫыуы булған икән. Уның өҫтөндә күмәк кешеләр, ҡымйышып, борос уңышы йыйып йөрөйҙәр икән.

Башҡа әмәлем ҡалмағас, мин уларға яҡынлаштым. Борос йыйыусылар, мине һырып алып: «Һин кем булаһың? Ҡайҙан килеп сыҡтың», — тип төпсөнөргә керештеләр.

«Мин бер бәхетһеҙ мосафир булам», — тинем һәм үҙемдең башымдан кискән барса ҡот осҡос хәлдәрҙе, үҙем дусар булған һәммә сетерекле ваҡиғаларҙы бәйнә-бәйнә бәян итеп бирҙем.

«Валлаһи, һин — бәхетең менән бергә тыуған кеше! Юғиһә был утрауҙағы ҡара тәнле яуыз бәндәләр янынан имен-аман үтеп китә алыр инеңме ни? Улар, ҡырғын көтөүе кеүек, бик күптәр. Үҙҙәре әҙәм ите ашай. Шул ҡырағайҙарҙан ҡотолоп, беҙҙең яҡҡа иҫән үтеп сыҡҡан кеше заты юҡ әле, — тип хайран ҡалды тегеләр.

Мин быларға әлеге ҡара тәнле кеше ашаусылар иленә ниндәй бәлә арҡаһында килеп эләккәнебеҙҙе, иптәштәремдең улар биргән теге сихырлы ашамлыҡты ашап, һуғым малына әйләнгәндәрен, үҙемдең уны ашамай түҙгәнем өсөн ҡотолоп ҡалғанымды ентекләп һөйләп бирҙем.

Борос йыйыусылар һөйләгәнемдә хайран ҡалып тыңланылар, бик ҙур бәләнән ҡотолоп, үлемдән ҡалыуым менән ҡайнар тәбрикләнеләр.

Улар мине ялан башына күләгәгә хәл алырға ултырттылар ҙа, эштәренән бушағас, бер аҙ миҡдарҙа арыу ғына аш килтерҙеләр. Күпме ваҡыт тәғәм аҙыҡ күрмәй, астан ҡырҡылып бөткән кешенең ни — улар биргән аҙыҡ кесе телемә лә йоҡмай ҡалды тигәндәй.

Бер аҙ ял иткәс, борос игеүселәр мине кәмәләренә ултырттылар ҙа үҙҙәре йәшәгән утрауға алып сыҡтылар, батшалары ҡашына алып бар-

ҙылар. Мин уның йортона именлек, үҙенә сәләмәтлек, мөлкәтенә бәрәкәт теләп, башымды эйҙем.

«Әйҙүк! Рәхим итәһегеҙ!» — тине батша ихлас күңелдән. Ул, оло хөрмәт күрһәтеп, үҙ янына ултыртты ла башымдан кискәндәрҙе төпсөп һорашырға керешге. Мин Бағдад ҡалаһынан сығып китеп, уның алдына килеп башым эйгәнсе үҙем менән ниҙәр булғанын, ниндәй хәүеф-хәтәрҙәр уҙғанымды, ниндәй юлдар менән үлемдән ҡотолоп ҡалғанымды ентекләп һөйләп бирҙем.

Батша ла, уның менән бер ҡатарҙан тороп минең хикәйәтемде тыңлаған ғәйре әҙәмдәр ҙә һөйләгәнемә таң ҡалдылар. Шунан хужа алдыма ҡунаҡ һыйы килтерергә ҡушты. Мин, ярайһы асыҡҡан булһам да, ашҡа ҡапланып китмәй, ипле генә итеп ашаным. Шунан хөрмәтенә рәхмәт әйтеп, доға ҡылдым, мине асыҡ йөҙ менән ҡабул иткән батша һаулығына намаҙ уҡыным.

Шунан батша һарайынан сыҡтым да ҡала буйлап хозур ҡылып йөрөмәксе булдым. Ҡала бик йыйнаҡ, бөхтә, төҙөк ине. Ул ярайһы бай күренә. Унда бик күп халыҡ йәшәй икән. Баҙарҙар ҙа күп, сауҙагәрҙәре лә күп; һатыр тауарҙары ла күп, алыр кешеләре лә күп.

Мин үҙемдең был күркәм ҡалаға, шәфҡәтле кешеләр янына килеп юлығыуыма һуң дәрәжәлә ҡыуандым, ошонда йән тыныслығы таптым. Был кешеләргә шаҡтай эйәләшә, уларҙың көнкүрешенә күнегә төштөм. Батша мине һәр тарафтан хөрмәт һәм ихтирам менән солғап алды. Валлаһи тип әйтәм, ундай бәхет үҙенең яҡындарына һәм ярандарына ла тәтеп бөтмәйҙер әле.

Был мәмләкәттең кешеләре — олоһонан алып кесеһенә тиклем йәмғеһе — яҡшы нәҫелдән булған бик елле арғымаҡтарға атланышып йөрөй. Бына шуға күҙем ҡыҙып ҡарап торҙом да, сәйерһенә биреп, батшанан һорай ҡуйҙым: «Солтаным минең, ни эшләп һеҙ батша башығыҙ менән атҡа эйәр һалмай ғына атланып йөрөйһөгөҙ? Эйәр бит һыбайлының тәненә ял бирә, уның көс-ҡеүәтен һаҡлай ҙа баһа».

«Ә нимә ул эйәр? — тип батша ғәжәпләнеп һораны. — Беҙ ундай әйберҙе ғүмерҙә лә күргәнебеҙ, ундай нәмәгә ултырып йөрөгәнебеҙ юҡсы».

«Әгәр рөхсәтең булһа, мин шул эйә[illegible] тигәнде һиңә яһап бирер инем. Уның ниндәй уңайлы нәмә икәнен төшөнөр инең».

«Яһап бирсе!» — тине батша әүәҫ кенә.

«Улайһа, миңә бик яҡшы ағас табып бирергә ҡушығыҙ», — тинем мин.

Батша шунда мин ни һорайым — шуны тотҡарламай табып бирергә фарман ҡылды, иң яҡшы балта оҫтаһын ярҙамға саҡыртып алды. Мин уға эйәрҙе нисек эшләргә икәнен төшөндөрөргә, күрһәтергә тотондом.

Бик яҡшылап йөн теттем, унан кейеҙ баҫтым, шунан, күн алып, уны күҙ ҡамаштырырлыҡ итеп йылтыраттым, уны эйәр ағасына таҫлап беркеттем; бик елле ҡайыштарҙан айыл, бауырғалыҡ, өҙәңгелектәр әҙерләнем.

Шунан батшаның даны сыҡҡан бер тимерсеһен саҡыртып алып, уға өҙәңгенең нисек яһалыуын тасуирланым. Тимерсе ҙур итеп, бик матур итеп өҙәңгеләр ҡойоп бирҙе. Мин уға алтын ялаттым, уҡалы суҡтар менән биҙәнем.

Ошо эштәр тамам булғас, миңә батшаның ат һарайынан иң аҫыл арғымаҡты килтерҙеләр. Мин уға алтын тәңкәләр менән биҙәлгән йүгән кейҙереп, алтындан семәрләнгән эйәр менән эйәрләп, батшам ҡаршыһына килтерҙем.

Батшаның күңеленә эйәр ғәйәт тә оҡшаны. Ул, миңә рәхмәттәр уҡый-уҡый, атына атланды һәм уңайлы эйәрҙә һыбай йөрөүҙән оло кинәнес кисерҙе; хеҙмәтем өсөн бик күп аҡса түләне.

Ҡупшы һәм уңайлы эйәрҙә ултырыуҙың ҡайһылай рәхәт икәнен һиҙеп ҡалды ла батшаның баш вәзире, күҙе ҡыҙып, минән үҙенә лә шундайҙы яһап биреүемде үтенде. Мин уға ла бик яҡшы иттереп әлегесә эйәр эшләп бирҙем. Бына шунда ла инде батшаның барса ярандары, һанаттары, ғәйре яҡындары, ауыҙ асырмай, минән үҙҙәренә лә эйәр эшләп биреүемде ялбара башланылар. Ҡарышып торманым. Һораған береһенә яһаным да бирҙем, яһаным да бирҙем.

Әлеге балта оҫтаһы ла эйәр һөнәрен ныҡлап үҙләштереп алды. Тотондом мин эйәр менән кәсеп итергә. Шул арҡала ярайһы мул ғына аҡса ла туплап өлгөрҙөм. Был кешеләр араһында минең дәрәжәм ғәләмәт тә юғары күтәрелде. Улар мине ҡайнар һөйөү менән ярата башланылар. Батшаның яҡындары, түрә-ҡара, һанаттары, ярандары араһында минең урыным иң түрҙән булды.

Көндәрҙән бер көндө шулай батша һарайында һәр төрлө ҡыуаныстарға, кинәнестәргә сумып, һый-хөрмәттән ауыҙ итеп ултырам. Батшам миңә, һис бер кинәйәһеҙ туранан-тура былай тип әйтеп ҡуймаһынмы: «Фәлән дә төгән, үҙең күрәһең инде: һин беҙҙең мәмләкәтебеҙҙең, беҙҙең гүзәл

баш ҡалабыҙҙың иң хөрмәтле, иң ғәйәр ирҙәренең береһе итеп танылдың. Беҙ һине, туғаныбыҙҙан артыҡ күреп, өҙөлөп яраттыҡ. Бәс, шулай булғас, үҙебеҙҙе ҡасандыр ташлап китереңде күҙ алдыбыҙға ла килтермәйбеҙ. Башыбыҙға ул ҡайғы төшә күрмәһен. Һис түҙә алмабыҙ. Шуға күрә мин һинән бер генә нәмә үтенмәксе булам. Шуны үтәһәң, беҙҙе һуң дәрәжәлә бәхетле әҙәмдәр итерһең».

«Ниндәй генә теләгең бар, әйтә һал, солтаным! — тинем мин. — Һинең мәрхәмәтең, хөрмәтең миңә ҡарата шул ҡәҙәре ҙур булды ки, уны иҫәпләп тә, түләп тә бөтөрөрлөк түгел. Ни генә бойорһаң да, иркең бар. Әмерең баш өҫтөм. Мин һинең ҡолоң, ханым-солтаным».

«Мин һиңә кәләш алып бирмәксе булам. Һиңә әйттерергә тип күҙләп ҡуйған ҡыҙыбыҙ — үҙ мәмләкәтебеҙҙә бер тигән сибәр, үҙе бик ҙур мал эйәһе. Өйләнһәң, һин ғүмерлеккә беҙҙең яныбыҙҙа тороп ҡаласаҡһың. Мин һиңә үҙемдеке ише үк һарай һалдырып бирермен. Зинһарҙар тип әйтәм, һүҙемде аяҡ аҫтыңа һалып тапай күрмә инде».

Батшаның һүҙҙәрен ишеткәс, мин ҡып-ҡыҙыл булып ҡыҙарындым, уның алдында оялышымдан ни ҡылырға ла белмәнем; тамам телдән ҡалдым да ҡуйҙым.

Батша, быны үҙенсә аңлап, борсолоп, ҡабат һораны:

«Ниңә өндәшмәйһең, туғаным минең?»

«Эй замана хакиме! Һин ниңә минән үтенәһең, һин әмер ит», — тинем.

Батшам шунда уҡ ҡала хөкөмдарын, шаһиттар саҡыртып алды, һә тигәнсе мине мәмләкәттең

иң һиммәтле нәҫеленән булған иң сибәр, иң бай ҡыҙы менән никахландырҙы ла ҡуйҙы. Уның туған-тыумасаһы дәүләттә иң юғары дәрәжәләр биләй. Минең ҡатыным буласаҡ ҡыҙға әҙерләгән бирнә аҡсаларын, ғәйре мал-мөлкәтен һанап, хисаплап ҡына бөтөрөрлөк түгел.

Бына шулай батша, үҙ туғанындай күреп, мине өйләндергәс, һүҙендә тороп, миңә бынамын тигән һарай һалдырҙы, бик күп ҡолдар, хеҙмәтселәр, аҫрауҙар бүләк итте, ҙур хеҙмәт хаҡы һәм башҡа килем тәғәйенләне. Мин, башымдан күптән түгел кискән ҡайғы-хәсрәтте, бәлә-ҡазаларҙы, үлемесле хәүеф-хәтәрҙе тамам онотоп, май эсендәге бөйөр кеүек, рәхәтлектә, һәр төрлө донъя кинәнестәренән ләззәт сигеп йәшәргә керештем.

«Тыуған-үҫкән иләмә ҡайтыр булһам да, бары һөйөклө бисәкәйем менән генә юлға сығасаҡмын», — тип ниәт ҡылып ҡуйҙым күңелемдән. Бәлки, оҙаҡламай шул сәфәргә сығыу ҙа яҙғандыр әле беҙгә. Бәндә маңлайына яҙылған күрәсәктәрен күрмәйенсә ер ҡуйынына инмәй, тигәндәр бит.

Мин ҡатынымды яраттым. Ул да мине өҙөлөп һөйә ине. Беҙ татыулыҡта һәм байлыҡта рәхәт сигеп йәшәргә керешеп киттек.

Бына шулай аҙмы-күпме донъя көткәс, бер мәлде миңә күрше булып йәшәгән бер дуҫымдың башына ҡара ҡайғы төштө. Ҡапыл ғына уның ҡатыны вафат булды. Мин, хәсрәтен әҙерәк еңеләйтә алмаммы тип, йыуатырға индем. Уны айырата ауыр хәлдә тап иттем. Ул ҡайғыһынан бөтөнләй әҙәм ҡарағыһыҙ хәлгә төшкәйне, аҡылынан яҙыу дәрәжәһендә ине.

Мин уның хәлен уртаҡлашырға, ҡулымдан килгәнсә йыуатырға тотондом: «Ҡатыным тип артыҡ бөтөрөнмә! Үлгән артынан үлеп булмай. Үҙеңде һаҡларға кәрәк. Әле һин йәшһең, сибәрһең. Хоҙай һиңә ҡатындың бынамын тигәнен бирер. Уның менән рәхәтләнеп оҙон ғүмер кисерерһең, бойорған булһа...»

Был һүҙҙәремде ишеткәс, ғәжәпкә ҡаршы, күршем, тағы ла тәрәнерәк хәсрәткә сумып, һығылып төшөп иларға кереште:

«Әй дуҫкайым! Хәҙер хоҙай миңә ниндәй ҡатын бирһен дә, мин уның менән нисек рәхәтләнеп ғүмер итәйем ти инде. Миңә бит хәҙер бары-юғы бер тәүлек кенә йәшәргә ҡалды».

«Туғанҡайым минең, — тинем уға, — аҡылыңа кил. Ни эшләп улай йәш кенә башың менән, һаусәләмәт көйөңә үлем һөйләп ултыраһың әле. Тормошоң бөтөн, үҙеңдең көс-гәйрәтеңдең ташып килгән мәле. Әле һинең теттереп ғүмер һөрөр сағың».

«Әй дуҫкайым минең, — тип яуапланы күршем оло үкенес менән, — яҙмыштан уҙмыш юҡ. Бөгөн һин мине юғалтаһың. Иртәгә инде һин мине күрә алмаясаҡһың!»

«Юҡты һөйләмә! Ни эшләп күрә алмайым ти?»

«Иртәгә ҡатынымды ерләгән саҡта мине лә уның менән бергә ер ҡуйынына бирәсәктәр. Беҙҙең илдә шундай йола бар: ҡатыны үлһә, ирен уның янына тереләй күмәләр. Ире элек үлә ҡалһа, шулай уҡ ҡатынын йәнәшәһенә тереләй ҡуялар. Улар, беренән-бере фани донъяла ҡалып, рәхәт күреп йәшәргә тейеш түгел».

«Ант итеп әйтәм, — тинем мин, — был — иң алама ғөрөф-ғәҙәт! Унан да ҙурыраҡ яҙаның булыуы мөмкинме?!»

Беҙҙең арала ошондай һүҙ барған мәлдә, ҡаланың күпселек кешеләре дуҫым өйөнә килеп тулды ла уны ҡатынынан да етем ҡалыуы, үҙенең дә был фани донъянан китеүе айҡанлы йыуатырға, тынысландырырға керештеләр; үҙҙәрендәге йола буйынса мәйетте йыуҙылар, кәфенләнеләр, ҡәҙерләп табутҡа һалдылар.

Шунан, мәрхүмәнең хәләл ефетен эйәртеп, табутты ҡала ситенә алып сыҡтылар. Диңгеҙ ярындағы бер тау буйына килтереп еткерҙеләр. Шунда ерҙә ятҡан бер яҫы ташты күтәреп алдылар. Баҡһаң, был таш ер аҫтына өңөрәйеп төшөп китә торған бер ҡойо һымаҡ өңдөң ҡапҡасы имеш. Мәрхүмә ҡатындың кәүҙәһен шунда ырғыттылар.

Бынан һуң уның ирен дә ҡойо ауыҙына килтерҙеләр. Уның күкрәк ауыҙынан элмәкләп пальманан һыҙырып алған йүкә бау менән уратып бәйләнеләр ҙә ҡатынының әрүәхе артынан ҡойоға төшөрҙөләр. Уның артынан йәнә лә баулап бер сүлмәк һыу, ете дана сөсө икмәк төшөрҙөләр. Ҡәбергә терелəй ҡуйылған әҙәм түбәндән бауҙы үҙе үк ысҡындырып мендереп ебәрҙе.

Үрҙәгеләр, ҡәбер-ҡоҙоҡтоң ауыҙын ҡайтанан әлеге таш менән томалап яптылар ҙа, минең дуҫымды ер ҡуйынында ҡатынының үле кәүҙәһе янында ҡалдырып, өйҙәренә ҡайтышып киттеләр.

«Ай-һай, — тип уйланым мин. — Терелəй ҡәберҙә интегеп йән биреүкәйҙәре ер йөҙөндә вафат булып, ер ҡуйынына инеүҙәрҙән дә ауырыраҡ бит».

Шунан, батша янына инеп, уға былай тинем:

«Эй солтаным минең! Бигерәк аяуһыҙ ғәҙәт йәшәй икән дә баһа һеҙҙең илдә. Ниңә улай мәрхүм булған кеше янына тере кешене һалып күмәһегеҙ?»

«Шуны бел, — тип яуапланы солтаным, — беҙҙең илдәрҙә был борон-борондан килгән изге ғөрөф. Ире үлһә, ҡатынын уның янына ҡуябыҙ, ҡатыны үлһә, ирен эргәһенә күмәбеҙ. Улар яҡты донъяла ла, теге донъяла ла бер-беренән айырылышырға тейеш түгел. Атай-олатайҙарыбыҙҙан ҡалған был изге йола».

Батша ауыҙынан был һүҙҙәрҙе ишеткәс, минең эсемдә әллә ниндәй ағзаларым өҙөлөп киткәндәй булды. Ауыр ҡайғы-хәсрәттән аҡылым томаланды. Һөйөклө ҡатыным минән элек үлер ҙә мине уның менән бергә тереләй ҡәбергә күмерҙәр тип, ҡан ҡалтырап йәшәй башланым. Ҡайғыларға сумып йөрөйөм-йөрөйөм дә, йәнә килеп, үҙемде йыуатырға керешәм: «Хаҡ яҙмышын алдан белеп булмай бит, бәлки, мин ҡатынымдан элегерәк үлермен».

Һәр төрлө донъяуи шөғөлдәр менән йыуаныс табып, шулай йәшәп ятҡан мәлемдә, бер заман һөйөклө бисәкәйем сирләп китмәһенме! Сирләп тә китте, шул сиренән тора алмай, көндәрҙең берендә вафат та булды!

Ҡатынымдың үлеме айҡанлы минең тәрән ҡайғымды уртаҡлашырға, йыуатырға ҡаланың күпселек кешеләре йыйылды. Йола буйынса, батша ла йыназаға килде.

Бына мәйет йыуыусыны саҡыртып алып, ҡатынымды йыуып тәрбиәләнеләр, уға иң яҡшы ке-

йемдәрен кейҙерҙеләр, иң ҡиммәтле таштарҙан, мәғдәндәрҙән ҡойолған муйынса, беләҙек-йөҙөк, алҡаларын таҡтылар, ҡәҙерләп кенә табутҡа һалдылар һәм, мине лә эйәртеп, мәғлүм тау буйына алып киттеләр. Ташты күтәрҙеләр ҙә ҡатынымдың табутын әлеге ҡойоға төшөрҙөләр.

Шунан барса булған дуҫтарым, таныш-белешем, мәрхүмә ҡатынымдың туған-тыумасаһы, минең яныма килеп, күҙ йәше түгә-түгә үҙем менән хушлашырға, бәхилләшергә керештеләр.

Мин, был хәлгә түҙеп тора алмай, йәнасығына аҡырырға, тартышырға тотондом: «Мин — сит ил кешеһе! Мин һеҙҙең ғөрөф-ғәҙәттәрегеҙгә буйһонорға тейеш түгелмен! Ебәрегеҙ мине!..»

Әммә улар һүҙҙәремә ҡолаҡ та һалманылар. Күмәк көс менән шаҡарып бәйләнеләр ҙә ҡойоға төшөрҙөләр. Бер сүлмәк һыу менән ете күмәс тә кәүҙәмә ҡушып бәйләнгәйне.

Ҡәбер тигәнем тау аҫтындағы киң бер мәмерйә булып сыҡты.

Юғарынан: «Бауҙарҙы сисеп мендер!» — тип ҡысҡырҙылар.

Мин ризалашманым.

Үрҙәгеләр, ҡул һелтәп, бауҙың икенсе осон да түбән ырғыттылар ҙа, ҡәбер ауыҙын теге ауыр таш менән томалап баҫтырып, үҙ юлдарына киттеләр...»

Ҡараңғыға күҙем эйәләшә төшкәс, мин тирәяғымда һибелеп ятҡан үле кәүҙәләр, бик күп һөлдәләр күрҙем. Мәмерйәлә танау ярырлыҡ һаҫыҡ ине.

«Таман булды! Һиңә тап шул кәрәк! Тыуған ҡалаңда донъя рәхәте кисереп, кинәнеп йәшәү



урынына, ҡысынып, шайтан вәсүәсәһенә бирелеп, сыҙаша алмай, ауыр сәфәргә сығып киткән булдың. Бына күрмәгәнеңде күр инде!» — тип, үҙ-үҙемде битәрләргә керештем.

Шулай ҙа йән аяулы бит әҙәм балаһына. Оҙағыраҡ тере ҡалыр өсөн, мин аҙығымды оҙаҡҡараҡ еткерергә тырыштым. Асығыуҙан йөрәгем тамам өҙөлөп китер сиккә еткәнсе, тәғәм валсыҡ та ҡапмайым; һыуһауымдан һуштан яҙыр хәлгә етмәй тороп, ауыҙыма бер тамсы һыу алмайым.

Иң нык ҡурҡканым — аҙығым менән һыуым бөтөү ине.

Һаман теремен. Үкенес һаман күңелемде ҡуҙ булып өтә.

«Ниңә генә был илгә килеп сыҡтым икән? Ниңә генә, батша һүҙен йыҡмайым тип, был ҡалала өйләндем икән? Башым бигерәк бәхетһеҙ ҙә инде. Бер бәләнән илла-алла йырып, ҡотолоп сығыуым була, яурыныма тағы ла олорағы, ауырырағы килепябырыла. Маңлайыма яҙылғаны шулдыр инде. Тик шулай ҙа, валлаһи тип әйтәм, терелэй ҡара гүргә инеүҙән дә аянысырағы юҡ икән. Диңгеҙгә батып йә иһә ҡырағайҙар тарафынан үлтерелеп, был фани донъяны ҡуйһам, мең артыҡ булаһы икән!»

Бына шулай үкенәм дә сабынам. Әллә нисәмә йылдар буйына өҫтө-өҫтөнә өйөлгән әҙәм һөйәктәренә башым терәп йоҡоға китәм. Иртән һаман тере булыуыма аптырап уянам. Хоҙай ни эшләп үлем ебәрмәй язалай икән мине, тип аптырайым. Былай йән аҫрағансы үлем артығыраҡ, әлбиттә.

Аслыҡ һәм һыуһау үҙемде тамам хәлдән тайҙырғансы, шулай ғазапланып ятам-ятам да, ҡал-

ҡынып, күмәсте, сөлмәктәге һыуҙы самалап ҡына ауыҙ итәм. Әҙерәк хәл ингәндәй булғас, аптыраған көндән, тороп, ҡәберлек эсендә йөрөштөрөргә тотонам. Был хайран да иркен мәмерйә булып сыҡты. Унда әллә ни саҡлы киң ер ҡыуышлыҡтары бар. Тик уның иҙәне энә төрткөһөҙ булып боронборондан уҡ бында ырғытыла килгән мәйеттәрҙең һөйәктәре менән ҡапланған.

Мәмерйәнең бер яҡ ситен һөйәктәрҙән таҙартып, үҙемә торлаҡ һымаҡ нәмә этмәләп алдым да шунда йән аҫрай башланым. Тик аҙығым да, эсер һыуым да аяуһыҙ кәмей бара. Үҙем үлмәҫ борон ашар-эсеремә бөтөр тип шөрләп, уларҙы көнөнә берҙән артыҡ ауыҙыма алмаҫҡа тырышам.

Бына шул рәүешсә йәшәй бирәм. Көндәрҙең берендә шулай тәрән уйға бирелеп, хәсрәткә сумып ултыра инем, ҡапыл түбәм тапҡырындағы ҡәбер ҡапҡасы булған таш ҡуптарылып асылып китте лә мәмерйәгә көн яҡтыһы төштө. «Ни бар икән унда?» — тип ҡыҙыҡһынып ҡарарға ла өлгөрмәнем, юғарыла йыбырлашҡан кешеләр унан тәүҙә ир кешенең үле кәүҙәһен ырғыттылар, шунан тере ҡатынды баулап төшөрөргә керештеләр. Теге сәбәләнә, үкереп-үкереп илай, тартыша. Өҫтәгеләр, әлбиттә, уның ай-вайына ҡарамайҙар. Тегенең артынса, әлегесә, күмәстәр һәм сөлмәк менән һыу ҙа төшөрҙөләр. Шунан, ғәҙәттәренсә, ҡәбер ауыҙын таш менән томаланылар ҙа йәһәтерәк өйҙәренә таралышыу яғын ҡаранылар.

Шунда мин урынымдан ҡалҡындым да тереләй күмелгән ҡатын кеше янына атланым. Үлгәнсе үҙемә иптәш булыр тип һөйөндөм. Ләкин ҡатын, минең ҡыштырлауымды ишетеү менән һу-

шынан яҙып, үлектәрҙең һөйәктәре араһына ауҙы. Мин күкрәгенә ҡолағымды ҡуйып тыңлап ҡарағанда, ул йән биргәйне инде. Ул үҙе менән һәр төрлө затлы кейем-һалымын, ҡиммәтле таштарҙан эшләнгән муйынсаларын, алтын-көмөштән ҡойолған беләҙек-йөҙөгөн, алҡаларын да алып төшкәйне.

Үҙем һайлап, ятыр-торор өсөн ҡулайлап таҙартҡан мөйөшкә барып ултырҙым да үлгән ҡатындан алған аҙыҡ менән һыуҙан самалап ҡына ауыҙ иттем. Белеүегеҙсә, оҙағыраҡ тере килеш һаҡланыр өсөн мин ризығымды йән аҫрарлыҡ миҡдарҙа самалап ҡына ҡуллана киләм.

Бер мәл тәрән йоҡола сағымда эргәмдә нимәләр ҡыштырлағанына тертләп уянып киттем.

«Был ни булыр икән?» — тип хәүефләнеп уйлап алдым да, яҡында ятҡан бер һөлдәнең бот һөйәген йылдам ғына эләктереп алып, ҡыштырлау ишетелгән тәңгәлгә тоҫмаллап атланым. Тик теге билгеһеҙ нәмәкәй минең үҙенә яҡынлағанымды һиҙеп алды ла туптырлап сабып китте. Был ниндәйҙер ҡырағай йәнлек булып сыҡты буғай.

Мин уның артынан эйәрҙем. Барҙым, барҙым, бара торғас, алдымда нәҙек кенә яҡтылыҡ һыҙаты шәйләгәндәй булдым. Ул, күрәһең, кескәй генә бер тишектән төшкән көн яҡтыһы ине. Һүрән емелдәгән алыҫ йондоҙ төҫлө был яҡтылыҡ әле пәйҙа була, әле юғала.

Мин, уға тапҡырлап, тағы ла киттем. Барған һайын, яҡтылыҡ киңәйә, сағыулана төштө. Уның һайын минең йөрәгем, күкрәгемде бүҫеп сығарҙай булып, ярһынып типте. Был, моғайын, донъя йөҙөнә алып сыға торған берәй тишектер. Бәлки,

үҙемде ҡәбергә төшөргәне кеүек үк икенсе өңдөр. Мин шулай уйланым да яҡты һарҡып ингән тишеккә ҡарай тағы ҡабаланып атланым.

Был, ысынлап та, яҡты донъяға алып сыға торған киң генә өң икәнсе! Ҡәберлеккә инеп, ундағы мәйеттәрҙе ашар өсөн уны ҡырағай януарҙар өңгән икән. Күрәһең, улар ошонан инеп, кеше ите менән һыйланалар ҙа, туйғас, ҡабат ошонан тышҡа сығып китәләр.

Был тишек ауыҙына барып еткәс, минең һөйөнгәндәремде белһәгеҙ! Барса ҡайғыларым, ҡул менән алған шикелле, бер юлы юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Күңелем кинәнес кисерҙе. Тимәк, мин йәнә үлмәктән ҡалдым. Ул ғынамы һуң әле? Мин был юлы үлгәндән һуң ҡабат ер тормошо менән йәшәй башлаясаҡмын. Был төш кенә түгелме икән, тип шөрләп тә ҡуям үҙем.

Мин тишеккә табан шаҡтай текә таш стена буйлап үрмәләнем. Аяҡ-ҡулым менән тырмаша торғас, көс-хәлгә уның тәңгәленә менеп еттем һәм, ниндәй шатлыҡ, уның аша тышҡа сыҡтым! Күҙҙәрем яҡтыға эйәләшкәс, тирә-яғыма күҙ һалдым. Мин сағыу зәңгәр диңгеҙ буйында бейек тау битендә баҫып тора инем. Ипләберәк ҡарағас, шуны төшөндөм: был тау диңгеҙҙе әлеге ҡәһәр төшкөрө ҡаланан айырып ята. Унан бында тураға килерлек түгел. Ул яҡтан тыныс булырға мөмкин.

Миңә тағы ла ҡотолоу яҙғаны өсөн тәңрегә рәхмәттәр уҡый-уҡый, мин ҡабаттан ҡәберлекмәмерйәгә индем дә, әүәлге торлаҡ урыныма барып, артып ҡалған аҙығым менән һыуымды алып сыҡтым. Икенсе инеүемдә кейемем өҫтөнән үлектәрҙән табылған кейемдәрҙе ҡатлап-ҡатлап кей-

ҙем, кеҫәләремә бик күп итеп аҫыл таштар, алтын-көмөш тултырҙым. Былар менән мәрхүмдәр һәм ҡәбергә төшкәс мәрхүм булаһылар бик бай рәүештә биҙәлгәне мәғлүм инде. Тау ҡыуышының ауыҙына еткәс, кейемдәремде һалып, уларҙан бау ишеп, баҫҡыс яһаным.

Бына шул баҫҡысым буйлап мин көн һайын мәмерйәгә инеп-сығып йөрөргә керештем. Һәр бер юллағанымда күҙем еткән ҡәҙәре ынйы-мәрйен, башҡа төрлө биҙәнеү-төҙәнеү өсөн матурлап яһалған аҫыл таш һырғалар, алтын-көмөштән ҡойолған гәйре шаҡы-шоҡо тейәп сығыр булдым. Тереләй ҡәбергә төшөрөлгәндәр яндағыларын ашап бөтмәй үлһә, уларҙың аҙығына, һыуына эйә булам. Ундай хәлдәр булғылап тора.

Ҡәберлеккә ҡабат инеп сыҡҡандан ҡалған ваҡытымды көн һайын диңгеҙ буйында ултырып уҙғарам, бәхетемә ҡаршы, берәй карап-маҙар килеп сыҡмаҫмы тигән өмөт менән көтәм. Көтәм-көтәм дә тағы мәмерйәгә инеп, ҡиммәтле нәмәләр күрәп алып сығам. Шул рәүешсә мин уларҙы ташып бөтөрөп, диңгеҙ буйына тауҙай итеп өйөп ҡуйҙым инде.

Бер мәл шулай, ғәҙәтемсә, яр буйында, күҙҙәрем талғансы, тилмереп диңгеҙ киңлеген байҡап ултырам. Ҡараһам, ни күҙем менән күрәйем, алыҫтан бер карап уҙып бара. Мин оҙон ҡолға алып, уның осона, кейемдәрем араһынан табып, бер аҡ әйбер бәйләнем дә, шуны күтәреп, бар көсөмә болғарға тотондом.

Күпме шулай болғағанмындыр. Инде хәлдән тайҙым тигәндә генә, тегеләр, минең яғыма күҙ һирпеп, күреп ҡалдылар булһа кәрәк. Тау башы-

на менеп яу һалып ҡысҡырғанымды ла ишеткәндәрҙер, бәлки. Карап миңә ҡарай боролдо. Ярға яҡынлашҡас, унан кәмә төшөрҙөләр. Кәмәгә бер төркөм кеше тейәлешкәйне. Улар, ярға яҡыныраҡ килгәс, һорашырға керештеләр: «Һин кем булаһың? Был урында ни бөтөрөп ултыраһың? Был тауға нисек менә алдың? Бында бит ғүмерҙә лә кеше аяҡ баҫҡаны юҡ ине...»

«Мин — сауҙагәрмен, — тип яуап бирҙем. — Мин ултырған карап батты. Мин бер таҡтаға йәбешеп ҡотолоп ҡалдым. Шуның менән йөҙә торғас, бына ошо ергә килеп сыҡтым. Сиктән сығып арыған-талсыҡҡан булһам да, иҫән ҡалдым. Бына ошо әйберҙәремде лә иҫән көйөнсә үҙем менән бергә ҡотҡарып алып сыға алдым».

Улар мине үҙҙәре янына кәмәгә алдылар, мин ҡәберлектән алып сыҡҡан ҡиммәтле нәмәләрҙе, аҫыл кейемдәрҙе лә шунда тейәнеләр. Ошоларҙың һәммәһен дә карапҡа илтеп еткереп бушатҡас, мине капитан ҡаршыһына алып барҙылар. Ул да, үҙ сиратында, һорашырға кереште:

«Эй әҙәм балаһы, — тине ул, — мин бынан күпме йөҙөп уҙғаным бар. Ошо төйәктә кеше заты күҙемә салынғаны булманы. Бары ҡырағай януарҙар ғына таштан ташҡа ырғып йөрөгәнен күрә инем. Ҙур ҡалаларҙан да, кеше йәшәй торған ғәйре урындарҙан да уны бынау әҙәм күтәрелгеһеҙ бейек тау айырып ята ла баһа. Һин бында ни рәүешле килеп эләгәһе иттең?»

«Мин — сауҙагәрмен, — тип яуапланым мин уға ла, — ҙур бер карапҡа ултырып китеп барғанда, дауыл ҡубып, тулҡындар ҡотороша башланы ла, карабыбыҙ батты. Мин унда булған барлыҡ

әйберҙәремде лә бер киң таҡтаға бәйләп, үҙем дә уға атланып ултырып өлгөрҙөм. Шул рәүешсә батып үлеүҙән ҡотолоп ҡалдым. Тулҡындар мине ошо әйберҙәрем менән бергә бынауы әҙәм аяғы баҫмаған ярға — бынау текә тау буйына килтереп быраҡтырҙы. Бик күп көндәр буйы, берәй карап килеп сыҡмаҫмы икән, тип зарығып көтөп ултырҙым. Бына, бәхетемә ҡаршы, һеҙ тап булдығыҙ...»

Мин уларға үҙемдең ошо тау артында булған ҡалала, ундағы батшалыҡта ниҙәр күргәнемде, ҡәһәр төшкән мәмерйә-ҡәберлектә ни рәүешле үлмәктән ҡалып, тишектән яр буйына килеп сыҡҡанымды ләм-мим бер һүҙ менән дә ысҡындырманым. Шул яман ҡаланан бында берәйһе булыр ҙа мутлығымды фашлар тип шөрләнем.

Шунан капитанға мөлкәтемдә булған хазинанан бер өлөш сығарҙым да: «Әй мәрхәмәткә мөлдөрәмә тулы күңелле хөрмәтле әфәнде! Был ҡырағай төбәктән иҫән ҡотолоп ҡалыуым өсөн мин бары һеҙгә генә бурыслымын. Бына шуның әжере итеп ошо кескәй генә бүләкте, рәхим итеп ала күрсе!» — тинем.

Ләкин капитан бүләгемдән ҡырҡа баш тартты.

«Беҙ берәүҙән дә бер ни алмайбыҙ. Карап ҡыйралышына дусар булып һәләкәт ҡурҡынысы аҫтында ҡалған меҫкен әҙәм балаларын ҡотҡарып, уларҙы карабыбыҙға алып, тамаҡтарын туйҙырып, кейендереп, ятыр-торор урын биреүҙе үҙебеҙҙең бурысыбыҙ итеп иҫәпләйбеҙ; һәм беҙ ошо эште ҙур шатлыҡ менән башҡарып, үҙебеҙ үлемдән йолоп алып ҡалған мосафирҙы үҙ гаванына тиклем, ел-ямғыр тейҙермәй, имен-һау илтеп еткереп, тор-

мошон йүнгә һалып ебәргеләгәнсе тип, уға кәрәкяраҡ биреп, ғәйре ярҙам күрһәтеп оҙатабыҙ».

Мин уның һүҙҙәренә ҡаршы капитанға сәләмәтлек, оҙон ғүмер, малына бәрәкәт теләп, доға ҡылдым.

Карабыбыҙ ҡуҙғалып китте. Шул рәүешсә көн йөҙҙөк, төн йөҙҙөк, диңгеҙҙән диңгеҙгә, утрауҙан утрауға күстек. Мин карапта үҙемә тәғәйенләнгән урында, тағы ла бер үлемдән ҡөҙрәт көсө менән ҡотолоп ҡалыуыма сикһеҙ шатлыҡ кисереп, бер хәсрәтһеҙ ял итеп барҙым. Тик мәрхүмә ҡатыным янына тере килеш ҡәбергә төшөрөлөп, унда хәтһеҙ көндәр әҙәм ышанмаҫлыҡ яфалар сигеп йән аҫрағаным иҫемә төшһә, тәнем әҫеләһыуыҡлы булып китә, аңым томаланыр хәлгә киләм.

Бына шул рәүешсә бара торғас, бер мәлде иҫәнлектә-һаулыҡта Баһру ҡалаһына ла килеп юлыҡтыҡ. Мин унда караптан бушатындым. Был ҡалала аҙмы-күпме торҙом да тыуған ҡалам Бағдадҡа тиҙерәк ҡайтып етергә ҡабаландым. Бына, ниһайәт, үҙ мәхәлләмә аяҡ баҫтым, бына үҙ йортомдоң тупһаһын аша атлап уҙҙым. Мине күрергә туғантыумасам, дуҫ-ишем, таныш-тоношом йыйылып китте. Мин уларҙан үҙем юҡта ҡайһылай йәшәүҙәрен һораным. Улар минең хәлдәремде һорашты; иҫән ҡалыуым менән тәбрикләп, әйләнеп ҡайтыуыма ифрат ҙур шатлыҡтарын белдерҙеләр.

Мин сәфәрҙән мул итеп алып ҡайтҡан табышымды келәттәрҙә ыҡсым итеп таҫлап тултырып ҡуйҙым да яҡындарыма йомарт рәүештә бүләктәр өләшергә, фәҡирҙәргә хәйер-саҙаҡа бирергә,

етем-еçерҙе, тол ҡалған ҡатындарҙы кейендерергә керештем. Үҙем ҡот осҡос ауыр һәм ҡурҡыныс сәйәхәтемдә башымдан кискән үлемесле хәлдәрҙе онотор, йән тыныслығы табыр өсөн, дуç-ишем, туған-тыумасам менән ашап-эсеп, уйнап-көлөп кәйеф-сафа ҡорорға, бер ғәмһеҙ типтереп йәшәргә тотондом.

Бына шуларҙан ғибарәт минең дүртенсе сәйәхәтем. Туғанҡайым, хәҙер минең менән киске ашҡа рәхим ит тә ғәҙәттә үҙеңә бүләк ителә торған йөҙ мысҡал алтынды ал. Иртәгә тағы ла килерһең. Мин һиңә бишенсе сәйәхәтемдә ниҙәр күргәнемде, нindәй иç китмәле мажараларға юлыҡҡанымды бәян итермен. Уныһы быларынан да ҡурҡыныраҡ, хайраныраҡ.

Йөк ташыусы Синдбад өйөнә йүнәлде, унда төнө буйы йән белмәй рәхәт йоҡланы. Ә таң атып, ҡыҙарып ҡояш сыҡҡас, иртәнге намаҙын уҡыны ла, һөйләшелгән буйынса, сәйәхәтсе Синдбадтың өйөнә ҡарай йүнәлде.

Ингәс, хужаға хәйерле иртә теләне. Тегеһе уны асыҡ йөҙ менән әйҙүкләп ҡаршыланы: «Рәхим итәһегеҙ!» — тип үҙенең эргәһенән хөрмәтле урынды бирҙе.

Башҡа әфәнделәр ҙә йыйылғас, улар ҡәҙимгесә ашап-эсеп, уйнап-көлөп әҙерәк күңел астылар ҙа диңгеҙсе Синдбадтың бишенсе сәйәхәтендә башынан кискәндәрҙе тыңларға йыйындылар.

# БИШЕНСЕ САЙАХАТ



Бына шулай, туғанҡайҙарым, әйткәнемсә, дүртенсе сәйәхәтемдән һау-сәләмәт әйләнеп ҡайтыу шатлығынан мин, һәр төрлө тормош кинәнестәренә бирелеп, үҙем теләгәнсә рәхәт сигеп йәшәй башланым. Шул ҡыуаныстар эсендә уҙған сәфәремдә кисергән ғазаптарым тамам онотолдо ла бөттө, ҡайғы-хәсрәтем, аһ-зарым ел булып осто ла ҡуйҙы. Алып ҡайтҡан тауарҙарым өсөн бик күп аҡса йыйҙым. Килер ерем тағы ла киңәйҙе.

Шул мәлдә йәнем, яңынан сит-ят ерҙәр күрергә, диңгеҙҙәр гиҙергә, мажаралар кисерергә вәсүәсә һалып, түҙеп торғоһоҙ итеп болоҡһой башланы.

Аптырағас, сыҙашып тора алмай, тағы ла бер сәйәхәт ҡылырға тәүәккәлләнем. Ғәҙәтемсә, ҡиммәтле тауарҙар, диңгеҙҙә йөҙөү өсөн кәрәк-яраҡ һатып алдым да уларҙы бик яҡшылап төргәктәргә төрҙөрҙөм. Шунан инде, хоҙайға тапшырып, Бағдад ҡалаһынан Баһруға ҡарай юл алдым.

Яр буйында тамаша ҡылып йөрөй торғас, күҙем бер бик матур, бейек, ныҡлы карапҡа төштө. Уның йыһаздары ла өр-яңы, ысынъяһау ине. Мин уны һатып алдым да капитан һәм матростар яланым. Трюмға ташып йөктәремде тейәгәнсе, ҡолдарыма уларҙың артынан аңдып торорға ҡуштым.

Шул ике арала яныма бер нисә бай сауҙагәр килеп, үҙҙәрен дә карабыма алыуымды үтенделәр. Мин уларға ла тауарҙарын карабыма ташып тейәргә ҡуштым. Әлбиттә, тегеләр миңә быны өсөн тейешле хаҡын түләнеләр. Беҙ, юлыбыҙҙың уң булыуына, сауҙабыҙҙың төшөмлө булыуына ниәтләп, күтәренке күңел менән диңгеҙгә сыҡтыҡ.

Ыңғайға иҫкән елгә елкәндәрен киреп, карабыбыҙ диңгеҙҙән-диңгеҙгә, утрауҙан утрауға йөҙҙө лә йөҙҙө. Төрлө илдәр үттек. Ҡоро ергә сыҡкан һайын тауарҙарыбыҙҙы арыу ғына хаҡтарға һаттыҡ, яңы тауарҙар тейәнек. Шул рәүешсә барҙыҡ та барҙыҡ.

Шулай алыш-биреш итеп, яңы ерҙәр хозур ҡылып бара торғас, ҙур бер утрауға барып юлыҡтыҡ. Утрау буш һәм шыҡһыҙ ине. Унда кеше генә түгел, бер ниндәй тере зат та йәшәмәй ине булһа кәрәк.

Ҡыҙырып йөрөй торғас, утрау уртаһында ғәләмәт бейек бер йомро аҡ нәмәгә тап булдыҡ. Мин уның рух тигән ҡоштоң йомортҡаһы икәнен белә инем инде. Тик минең иптәштәрем, аңын-тоңон уйлап тормай, был нимә икән, эсендә ни бар икән, тип ҡыҙыҡһынып, таштар менән бәргеләпһуҡҡылап уны ватырға тотондолар.

Бына йомортҡа сатнаны. Унан ташҡын булып шабырлап шыйыҡса ағып сыҡты. Иптәштәрем, берҙәм тотоноп, көс-хәлгә йомортҡа эсендәге себеште тартып алдылар, һуйҙылар. Унан бик күп ит булды.

Был эштәр ҡылынғанда мин карапта инем. Мин абайлап ҡарағанда, тегеләр зыҡ-ҡубышып йомортҡаны ваталар ине инде. Үҙҙәре:

«Ҡара, бына беҙ ниндәй табышҡа эйә булдыҡ!» — тип шатланып ҡысҡыралар.

«Туҡтағыҙ! Ни эшләүегеҙ был? — тип мин уларҙан да яманыраҡ итеп аҡырып ебәрҙем. — Был бит — рух тигән бик дәү, бик уҫал ҡоштоң йомортҡаһы. Хәҙер рух осоп ҡайтыр ҙа карабыбыҙҙы ла батырыр, үҙебеҙҙе лә һәләк итер!»



Тик тегеләр, табыш сәменә бирелеп, ҡыҙып алғайнылар инде, минең һүҙемә ҡайҙа ул ҡолаҡ һалыу!

Шул арала ҡапыл ҡояштың йөҙөн ниндәйҙер шөкәтһеҙ ҡара болот ҡаплап, көн битен йәмрәйтте, тирә-яҡ торған һайын ныҒыраҡ дәһшәтле ҡараңғылыҡҡа сума барҙы. Беҙ, ҡояш менән үҙебеҙҙең араға ниндәй ғәләмәт инде икән, тип аптырап күккә ҡараштыҡ. Ахыр килеп, төшөндөк: был, ҡанаттарын йәйеп, йомортҡаһы янына осоп ҡайтып килгән рухтың үҙе ине.

Рух, яҡыная төшкәс, әлбиттә, йомортҡаһының ниндәйҙер яуыздар тарафынан ватылған булыуын шәйләне һәм ҡолаҡ ярғыс тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе. Уның оранына ҡайҙандыр ата рух та килеп етте. Улар, күк күкрәгәнгә яҡын ҡот осмалы тауыштары менән ҡысҡырышып, беҙҙең өҫтә ҡыйылышып өйрөлөргә керештеләр.

Мин капитан менән матростарға:

«Йәһәтерәк карапҡа тейәлешә һалығыҙ! Якорҙы ысҡындырығыҙ! Юғиһә беҙгә һәләкәттән ҡотолоу юҡ!» — тип ҡысҡырҙым.

Капитан да, матростар ҙа карапҡа менеп, якорҙы ысҡындырғас, беҙ утрау ҡырлатып йөҙөп киттек.

Беҙҙең ҡуҙғалғаныбыҙҙы күргәс, дәү ҡоштар бер аҙға ҡайҙалыр ғәйеп булып торҙо. Беҙ инде был яуыз нәмәләрҙән ҡотолдоҡ, инде үҙ юлыбыҙ менән тыныслап, кинәнеп йөҙөргә мөмкин, тип уйланыҡ; был ҡурҡыныс утрауҙан йәһәтерәк алыҫлашыр өсөн тиҙлекте арттыра барҙыҡ.

Тик яуыз ҡоштар беҙҙе онотмағандар икән. Уларҙың, ҡыйҡыу-һөрән һалып ҡысҡырып, ар-

тыбыҙҙан ҡыуа төшкәнен күрҙек. Һәр икеһе тәпәйҙәренә ҡымтып, тауҙарҙан умырып алған ҙур-ҙур ҡая таш эләктергәйне.

Рухтарҙың береһе карап өҫтөнә тәңгәлләберәк тәпәйендәге ташты ысҡындырып төшөрҙө. Тик таҫыллы капитаныбыҙ шул мәлдә, сослоғо етеп, карапты бер яҡ ҡырға тайшандырып өлгөрҙө. Таш ситкә төштө. Ул диңгеҙҙе шул ҡәҙәре ҡаты иттереп сайпылтты, карап әле күккә сөйөлдө, әле йәһәннәмгә осто. Хатта тулҡындар араһынан тәрән диңгеҙҙең төбө яланғасланып күренеп-күренеп ҡалды.

Рухтарҙың икенсеһе карап өҫтөнә һөжүмгә кәйелде. Ул ташлаған таш карабыбыҙҙың ҡойроҡ тәңгәленә тура килде, уны ҡырҡҡа сәрпәкләне. Карапта булған барса кешеләр, әйберҙәр диңгеҙ төбөнә осто.

Мин дә, яҡты донъя менән хушлашып, бата башланым тигәндә генә, ҡулым бер нәмәгә ҡағылды. Һәрмәп тотоп алһам, был ҡыйралған карабыбыҙҙан аҡтарылған яҫы, оҙон бер таҡта булып сыҡты. Мин уға атланып алдым да, аяҡ-ҡулымды тарбаңлатып, ишергә тотоноп киттем. Ел менән тулҡындар миңә ярҙам итте.

Әлдә карабыбыҙ икенсе бер утрауға яҡында батҡан икән. Тулҡындар мине ултырған таҡтамнием менән шуның ярына илтеп бырағтырҙы. Мин иһә үлемем алдынан һуңғы һулышымды алдым тигәндә генә ҡоро ергә сығып тәгәрәнем. Сиктән ашып арығайным, асыҡҡайным, һыуһағайным. Урынымдан да ҡуҙғала алмайынса, ҡаты йоҡоға талғанмын.

Шул хәлемдә күпме ятҡанмындыр. Уянып китһәм, ағзаларымдың әҙерәк ял иткәнен тойоп алдым. Йөрәгем дә бернәсә тынысланған. Мин яйлап ҡына урынымдан торҙом да, бында ниҙәр бар икән, тип утрау ҡыҙырырға киттем. Һәм күреп хайран ҡалдым: утрау ожмах баҡсаларынан бер ере менән дә ҡайтыш түгел ине. Унда саф һыулы арыҡтар селтерәшеп ағып ята. Ағастар, башҡа төрлө үҫемлектәр ҡотороп үҫә, ҡыуаҡтан ҡыуаҡҡа осоп-ҡунып, былбыл-ҡоштар һайрай.

Утрауҙа һәр төрлө емеш-еләк тә бик күп булып сыҡты. Мин уларҙы туйғансы ашаным, һыуһындарым ҡанғансы арыҡтарҙан ятып һыуҙар эстем. Диңгеҙгә батмай, ҡотолоп, бындай мәрхәмәтле ергә килеп аяҡ баҫа алыуыма шөкрана ҡылып йөрөнөм. Кис булғансы инде арыу-талсығыуҙан аяҡтарым тыңламай башланы. Тик ҡайҙа ятып төн уҙғараһы икән тигән хәсрәт башыма төшмәне. Сөнки, күпме ҡыҙырһам да, утрауҙа бер генә лә йән эйәһенә тап булманым.

Шунда атлап йөрөгән еремдә үк ятып йоҡлаһам да, төнөм бик тыныс уҙҙы, бер төрлө лә борсолоу ғәләмәте кисермәнем. Ни ҡылырға белмәй, иртәнсәк тағы ла ағастар аралап башым һуҡҡан яҡҡа киттем. Ғәжәпкә ҡаршы, оҙаҡламай баҡса һуғарыу өсөн һыу ала торған бер ҡоҙоҡҡа барып төртөлдөм. Ҡараһам, тағы ла нығыраҡ ғәжәпкә ҡалдым: ҡоҙоҡ эргәһендә күрер күҙгә күркәм генә бер ҡарт ултыра. Ул ағас япраҡтарынан йүрмәп тегелгән сапан кейгән. «Был, моғайын да, берәй батҡан караптан ҡотолоп ҡалған минең шикелле үк берәй бәхетһеҙ мосафирҙыр», — тигән уйға килдем.

Артыҡ шикләнмәй, картҡа яҡын барҙым һәм яғымлы тауыш менән сәләм бирҙем. Ул миңә, теле менән бер ауыҙ һүҙ әйтмәй, бары ым менән генә яуап бирҙе.

«Әй хөрмәтле аҡһаҡал! Был урында һин ни эшләп ултыраһың?» — тип һораным мин унан.

Ҡартым миңә үтә лә моңһоу сырай менән тилмереп ҡараны ла, үкенесле итеп башын сайҡап, ҡул ишаралары менән: «Мине елкәңә атландырып, ҡоҙоҡтоң икенсе яғына күсереп алып барып ултырт әле», — тигәнде аңлатты.

Мин, бер һүҙһеҙ риза булып, эсемдән былай тип уйлап алдым:



«Был хоҙай бәндәһен үҙе ҡайҙа теләй — шунда күсереп ултыртайым әле. Бәлки, сауаплы булырмын. Ҡарт кешенең рәхмәтен алырмын. Китапта: «Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр», — тиелгән бит».

Ҡарт янына килдем дә, уны йәлп иттереп кенә күтәреп, яурыныма атландырҙым һәм үҙе теләгән ергә һә тигәнсе алып барып еткерҙем.

«Ҡабаланмай ғына төш. Йә, йығылып, имгәнеп ҡуйырһың», — тинем.

Теге төшөргә уйламаны ла, киреһенсә, һәр береһе быуар йылан кеүек аяҡтары менән муйынымды уратып һығып уҡ алды. Ә аяҡтары ҡапҡара, буйвол тиреһе һымаҡ, имәнес ҡытыршы. Ҡотом осоп, мин ирекһеҙҙән, тыбырсынып, ҡартты елкәмдән йолҡоп алып атып бәрергә уйланым. Ә теге уның һайын муйынымды аяҡтары менән нығыраҡ урата, сытырлатып быуа башланы. Мин, тын ала алмайынса, тамам ҡара янып, баҫҡан урынымда һуштан яҙып, үлек һымаҡ, ергә ауҙым.

Уғаса булмай, ҡарт аяҡ-ҡулдары менән яурыныма, башыма тибә, йоҙроҡлап төйөргә кереште. Ауыртыуҙан башҡаса әмәлем ҡалмағас, мин һикереп торорға мәжбүр булдым.

Ҡарт ҡулдары менән иң яҡшы емештәр аҫылынып торған ағасҡа табан ымлап күрһәтте: «Шунда алып бар!» — тип фарман бирҙе, йәнәһе. Ул ҡушҡан ергә алып барам. Бик ныҡ хәлдән тайып, ҡаршылаша башлаһам, ул аяҡ-ҡулы менән башымды дөмбәҫләргә керешә. Ә уның аяҡ-ҡулы тимерҙән дә ҡатыраҡ. Мин, ҡайһылай ғына хәлдән тайған булмайым, уны күрһәткән ерена

тәнтерәкләй-тәнтерәкләй илтергә мәжбүрмен. Саҡ ҡына яйлаһам, тын алырға әҙерәк туҡтап торһам, яурынымдағы яуыз ҡарт мине шунда уҡ туҡмарға керешеп китә. Бына шулай миңә ат йә ишәк урынына хеҙмәт итеү ҙә яҙған булып сыҡты.

Тышҡа сыҡҡыһы килһә, был ҡәбәхәт ҡарт мине ҡыуаҡ артына күләгәгә бороп индерә лә шунда елкәмдә үк оло ярауын да, кесе ярауын да башҡара. Ул яурынымдан көн дә, төн дә төшмәй; йоҡоһо килһә, муйынымды аяҡтары менән боғалаҡ кеүек уратып ала ла аҙ ғына серем итә. Йоҡоһонан уяныр-уянмаҫтан йәнә мине туҡмарға керешеп китә. Һис кенә лә ҡарышып тормай, күндәм рәүештә тегене үҙе күрһәткән ергә илтәм. Бер ҡатлыланып, ошо яуыз ҡартты йәлләп беренсе мәртәбә елкәмә ултыртҡаным өсөн бер туҡтауһыҙ үкенәм дә сабынам.

Шулай сиктән тыш ауыр хәлдә йәшәйем. Шыр һөйәккә ҡалып, тамам миктәп бөттөм.

«Бына бит. Ит изгелек — көт яуызлыҡ, тигәндәре шул булалыр инде, — тип уйлайым да: — Былай ғазап сигеп йәшәгәнсе, үлемең мең артыҡ», — тип хоҙайҙан йәнемде алыуын ялбарырға тотонам. Сөнки бындай тормоштоң сәғәте генә түгел, һәр минуты бер үлем.

Ошо рәүешсә байтаҡ көндәр буйы мәлғүн ҡартҡа ишәк булып хеҙмәт итергә тура килде.

Бер мәл ҡартҡа ашатырға емеш, йәшелсә һайлап йөрөгән арала бер урында ҙур-ҙур булып үҫеп ерҙә тәгәрәшеп ятҡан ҡабаҡтарға тап булдым. Улар араһында ҡояшҡа кибеп ҡорошҡандары ла бар ине. Мин бер кипкән ҡабаҡты алып, уны соҡоп, эсен таҙарттым да үҙемә билгеле йөҙөм еләге

үҫкән аҡланға ҡарай атланым. Йөҙөм еләген һығып, уның һуты менән ҡабаҡ эсен тултырғас, ауыҙын тығын менән томалап тығып, бер нисә көнгә әсетергә ҡояш битенә ултыртып ҡалдырҙым.

Оҙаҡламай ҡабаҡ эсендәге йөҙөм һуты ҡеүәтле шарапҡа әйләнеп өлгөрҙө. Мин, әҙерәк арыуталыуҙарымды онотоп, ҡанымды таратыр өсөн, көн һайын барып шул шарапты уртлаштырып китер булдым. Эсһәм, был иблес тоҡомонан булған ҡарт ҡулында ыҙаланыуҙарым саҡ ҡына еңеләйә төшкәндәй була.

Минең эскәнемде күргәс, шайтан ҡарт: «Нимә ул?» — тип һорай һалды.

«Бик шәп эсемлек был. Ғәйрәтте арттыра. Күңелде күтәрә».

Шул арала шарап эсеүҙән мин шаҡтай күңелләнеп алғайным. Ағастар араһында шашынып бейергә, йырларға, сәпәкә итергә керешкәнмен.

Быны күреп, елкәмдә ултырған ҡарт: «Ҡайҙа, ҡабаҡты миңә бир әле!» — тип ымланы. Татлы эсемлек бик йәл булһа ла, туҡмарға керешеүенән ҡурҡып, ҡабаҡты уның ҡулына тоттороорға мәжбүр булдым. Теге тәмләп ҡараны ла, күңеленә бик оҡшағас, ҡомһоҙланып, ыңҡылдатып йоторға тотоноп китте. Шул рәүешсә, бер туҡтамай, һуңғы тамсыһына тиклем һемерҙе лә ҡуйҙы. Аҙаҡ дөм буш ҡалған ҡабаҡты ергә атып бәрҙе.

Елкәмдәге ҡарт та оҙаҡламай күңеллелеккә тарыны, сәбәләнергә, теле көрмәлеп, йәмһеҙ тауыш менән аҡырырға-баҡырырға кереште. Тора торғас, ҡартымдың иҫереүе тамам етте. Уның ҡармауыс-аяҡтарының быуыны йомшарҙы. Ул елкәмдән осоп ҡала яҙып һәлп-һөлп килеп йөрөй.

Мин шуны ғына көткәйнем. Боттарын шаҡарып тотоп, муйынымдан айырып алдым да, эйеләбиреп, ҡартты ергә түңкәрә һуҡтым да ҡуйҙым. «Етте һиңә!»

Тик мин был яуыздан тамам ҡотолдом тип уйламай инем әле. Айныр ҙа ҡармауыстары менән ҡармап алып йәнә елкәмә атланып ултырыр. Юҡ инде. Көтөп тороп булмай. Мин ҙур бер ташты ҡуптарып алдым да һелтәнеп тороп тегенең башына тондорҙом. Түбәһенән шарлап ҡан китте. Тик үсем бының менән генә ҡанманы. Мин уның кәүҙәһен тамам лайлаға әйләндереп бөтөргәнсе дөмбәҫләнем дә дөмбәҫләнем. Ярар, интегеүҙәрем өсөн таман булды!

Азатлығыма кинәнеп, утрау ҡыҙырып йөрөргә, тәмле-татлы емештәр менән ризыҡланып, юғалған көсөмдө кире ҡайтарырға, ғазап сигеүҙәрҙән бар ағзаларымды ял иттерергә тотондом. Шул рәүешсә күңелем тамам тынысланып, йөрәгем үҙ урынына ултырҙы тиерлек.

Утрау буйлап йөрөйөм, иң тәмле, иң ныҡ бешкән емештәрҙе генә һайлап ашайым, саф һыулы арыҡтарҙан ятып һыу эсәм. Шунан был утрауға беренсе мәртәбә аяҡ баҫҡан урыныма — яр буйына барып ултырам да, берәй карап-маҙар күренмәҫме икән тип, күҙҙәрем талғансы диңгеҙ киңлектәрен байҡайым. Үҙем: «Был юлы ла, хоҙайҙан булып, бәхетем өҫкә ҡалҡһа ярар ине. Тыуған еркәйҙәремә ҡайтып, туған-тыумасам менән тағы бер күрешер өсөн әллә ниҙәр бирер инем!» — тип уйлайым.

Бер мәл ҡараһам, күҙҙәремә ышанмай торҙом. Алыҫта офоҡта кескәй нөктә булып бер карап кү-

ренде. Ул яй ғына яҡынайҙы ла яҡынайҙы. Ниһайәт, утрауға алыҫ та ҡалмай туҡтаны.

Юлсылар ярға сыҡты. Мин улар янына барҙым. Мине күргәс, улар ҙа, аптырашып, ҡаршыма килделәр, тығыҙ булып һырып алып, кем булыуымды, ниндәй бәләгә тарып, был утрауға нисек килеп эләгеүемде төпсөп һорашырға керештеләр. Мин үҙемә ни булғанын быларға бәйнә-бәйнә бәян итеп бирҙем. Тегеләр һүҙҙәремә хайран ҡалды.

«Һинең елкәңә атланып йөрөгән теге ҡартты диңгеҙ шәйехе тип атайҙар. Ул яуыздың ҡулына ҡапҡан бер генә әҙәм балаһы ла әлегә кәҙәре иҫән ҡотолғаны юҡ ине. Уның ҡармауыс-аяҡтарынан муйынын азат итеп, иҫән ҡалғандарҙың тәүгеһе һин булаһың. Ҙур ҡазанан имен-аман ҡотолоуың менән ҡайнар ҡотлайбыҙ!..» — тиеште былар.

Шунан һуң улар алдыма ашар-эсергә килтереп ҡуйҙылар. Мин туйғансы ашаным, һыуһыным ҡанғансы эстем; улар биргән кейем-һалым менән бер ҡаттан оятымды ҡапланым. Был шәфҡәтле кешеләр мине үҙ караптарына алдылар.

Көн барҙыҡ, төн барҙыҡ. Бара торғас, яҙмыш беҙҙе бик бейек ҡаралтыларҙан торған бер ҙур ҡалаға килтереп еткерҙе. Ни өсөндөр ундағы өйҙәрҙең һәммәһе лә диңгеҙгә ҡаратып һалынғайны.

Баҡһаң, был ҡала — маймылдар ҡалаһы тип йөрөтөлә икән дә баһа. Ҡояш байып, ҡараңғы төшә башлағас та, ҡаланың бар халҡы, ҡапҡаларынан туранан-тура диңгеҙгә сығып, кәмәләренә йә караптарына тейәлешәләр ҙә, төндә маймылдар тауҙан ҡалаға килеп тулыуҙан ҡурҡып, шунда ҡуналар икән.

Мине был ҡала ифрат та мауыҡтырҙы. Уны күрергә тип ярға сыҡҡанда, юлдаштарыма әйтеп китергә лә онотҡанмын. Шул сәбәпле карап мине бында ташлап киткән дә барған. Был серле ят ҡалала яңғыҙ башым ҡаңғырып йөрөргә торҙом да ҡалдым. Исмаһам,бер күҙ терәп барыр кешем юҡ.

Тәрән ҡайғыға сумып, бер мөйөштә һығылып илап ултыра инем, яныма был илдең бер кешеһе килеп туҡтаны.

«Эй әфәндем, һин сит ерҙәрҙән килгән әҙәмгә оҡшайһың», — тине.

«Әйе, — тип яуапланым мин. — Мин — сит илдән килгән бер меҫкен бәндәмен. Яңыраҡ ҡына бынауында килеп яғылған карапҡа ултырып килгәйнем. Ҡалағыҙҙың матурлығы менән хозурланып йөрөргә тип сыҡһам, тегеләр киткәндәр ҙә барғандар. Әйләнеп ҡайтыуыма ул урынында юҡ ине инде».

«Урыныңдан тора һал, — тине был ҡала кешеһе, — тиҙерәк беҙҙең кәмәгә инеп ултыр. Төнгөлөккә бында ҡалыу бик хәтәр. Маймылдар һәләк итер үҙеңде!»

«Рәхмәт һеҙгә!» — тинем дә, йәһәт кенә урынымдан ҡалҡынып, был мәрхәмәтле әҙәмдең кәмәһенә төшөп ултыра һалдым. Шунда уҡ кәмәләге кешеләр, шәп-шәп ишеп, ярҙан бер миль самаһына алыҫлаштылар. Бына ошонда төн уҙғарҙы улар. Мин дә улар янында ҡундым.

Иртәнсәк, ҡабат ярға сығып, һәр ҡайныһы һин дә мин үҙ юлдарына, үҙ шөғөлдәренә ашыҡты. Был — борон-борондан килгән үҙгәргеһеҙ ғәҙәт икән. Ҡараңғы төшөү менән, ҡалаға маймылдар көтөүе эркелешеп килеп тула ла унда тороп ҡал-

ған бәндәләрҙе һәләк итә икән. Ә иртән үҙҙәре, ағын һыу кеүек шыбырлап, ҡаланы ҡалдырып сығырға ҡабалананалар, ти. Унда улар баҡсаларҙа төрлө емеш-еләк менән туҡланып, тауҙар араһында йоҡлап көн уҙғаралар ҙа, кис булғас, йәнә ҡалаға ябрылышалар икән. Был ҡала әллә ҡайҙа алыҫта — ҡара тәнле кешеләр йәшәй торған яҡта ята икән.

Бына хәҙер мин һеҙгә ошо ҡалала үҙем менән булған иҫ киткес бер ваҡиғаны һөйләйем.

Мине иң беренсе булып осратып, аяныс хәлемдән ҡотҡарып, үҙе менән диңгеҙ өҫтөнә ҡунырға алып сыҡҡан кеше былай тине:

«Эй әфәндем! Һин бында ят бауыр кешеһең. Тамаҡ туйҙырырлыҡ берәй төрлө һөнәрең бармы һуң?»

«Эй туғанҡайым минең! Ант итеп әйтәм. мин бер һөнәргә лә эйә түгелмен. Бер генә эш тә эшләй белмәйем, — тип яуап бирҙем мин ҙур үкенес менән. — Мин — бары сауҙагәр генә, аҡса яһау, һатыу-алыуҙан башҡаны белмәйем. Минең бик яҡшы карабым бар ине. Уға бик күп тауар һәм алтын-көмөш тейәлгәйне. Ул диңгеҙҙә һәләкәткә тарыны. Барса мөлкәтем һыу төбөнә китте. Мин үҙем хоҙай ҡөҙрәте менән генә иҫән ҡалдым. Шунда ҡулыма таҡта киҫәге килеп эләкмәһә, үҙем дә тауарҙарым артынан киткән булырмын икән».

Был әҙәм урынынан торҙо ла миңә мамыҡтан туҡыған бер тоҡ килтереп тотторҙо. «Бына ошоно ал да уға күп итеп эре-эре ҡырсын таштар тултыр. Шуны артмаҡлап ал да, ҡала кешеләренә эйәреп, урманға бар. Мин уларға һиңә күҙ-колаҡ

булып йөрөргә ҡушырмын. Урманға ингәс, улар ни эшләһә, шуны ҡылан. Бәлки, шул рәүешсә бынан берәй карапҡа ултырып китеп, үҙ илеңә ҡайтып етерлек мая туплай алырһың».

Шунан был әҙәм мине эйәртеп ҡаланан алып сыҡты. Унда тоғома йомро-йомро эре суйыр таштар тултырып алдым. Шул мәлдә ҡаланан кешеләрҙең төркөм-төркөм булып сығып килгәнен күрҙем. Ҡанат аҫтына алып мәрхәмәт күрһәтеүсем мине улар ҡашына алып барҙы ла былай тине: «Был — сит илдән килгән әҙәм балаһы. Уны үҙегеҙҙең кәсепкә өйрәтегеҙ. Шуның менән ул, бәлки, үҙенә тамаҡлыҡ эшләй алыр. Үҙегеҙгә сауабы булыр».



Кешеләр мине яҡты йөҙ менән сәләмләп ҡабул иттеләр һәм оҙата килгән кешемә: «Әмерегеҙ — баш өҫтөбөҙ!» — тип баш эйҙеләр.

Уларҙың да һәр береһенең арҡаһында ҡырсын таш тултырылған ҙур-ҙур тоҡтар ине. Беҙ киттек тә киттек. Китә торғас, ғәшиптән тыш бейек ағастар үҫә торған уйһыуға барып сыҡтыҡ. Ул ағастарҙың башына бер генә әҙәм заты ла үрмәләп менә алмай икән. Уйһыуҙа себен урынына маймылдар мыжғышып йөрөй. Беҙҙе күргәс, улар ҡурҡышып ағас баштарына менеп китә һалдылар. Шуны ғына көткән кешеләр тегеләргә тоҡтарынан алып таш бәрергә керешеп киттеләр. Ә маймылдар, уларға яуап итеп, ботаҡтарҙан емештәрҙе өҙөп алып тондорорға тотондолар.

Өҫтөбөҙгә яуған емештәрҙең һинд сәтләүектәре икәнен таныным. Был әҙәмдәрҙән күрмәксе мин дә бер ике елле, бик бейек ағасты һайлап алдым да, шуның төбөнә баҫып, юғарыға таш сөйөргә керештем. Ә маймылдар өҫтөмә сәтләүек тубырлаттылар. Мин башҡалар ыңғайына уларҙы йыйып, тоғома тултыра бирҙем. Үҙем тултырып алып килгән таштар ырғытылып бөтөргә лә өлгөрмәне, тоғом емештәрҙән һытылырҙай булып та өлгөрҙө.

Бына шул рәүешсә, кәсепкә килгән кешеләр күпме күтәрә алалар, шул ҡәҙәре ҡимммәтле сәтләүек артмаҡлап, ҡайтыр яҡҡа юл тоттолар. Көн кисләй башлағанда, беҙ ҡалаға ҡайтып та еттек.

Мин үҙемә мәрхәмәт күрһәткән теге әҙәмдең өйөнә барҙым да йыйғанымды тотош уның алдына ҡуйҙым. «Һеҙгә минең рәхмәтем сикһеҙ. Шуның өсөн бына был һеҙгә бүләк булһын».

«Юҡ, ул үҙегеҙгә булһын. Һатығыҙ ҙа килеменең изгелеген күрегеҙ».

Шунан ул үҙенең келәттәренән береһенең асҡысын ҡулыма тотторҙо. «Сәтләүектәреңдең арыуыраҡтарын һайлап ал да ошонда өй. Аламараҡтарын баҙарға сығар. Көн һайын урманға барып ҡайтырһың да шулай итерһең. Бәлки, илеңә эйләнеп ҡайтырлыҡ мая туплай алырһың».

«Мине ҡыуандырған өсөн хоҙай үҙеңә гел генә шәфҡәт күрһәтһен».

Мин ул кәңәш иткәнсә эшләнем. Ҡаланан сығып, тоғома таш тултырып алам да, кешеләргә эйәреп, урманға барам. Тегеләр миңә ихлас рәүештә емештәре иң күп ағастарҙы һайлап күрһәтәләр. Шунан инде, мәғлүм булғанынса, эшкә тотоноп китәм. Маймылдарға мин таш бәрәм, улар миңә ямғыр урынына сәтләүек яуҙыра.

Ошолай итеп, бик күп сәтләүек һаттым. Емештәрҙең иң яҡшы тигәндәре келәттә лә тау кеүек өйөлөп китте. Аҡсам байтаҡ йыйылғайны инде. Мин уға күңелемә ятҡан шаҡтай күп тауар һатып алдым. Был ҡалала шулай бер ҡайғыһыҙ рәхәт итеп көн күреүемдә булдым. Һәр урында уңышҡа осраным, бындағы һәр кем мине яҡты йөҙ, йылы һүҙ менән ҡаршыланы.

Бер мәл диңгеҙ буйында йөрөй инем, ярға табан яҡынлашып килгән ҙур бер карапты күреп ҡалдым. Ул ҡалаға килеп туҡтаны. Унан бик күп сауҙагәрҙәр төштө. Тегеләр үҙ тауарҙарын һатырға, уның урынына күпләп сәтләүек алырға керештеләр. Мин дуҫымдың өйөнә ҡайттым да уға карап килеүе хаҡында әйттем, үҙемдең тыуған еремә ҡайтҡым килеүен белдерҙем.

«Үҙеңдең ихтыярҙа», — тине йорт хужаһы.

Күрһәткән мәрхәмәттәре өсөн меӊ-меӊ рәхмәттәр уҡып, мин уның менән бик йылы хушлаштым да, карап янына әйләнеп барып, уның капитанын эҙләп таптым. Карапты яллап, унда үҙемдә булған барса сәтләүекте тейәнем.

Карап шул көндә үк ҡуҙғалып та китте. Беҙ йөҙҙөк тә йөҙҙөк, диңгеҙҙән диңгеҙгә, утрауҙан утрауға күстек. Туҡтаған бер ерҙә мин сәтләүектәремде йүн генә хаҡтарға һаттым һәм үҙем ҡулай күргән тауарҙарға алыштырҙым. Бына шулай хоҙайҙың хикмәте менән үҙем юғалтҡанға ҡарағанда ла ишлерәк мөлкәткә эйә булдым.

Оҙаҡламай беҙ йәнә бер утрауға барып юлыҡтыҡ. Унда бик күп булып борос үҫә икән. Һәр бер борос тәлгәшен өтөп барған ҡояштан һәм ҡойма ямғырҙан һаҡларға уның өҫтөнә яҫы бер япраҡ йәйелгән. Ҡояш эҫеһе һүрәнәйгәс йәки ямғыр туҡтағас, әлеге хикмәтле япраҡ үҙенән-үҙе ситкә һәленеп төшә икән дә баһа. Был утрауҙа, һинд сәтләүегенә алыштырып, мин бик күп борос алдым.

Шунан һуң беҙ әл-Әсирәт тигән утрау янынан уҙып киттек. Унда ҡәмәр алоэһы үҫә икән. Шунан һуң тағы ла биш көн, биш төн йөҙгәс, ҡытай алоэһы үҫә торған икенсе бер утрауға барып еттек. Бындағы алоэ ҡәмәр алоэһына ҡарағанда ла шифалыраҡ икән дә баһа. Тик был утрау кешеләре әл-Әсирәт утрауындағыларға ҡарағанда ҡойтораҡ йәшәйҙәр; улар шарап эсеп типтерергә яраталар, намаҙ уҡыу, доға ҡылыу тигәнде белмәйҙәр.

Быларҙы уҙып киткәс, беҙ диңгеҙ төбөнән ынйы эҙләүселәр янына барып сыҡтыҡ. Мин сумыусы-

ларға бер нисәшәр бөртөк сәтләүек бирҙем дә: «Минең иҫәбемә лә сумып, бәхетемде һынап ҡарағыҙ!» — тинем.

Улар упҡынға сумып сыҡтылар ҙа: «Эй хөрмәтле әфәнде, бәхетегеҙ бар икән. Бына өләшегеҙгә сыҡҡаны», — тип алдыма бик эре, бик күп ынйылар килтереп һалдылар.

Мин улар алып сыҡҡан ҡиммәтле таштарҙы йыйып төйнәнем дә, беҙ, аллаға тапшырып, йәнә лә юлға сыҡтыҡ. Көн йөҙҙөк, төн йөҙҙөк, йөҙә торғас, бер мәл Баһру ҡалаһына килеп юлыҡтыҡ.

Мин унда аҙмы-күпме торҙом да Бағдадҡа йүнәлдем. Бына үҙ мәхәлләмә еттем, бына үҙ йортомдоң ишеген асып индем, туған-тыумасама, дуҫ-ишемә сәләм бирҙем. Улар мине сикһеҙ шатлыҡ менән ҡаршыланылар, тағы ла бер мәртәбә үлмәктән ҡалыу менән ҡотланылар.

Үҙем менән алып ҡайтҡан тауарҙарҙы келәтемә таҫлап тултырҙым да туған-тыумасама, ғәйре яҡындарыма бүләктәр өләшергә, етем-еҫерҙе, тол ҡатындарҙы кейендерергә, ярлы-ябағаға хәйер-саҙаҡа таратырға керешеп киттем. Сөнки хоҙай был юлы ла миңә үтә лә мәрхәмәтле булып сыҡты. Юғалтҡаныма ҡарағанда дүртләтә күберәк килем ҡайтарҙы.

Шатлығымдан инде мин, башымдан кискән барса хәсрәт-михнәттәремде тамам онотоп, бер ҡайғыһыҙ яҡындарым, дуҫ-ишем менән рәхәт сигеп йәшәй башланым. Теләгәнемде ашайым-эсәм, теләгән кешеләрем менән әшнәләшәм, теләгәнемде кейәм, теләгәнсә кәйеф-сафа ҡорам.

Бишенсе сәйәхәтемдә башымдан кискән иҫ киткес ваҡиғалар бына ошоларҙан ғибарәт. Ә хәҙер,

дуҫтарым, киске аштан ауыҙ итергә рәхим итәһегеҙ.

Киске аш мәжлесе тамам булғас, сәйәхәтсе Синдбад йөк ташыусы аҙашына, көндәгесә, йөҙ мыҫҡал алтын үлсәп бирергә әмер ҡылды. Тегеһе, хужаға рәхмәттәр уҡый-уҡый, өйөнә йүнәлде.

Йөк ташыусы Синдбад үҙ өйөндә бик рәхәт төн уҙғарып, таң атҡас тороп, иртәнге намаҙын уҡыны ла, ғәҙәтенсә, диңгеҙсе Синдбад өйөнә ҡарай йүнәлде.

Ингәс, ул йорт хужаһын сәләмләне, хәйерле иртә, сәләмәтлек, өйөнә бәрәкәт teләне. Сәйәхәтсе Синдбад уға үҙенең янынан хөрмәтле урын бирҙе. Башҡа ҡунаҡтар йыйылғылағансы, улар көңгөр-ҡаңғыр килеп ултыра торҙолар.

Башҡалар йыйылып бөткәс, өҫтәлдәр теҙелде, улар өҫтөнә бик тә затлы һыйҙар мулы менән ҡуйылды. Ҡунаҡтар ашарға, эсергә, кинәнеп күңел асырға керештеләр.

Бына шунан һуң Синдбад уларға үҙенең алтынсы сәйәхәтен һөйләргә тотондо.

# Алтынсы сәйәхәт



Һөйләгәнемсә, туғанҡайҙарым, бишенсе сәйәхәтемдән әйләнеп ҡайтҡас, бер хәсрәтһеҙ кәйеф-сафа ҡороп, дуҫ-иштәрем, яҡындарым менән һин дә мин йәшәй торғас, унда кисергән михнәттәремде тамам онотоп бөтөрҙөм. Кинәнес, шатлыҡ эсендә рәхәт сигеп йөҙәм генә.

Шул рәүешле матур көндәр бер-бер артлы уҙа ғына. Бына шундай гүзәл көндәрҙең береһендә эргәмдән бер төркөм сауҙагәр уҙып барғанын шәйләнем. Уларҙың алыҫ яҡтарҙан сәйәхәттән ҡайтып килгәне әллә ҡайҙан күренеп тора ине. Шунда ла инде үҙемдең бишенсе сәйәхәтемдә илдәр гиҙеп, алыш-биреш итеп, күңелем ҡанғансы ерһыу күреп әйләнеп ҡайтҡанымды, туған-тыумасам, яҡындарым, дуҫ-ишемдең һағынышып, сәләмләп ҡаршылағаны ҡылт итеп иҫемә төштө. Тағы шулай ерҙәр күреп, кинәнгәнсе сәйәхәт итеп, сереп байып, яңынан тыуған ергә аяҡ баҫыу шатлығын кисерәһем килеп китте.

Күңелем болоҡһоуына сыҙаша алмай, мин күп итеп бик затлы тауарҙар, диңгеҙҙә йөҙгәндә ҡулай булырлыҡ ғәйре кәрәк-яраҡ һатып алдым да, шуларҙы таҫлап төйөнсөктәргә бәйләп, Бағдадтан Баһру ҡалаһына ҡарай юл тоттом.

Оҙаҡламай диңгеҙҙә матур бер ҙур карапҡа күҙем төштө. Уға шулай уҡ бик затлы тауарҙар хужаһы булған бик күп бай сауҙагәрҙәр, ғәйре һиммәтле кешеләр тейәлешкәйне. Мин дә төйөнсөктәремде уларҙыҡы янына һалдым да, беҙҙең карап был ҡаланан имен-аман ғына ҡуҙғалды.

Көн йөҙҙөк, төн йөҙҙөк, бер урындан икенсеһенә күстек, бер ҡаланан ҡуҙғалып китеп, икенсеһенә барып еттек, сит-ят ерҙәр күрҙек, һатыу-

алыу менән шөғөлләндек. Был сәйәхәттә бәхет гел алдыбыҙға ғына сығып торҙо. Тауарҙарыбыҙ бик үтемле булды, кеҫәләребеҙ бик тиҙ ҡабара барҙы.

Шулай бер ҡайғыһыҙ барған ыңғайға, ҡапыл капитаныбыҙ үкереп-үкереп иларға, һаҡалын йолҡҡоларға кереште. Сәлләһен сисеп ташланы, битен сыйғылай, палуба буйлап сәбәләнеп йөрөй башланы. Ахыр килеп, тәрән ҡайғыһына сыҙаша алмай, трюмға ауып уҡ төштө.

Барлыҡ мосафирҙар, уның тирәһенә йыйылып алып, төпсөнөп һорашырға керешеп киттеләр: «Эй капитан, һиңә ни булды?»

Ул һораусыларға аһ-зар аша былай яуапланы:

«Эй ғәзиз әҙәм балалары! Шул һеҙгә мәғлүм булһын: беҙҙең карап юл яҙлыҡҡанда, беҙ үҙебеҙ йөҙөп барған диңгеҙҙән икенсе диңгеҙгә сыҡҡанбыҙ. Теге диңгеҙҙә барыр юлыбыҙҙы яҡшы беләинек. Быныһында беҙ дөм-һуҡыр кеүекбеҙ. Аҙаштыҡ. Хоҙай тәғәлә берәй төрлө ярҙамын ебәреп кенә беҙҙе был диңгеҙҙән ҡөҙрәте менән ҡотҡарыу сараһын күрмәһә, һәммәбеҙ ҙә һәләк булдыҡ тигән һүҙ. Әйҙәгеҙ, барыбыҙ ҙа алланан мәрхәмәт ялбарып доғаларыбыҙҙы уҡыйыҡ!»

Шунан һуң капитан, аяғына көс-хәлгә баҫып, мачтаға менде лә елкәндәрҙе кереп ебәрмәксе булды. Ләкин шул мәлдә тиҫкәре ел, көсәйеп, карапты зыр түңәрәк килтереп артҡа борҙо. Ҡырыҫ булып тырпайышҡан ҡырлас таулы ярға яҡын урында карабыбыҙҙың руле ватылды.

Капитан мачтанан төштө лә һөрәнләп ҡысҡырып ебәрҙе: «Яҙмыштан уҙмыш юҡ, тигәндәр. Хоҙайҙың ҡушыуы менән беҙ бик тә ҙур бәләгә тарыныҡ. Унан иҫән ҡалыу юлы юҡ беҙгә!»

Барсабыҙҙың да йәшәүгә булған өмөттәре өҙөлдө, һәр ҡайһыбыҙ һәләкәттең сигендә баҫып тора ине. Юлсылар үҙҙәренә-үҙҙәре йыназа уҡырға, бер-береһе менән хушлашырға керешеп киттеләр. Шул арала карабыбыҙ, ел ихтыярына бирелеп, әйләнеп-тулғанып барҙы ла ярҙан сурайып сығып торған ҡая ташҡа барып бәрелеп, селпәрәмә килде. Диңгеҙ өҫтөндә унан тороп ҡалған юнышҡылар ғына йөҙөп йөрөй ине. Барлыҡ сауҙагәрҙәр ҙә диңгеҙ ҡосағына ҡоланы. Уларҙың тауарҙары ла каран менән бергә диңгеҙ төбөнә китте. Бәғзеләре шунда уҡ батты, икенселәре тауҙарға аҫылынып ҡоро ергә үрмәләп сығыуға иреште. Мин дә ана шул ергә сығыу бәхете тейгәндәр араһында инем. Беҙ сыҡҡан тау-ташлы ер бер ҙур утрауҙыҡы ине. Уның тирәһен ҡыйралыуға тарыған караптарҙың ватыҡ-һыныҡтары ҡаплаған. Ә яр буйын батҡан караптарҙан диңгеҙ сайҡап сығарған һәр төрлө байлыҡ һибелеп ҡаплаған. Бындағы беренән-бере затлыраҡ, беренән-бере ҡиммәтлерәк нәмәләрҙе күреп, аҡылыңдан шашырға мөмкин.

Мин утрауға сыҡтым да ары-бире йөрөргә керештем. Шунда эсергә яраҡлы тәмле һыулы бер йылғаның селтерәп ағып ятҡанын күрҙем. Ул яҡындағы тауҙың итәгенән һарҡып килеп сыға ла, уны буйлап барып, икенсе башына барып етеп юғала.

Ҡая ташҡа бәрелеп селпәрәмә килгән караптан ҡотолоп тауға күтәрелгән кешеләр утрауға таралды. Уға һибелгән иҫәпһеҙ-һанһыҙ байлыҡты күреп, уларҙың иҫтәре китте, аҡылдары томаланды. Һуштары алыныуҙан улар аңҡы-тиңке булып йөрөй башланылар.

Мин дә әлеге селтерәп аҡҡан йылға төбөндә иҫәпһеҙ-һанһыҙ һәр төрлө ҡиммәтле мәғдәндәр, аҫыл таштар күрҙем. Яҡут таштар, ынйы-мәрйен уның төбөнә суйыр таш урынына ҡалын булып түшәлгәйне. Бына шулай иҫәпһеҙ-һанһыҙ байлыҡтар эсенән, ҡыуаҡтар араһынан был йылға селтерәп ағып ятыуын ғына белә.

Йәнә лә килеп был утрауҙа мин донъяла иң яҡшы иҫәпләнгән ҡытай һәм ҡәмәр алоэһы осраттым. Һуштарыңды алырлыҡ әғле хуш бөркөп ятыусы амбра тигән еҫле май бында тау ҡуйынынан шишмә булып урғып сыға ла утрауға, диңгеҙ ярҙарына тарала. Ҡыҙыу ҡояш битендә сайырланып, был ҡиммәтле нәмә аяҡ аҫтында бер кәрәкһеҙ сүп-сар кеүек йәйелеп ята.

Диңгеҙҙән һәр төрлө януарҙар сыға ла ошо амбраны ҡорһаҡтары кәпәйгәнсе һоғоноп, упҡынға ҡабат сума. Уларҙың эсендә амбра йылынып эрегәс, тегеләр уны диңгеҙгә кире сығаралар икән. Ул һыу өҫтөндә йәнә сайырланып ҡата ла диңгеҙҙең төҫөн үҙгәртә. Шул ҡатҡан амбраны тулҡындар ярға сығарып быраҡтыра икән. Амбра ҡәҙерен белгән сауҙагәрҙәр уны йыйып һаталар икән. Ә инде диңгеҙ януарҙары тарафынан йотолмай ҡалған амбра йылғаға ҡушылып аға, уның төбөнә ултырып ҡата һәм, ҡояш сыҡҡан мәлдәрҙә, һуштарыңды алырлыҡ татлы хуш еҫтәрҙе уйһыу буйлап тарата. Тик сей амбра ишелеп ятҡан был үҙәнгә бер генә әҙәми зат та аяҡ баҫа алмай, сөнки утрау һәр тарафтан ҡырлас тауҙар менән әҙәм үткеһеҙ булып уратып алынған.

Бына беҙ ошондай хикмәтле утрау буйлап ҡыҙырып йөрөйбөҙ, тәбиғәт тарафынан тыуҙырылған

ошо байлыкҡа иҫебеҙ китә. Ләкин уны ни эшләтергә икәнен дә белмәй, башыбыҙ ҡата.

Беҙ утрауҙың яр буйына әҙерәк миҡдарҙа ашанты йыйып тупланыҡ та уны самалап ҡына, бик ныҡ асыҡҡанда ғына ҡулланыр булдыҡ. Көнөнә йә бер, йә ике мәртәбә генә тамағыбыҙға алабыҙ. Ас үлем беҙгә торған һайын ҡурҡынысыраҡ булып янай бара ине.

Бына шундай көндө лә көтөп алдыҡ: юлдаштарым берәм-берәм үлә башланы, уларҙы диңгеҙ тулҡындары утрауға сығарып бырактырған туҡымаларға, йә иһә кейем ярпыларына кәфенләп ерләй киләбеҙ. Байтағыбыҙ бер ҡабым икмәккә интизар булып, ер ҡуйынына инде. Тереләр бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡалып бара.

Беҙ, диңгеҙ һыуы йотоп, эстәребеҙ аяуһыҙ ауыртыуҙан айырыуса яфаланабыҙ. Бына шулай сиктән тыш ыҙа сигеп йәшәй торғас, барса иптәштәрем дә гүр эйәһе булып бөттө. Уларҙы хәл ҡәҙәренсә тәрбиәләп ерләргә тырыштыҡ.

Ахыр сиктә, бер яңғыҙым ғына был утрауҙа тере килеш ҡалдым. Башта бик күп булып күренгән аҙыҡ та тамам наҡыҫ ҡына ҡалғайны инде. Мин, үҙ-үҙемде ҡыҙғаныпп, үкереп-үкереп иларға керештем. «Эй ғәзиз башыҡайым! Ниҙәр күрәһең бар икән тағы? Әгәр иптәштәремдән элегерәк үлгән булһам, ефетемде тәрбиәләп, йыуып, кәфенләп күмеүсе булыр ине. Хәҙер бит мине гүргә һалыр кеше лә юҡ. Кәүҙәмде эт-ҡош йолҡҡолап әләфтәләф итеп бөтөрәр инде!»

Бына шул хәлдә мин тағы ла бер талай ғүмер һөрҙөм. Шунан, яр буйына төшөп, үҙем өсөн бик тәрән итеп ҡәбер ҡаҙҙым. «Хәлһеҙләнеүҙең сигенә

сығып, үҙемә әжәл яҡынлашҡанын һиҙһәм, ошонда төшөп ятырмын да үлемемде тыныс ҡаршылармын. Ел өҫтөмә ҡом һибеп, яйлап мине күмер. Шул рәүешсә, әҙәмсә гүр эйәһе булырмын».

Шунда йәнә лә мине тәрән эс бошоу солғап алды. Бала аҡылы һаман сығып бөтмәгәне өсөн үҙ-үҙемде әрләргә, рәхәтләнеп йәшәп ятҡан өйөмдө, ҡаламды, илемде ташлап, сит-ят ерҙәргә сығып киткәнем өсөн әсе үкенес кисерергә керештем.

«Йә инде, ғәзиз башым, беренсе, икенсе, өсөнсө, дүртенсе һәм бишенсе сәйәхәттәрҙә кисергән үлемесле ҡот осҡос мажаралар, әҙәм күтәргеһеҙ ауырлыҡтар, михнәттәр етмәгәйнеме ни?»

Мин инде лә иҫән ҡалып, был бәләнән ҡотолоуымды өмөт тә итмәйем, һаман да булһа рәхәт кенә көн итмәйенсә, шашынып, алтынсы мәртәбә диңгеҙгә сығып киткән ҡәһәрле көнөмдө ҡарғайым.

«Йә инде, аҡсаға мохтаж инемме лә, башҡаға мохтажлыҡ кисерә инемме? Үҙ хазинамда булған байлығым, ни рәүешле генә самаһыҙ тотонһам да, үҙ ғүмеремә етеү генә түгел, мулы менән артын уҡ ҡалыр ине. Хатта уның яртыһын да бөтөрә алмай үлер инем».

Тик әҙәм тигәндең һаман да йәшәгеһе килә бит әле ул. Һуңғы сиккә тиклем ул тормошҡа сәтрәнләп йәбешеп ята.

«Хоҙай алдында ант итеп әйтәм, — тип уйлайым үҙ алдыма, — был йылғаның килеп сыҡҡан ере бар икән, уның бит ҡайҙалыр барып ҡойған ере лә булырға тейеш. Бәлки, ул кешеләр йәшәй торған берәй урынға ағып барып етә торғандыр. Әгәр ҙә мин үҙем һыйырлыҡ ҡына берәй бәләкәс һал яһап, һыуға төшөрөп, ултырып йөҙөп китһәм,



үҙемә ҡотолоу әмәле тапмаммы икән? Ошолай итеп, яҙмышымды тәңре ҡулына тапшырғанда, ҡотолоу юлы табылмаған сүрәттә лә, йылға төбөнә ҡолап шәһиттәр үлеме менән вафат булыу бәхетенә ирешер инем. Бында ятып үлеүҙән мең артыҡ булыр ине ул».

Ҡайғыларға бирелеп, ҡул ҡаушырып ултырыуҙан бер фәтүә лә юҡ. Мин утрау буйлап ҡытай һәм ҡәмәр алоэһы ағастарының олондарын, ботаҡтарын йыйып, бер урынға ташып өйөргә керештем. Уларҙы бәйләргә ҡая таштарға бәрелеп ҡыйралған караптарҙан ҡалып, тулҡын ярға килтереп ҡаҡҡан еп-ешеү бик ярап ҡалды. Шул арала яр буйында бик һәйбәтләп юнылған, йышылған таҡталар ҙа табылды. Ошо карап таҡталарын бүрәнәләргә ныҒытып бәйләп, йылғала иркенләп йөҙөрлөк ярайһы арыу ғына һал әтмәләп алыуға өлгәштем. Тырыша торғас, ул ныҡ ҡына килеп сыҡты.

Был эштәр тамам булғас, мин тирә-яғымда бер мәнфәғәтһеҙ аунап ятҡан алтын-көмөштө, аҫыл таштарҙы, ынйы-мәрйенде, ғәйре ҡиммәтле байлыҡтарҙы йыйҙым, шунан иң һәйбәтен һайлап ҡына сей амбра тупланым. Быларҙың һәммәһен дә ипләп һалыма урынлаштырҙым. Йылғала йөҙөү өсөн кәрәк-яраҡ та, янымда булған ҡойто ғына аҙыҡ та шулар янына һалынды. Шунан һалымды һаҡлыҡ менән генә һыуға төшөрҙөм. Һалдың ике яғына ҡулайлаштырып беркетелгән ике ҡолға ишкәк хеҙмәтен үтәйәсәк.

Шул эштәрҙе атҡарып, йылға буйлап һалды сәйәхәткә сығырға әҙерләгән арала, бер шағирҙың ошондай шиғыр юлдары хәтеремә төштө:

Тын тарлығыр ерҙә йәшәү ауыр.
Ташлап кит һин уны, ҡыҙғанма.
Ҡайҙа барма — төйәк табып була.
Тик йән генә бераү — ҡалдырма.
Болотлар ҙа көндәр, аяҙытыр ҙа.
Бәхет-ҡояш балҡыр бер килеп.
Бер кешегә ике тәҡдир булмай.
Ике гүргә инмәй бер кеше.
Алдарыңдан бармаҫ сапҡын-хәбәрсең.
Үҙеңә һин бары үҙең кәңәшсе...

Бына шулай, йәнемде яҙмыш иркенә тапшырып, мин мәғлүм йылға буйлап йөҙөп киттем. Үҙем барам, үҙем, был эшем ҡайһылайыраҡ барып бөтөр икән, тип уйлайым. Ул минең бәхетһеҙ башымды ҡайҙарға ғына илтеп олаҡтырыр икән инде? Барам, барам. Барған һайын йылғамдың тау ҡуйынына инеп сумыр осо яҡыная бара.

Бына йылғам инеп юғалыр мәмерйә ауыҙына ла килеп еттем. Икеләнеп тормайынса, тәүәккәлләп, һалымды шунда индерҙем һәм күҙгә төртһәң күренмәҫлек ҡуйы ҡараңғылыҡ ҡосағында ҡалдым. Ә көслө ағым һалымды һаман төпкәрәк әйҙәй, тау ҡарынына ашыҡтыра. Барған һайын өн тарая, тәбәшәкләнә бара.

Аға торғас, һалымдың ситтәре ҡаяға ышҡылып һыҙырыла, мәмерйә көмбәҙенә башым йышыраҡ бәрелә башланы. Ни булһа ла, кире уйлар әмәл юҡ. Терһәкте тешләп булмай.

«Әжәлем ошондалыр инде. Башҡа сараһы ҡалманы!» — тип уйлайым.

Һәләкәтемдең яп-яҡын ҡалғаны аҙым һайын нығыраҡ тойола бара. Йылға өҫтөндәге таш түшәм шул ҡәҙәре тәбәшәгәйҙе. Мин хәҙер һалыма

лыпашып йөҙ түбән ятып ағам. Юғарыла көнмө хәҙер, төнмө икәнен дә белмәйем. Ваҡыт иҫәбе минең өсөн тамам юҡҡа сыҡты. Шулай дегет кеүек ҡараңғыла, ҡыҫынҡылыҡта, йән өшөткөс хәүеф-хәтәр ҡосағында күпме йөҙгәнмендер — билгеһеҙ. Һәләкәтем мине һәр минут эргәмдә һағалап ҡына торалыр һымаҡ.

Ә тау аҫты йылғаһы минең һал йоратымды елдертеп йылдам рәүештә аға ла аға. Ул әле иркенерәк тау ҡыуышлығына барып сыға, әле үтеүе лә ситен булған тар ғына үткәүелгә барып ҡыҫыла. Ҡараңғылыҡ, иңем менән күтәргеһеҙ ауырлыҡ булып, торған һайын мине баҫа, иҙә бара.

Шул ауырлыҡҡа сыҙаша алмай, йонсоуҙан тамам ғажиз булып, тәрән йоҡоға талғанмын. Ә һалым һаман алға табан елдергән дә елдергән. Ошо хәлемдә күпме йөҙгәнмендер. Уяныпкитһәм, сағыу яҡтылыҡҡа күҙем ҡамашты. Тирә-яғымда сикһеҙ иркенлек тойоп, күкрәгемде киреп, тәрән тын алдым.

Һалым ярға яғылып, бер ағасҡа шаҡарып бәйләп ҡуйылғайны. Уны ҡара тәнле кешеләр төркөмө тығыҙ итеп уратып алған. Уянғанымды күреп, улар миңә үҙ телдәрендә өндәштеләр. Тик мин уларҙың ни һөйләгәндәрен аңламаным. Йоҡоға талғанда артабан йәшәүҙән тамам өмөт өҙгәнгә күрә, мин быларҙың барыһын да төшөмдә күрәмдер тип хис итә инем әле.

Әйткәнемсә, тегеләр үҙемә мөрәжәғәт иткәс, телдәрен төшөнмәүем арҡаһында, мин уларға бер яуап та бирә алманым.

Шул мәлдә бер әҙәм, башҡаларҙан айырылып, яҡынырaҡ килде лә ғәрәп телендә былай тине:

«Иҫәнме, беҙҙең ҡәрендәшебеҙ! Һин кем булаһың? Ҡайҙан килдең? Беҙҙең тарафтарға һине ниндәй елдәр ташланы? Был йылға ҡайҙан башлана? Был тау артындағы ил нисек тип атала. Ул яҡтан беҙгә бер кемдең дә үтеп сыға алғаны юҡ ине әле».

«Ә һеҙ кемдәр булаһығыҙ? Был ниндәй ил?» — тип һораным мин үҙ сиратымда.

«Эй хөрмәтле туғаныбыҙ беҙҙең! — тине теге әҙәм. — Беҙ — бынауы сәсеүлектәрҙең, емеш ҡыуаҡтарының хужаларыбыҙ. Беҙ уларҙы һуғарырға килдек. Ҡараһаҡ, һин һалыңда йоҡлап ағып киләһең. Беҙ уны тотоп алып бәйләп ҡуйҙыҡ. Һинең уянғаныңды көтөп алмаҡсы булдыҡ. Йә, инде был яҡтарға ни рәүешле килеп сыҡҡаныңды хәҙер һин беҙгә һөйлә».

«Хоҙай исеме менән ялбарам һинән, эй изге күңелле әҙәм, — тинем мин, — башта һин миңә тамағымды ялғарға берәй төрлө ризыҡ бир. Мин бик асмын. Шунан инде үҙең теләгән һорауҙарыңды бир».

Теге әҙәм йәһәт кенә йөрөп, миңә аҙыҡ алып килде. Мин туйғансы ашаным, эстем, әҙерәк хәл алдым, ҡурҡыуҙарымдан бернәсә тыныслана төштөм. Тамағым туйғас, күңелем дә күтәрелде.

«Был көндө лә күререм бар икән! Аллаға шөкөр!..» — тинем дә мин, был йылға буйлап тәүәккәл сәйәхәтем шулай имен тамамланыуына ғәйәт тә ҡыуанып, үҙем менән булған хәлдәрҙе баштан аҙағына хәтле бәйнә-бәйнә бәян итеп сыҡтым. Тау аҫтындағы тар йылға өҫләп сәйәхәт ҡылғанда айырата мөшкөл хәлдә булыуыма был кешеләр хайран ҡалды...

Улар һалым, унда булған аҡсаларым, ғәйре мал-мөлкәтем, аҫыл таштарым, ҡиммәтле мәғдәндәрем, ынйы-мәрйенем-нием менән бергә мине үҙҙәре менән алдылар ҙа батшалары ҡашына алып барҙылар, уға минең кемлегемде, ниндәй мажаралар кисеп был илгә килеп юлыҡҡанымды һөйләп бирҙеләр.

Батша мине: «Рәхим итәһегеҙ!» — тип, әйҙүкләп ҡаршыланы; эргәһенә ултыртып, хәлемде һорашырға кереште. Мин уға был сәйәхәтемдә үҙем күргәндәрҙе, белгәндәрҙе, башымдан кискән иҫ китмәле мажараларҙы башынан алып ахырынаса түкмәй-сәсмәй һөйләп сыҡтым.

Батшам хикәйәтемде иҫе китеп тыңланы, мине үлемдән ҡотолоп ҡалыуым менән тәбрикләне.

Шунан мин, һалым янына барып, унан мул ғына итеп алтын-көмөш, амбра, алоэ, ынйы-мәрйен алдым да шуларҙы батшаға бүләк итеп килтерҙем. Батша бүләктәремде ҙур кинәнес менән ҡабул итте, мине ҡанат аҫтына алып, оло ихтирам менән солғаны. Ул мине үҙенең һарайындағы иң яҡшы бүлмәләргә урынлаштырҙы. Тиҙ арала мин батшалыҡтың иң хөрмәтле, иң һиммәтле кешеләре менән дуҫлашып, яҡындан аралаша башланым. Улар мине ҙурланылар, юғарынан юғарыраҡ дәрәжәләргә күтәрҙеләр.

Мин батша һарайына, үҙ өйөм кеүек күреп, эйәләштем. Уны ташлағым да килмәй башланы. Минең тирәмдән кеше өҙөлмәй. Улар минең илем хаҡында ҡыҙыҡһынып һорашалар, һөйләгәндәремде ҙур диҡҡәт менән тыңлайҙар. Мин уларҙан ошо үҙҙәренең иле хаҡында һорашам. Улар ҙа әүәҫ рәүештә уның тураһында һөйләп бирәләр.

Бер арала батша үҙе минең илем, ундағы хәлифтәр хакимиәте тураһында ҡыҙыҡһынып һорашырға кереште, Бағдад ҡалаһының ҡайһы тарафта икәнен белеште. Мин үҙ илем хаҡында, ундағы гәҙел ҡанундар, хаҡ хөкөм хаҡында маҡтанып бәйән иттем.

«Валлаһи тип әйтәм, — тине минең һөйләүемә хайран ҡалған батша, — һеҙҙең хәлифегеҙҙең ҡылған эштәре мине һуң дәрәжәлә һоҡландыра. Үҙен күрмәйенсә үк мин уға ғашиҡ булдым. Уға бүләк әҙерләп, һинең артыңдан ебәрергә ниәтләнем».

«Әмерегеҙ — баш өҫтөм! Мин һеҙҙең аманатығыҙҙы оло шатлыҡ менән хәлифемә алып ҡайтып юлыҡтырырмын. Уға һеҙҙең ҙур мөхәббәтегеҙҙе күндерермен», — тип яуапланым мин.

Бына шул рәүешсә батша һарайында оло кинәнес кисереп, май эсендәге бөйөр шикелле, бер ғәмһеҙ йәшәй бирҙем. Батшам мине ифрат та яҡын күреп яратты, торған һайын ҙурҙан-ҙур ихтирам менән солғай барҙы.

Бер мәл шулай батша һарайында ултырған еремдән ниндәйҙер әҙәмдәрҙең Баһру ҡалаһына табан йөҙәргә ниәтлән, карап әҙерләй башлағандарын ишетеп ҡалдым.

«Бынан да яйлыраҡ сәйәхәттең булыуы мөмкинме ни!» — тип елкенеп уйланым мин, һәм сәғәтендә-минутында бер ҡәтғи ҡарарға килеп, батшамдың ҡулын үбеп, шул әҙәмдәр менән үҙ илемә ҡарай юлға тәүәккәлләргә уй ҡорғанымды мәғлүм иттем; тыуған еремде, йортомдо, яҡындарымды, ҡәрендәш-ырыуымды өҙөлөп һағыныуымды әйттем.

«Үҙ ихтыярыңда, — тине батша, — ҡайтҡың килә икән — мәйелең. Әгәр ҡалырға теләһәң, беҙҙе һуң дәрәжәлә бәхетле генә итерһең».

«Хоҙа ҡаршында ант итеп әйтәм, эй солтаным минең. Һин мине бәхет-шатлыҡ менән күмдең. Шәфҡәтең, мәрхәмәтең диңгеҙҙәрендә йөҙҙөрҙөң. Тик мин илемде, йортомдо, ғаиләмде үлеп һағындым, улар хаҡында тын алған һайын яманһыулайым», — тип әйтергә йөрьәтем етте.

Был һүҙҙәремде ишетеп, күңеле үтә лә нескәргән батша сәфәр сығырға карап әҙерләү менән мәшғүл булған сауҙагәрҙәрҙе үҙ ҡашына саҡыртып алды ла сәйәхәттә миңә күҙ-колаҡ булып, ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп кенә алып ҡайтып еткерергә ҡушты.

Ул мине бик ҡиммәтле, бик күп бүләктәр менән бүләкләне, карапҡа түләргә кәрәк хаҡты ла минең өсөн үҙе индерҙе. Вәғәҙә иткәненсә, Бағдад ҡалаһының хәлифе Һарун әр-Рәшиткә тигән ҙур бүләген дә минең арттан ебәрҙе.

Шунан мин батша менән, үҙемде ҡәҙер-хөрмәткә күмгән дуҫ-ишем менән ҡайнар хушлаштым да, башҡа сауҙагәрҙәр менән карапҡа ултырып, диңгеҙгә сыҡтым.

Ел дә гел ыңғайҙан иҫте, карап та бик яҡшы йөрөшлө ине. Беҙ, бер хәсрәт күрмәй, бер мәшәҡәт кисермәй көн йөҙҙөк, төн йөҙҙөк, диңгеҙҙән диңгеҙгә, утрауҙан утрауға күстек һәм ниһайәт имен-аман Баһру ҡалаһына барып юлыҡтыҡ.

Мин караптан ярға сыҡтым да был ҡалала бер нисә көн торҙом. Шунан, мөлкәтемде каруандарға тейәп, донъялағы гүзәлдәрҙән-гүзәл Бағдад ҡалаһына йүнәлдем.

Унда ҡайтып еткәс тә, беренсе сиратта хәлиф Һарун әр-Рәшит янына инеп, уға үҙем артынан аманат итеп ебәрелгән бүләктәрҙе тапшырып, сәйәхәттә күргән мажараларымды бәйән итеп сыҡтым.

Шунан үҙ мәхәлләмә ҡайтып еттем, үҙ өйөмдөң тупһаһын аша атлап сыҡтым. Күрергә тип барса туған-тыумасам, ҡәрендәш-ырыуым, дуҫишем йыйылып китте. Мин уларға йомарт рәүештә бүләктәр бирҙем һәм мохтажлыҡ кисереүселәргә хәйер-саҙаҡа таратырға тотондом.

Бер талай ваҡыт уҙғас, хәлиф мине үҙенең ҡашына саҡыртып алды ла йәнә лә ҡабатлап, был бүләк ҡайҙан, ул ниндәй маҡсат менән миңә ебәрелде, тип төпсөнөргә кереште.

«Әй ҡөҙрәтле солтаным минең! Мин ул утрауға карабым һәләкәткә тарыу арҡаһында ғына барып эләктем. Ул илгә тау ҡуйынындағы йылғала кәмә менән йөҙөп барып сыҡтым. Ул утрауҙың да, илдең дә, уның баш ҡалаһының да, һиңә бүләк ебәргән батшаның да исеме миңә мәғлүм түгел. Мин хатта хәҙер уның ҡайһы тарафта икәнен дә асыҡ ҡына күрһәтеп бирә алмайым», — тинем.

Шуға ялғап, мин хәлифкә алтынсы сәйәхәтемдә башымдан кискәндәрҙе, утрауҙағы йылға буйлап тау ҡуйынындағы хәтәр сәйәхәтемде, теге ҡалаға ни рәүешле барып юлыҡҡанымды, батшаның ниндәй һүҙҙәр әйтеп был бүләкте ебәргәнен яңынан түкмәй-сәсмәй ҡабатлап сыҡтым.

Хәлиф минең хикәйәтемә һуң дәрәжәлә хайран ҡалды; йылъяҙмасыларын саҡыртып, уны яҙып алырға һәм киләһе быуындарға ғибрәт булһын өсөн ҡаҙнаға һалып ҡуйырға бойорҙо.

Хәлиф Һарун әр-Рәшит миңә бик ҙур ихтирам күрһәтте, һәр йәһәттән оло хөрмәт менән солғап алды. Мин был сәйәхәтемдән һуң Бағдадта тағы ла ҙурыраҡ кинәнестәр кисереп, ғәм-хәстәр белмәйенсә, рәхәт сигеп йәшәнем.

Минең алтынсы сәйәхәтемдә башымдан кисергәндәрем бына ошоларҙан ғибарәт. Бойорған булһа, иртәгә һеҙгә етенсе сәйәхәттә күргәндәремде һөйләрмен. Уныһы элеккеләренә ҡарағанда ла мөғжизәлерәк, шомлораҡ».

Шунан һуң диңгеҙсе Синдбад аҫрауҙарына табын әҙерләргә бойорҙо. Мәжлестәгеләр ашап-эсеп алдылар. Бынан аҙаҡ диңгеҙсе Синдбад ғәҙәтенсә аҙашы — йөк ташыусы Синдбадҡа йөҙ мыҫҡал алтын үлсәп бирергә бойорҙо. Ул, бик ҡәнәғәт булып, өйөнә йүнәлде. Башҡа ҡунаҡтар ҙа, сәйәхәтсе Синдбадтың хикәйәтенә хайран ҡалып, йорттарына таралыштылар.

Өйөндә рәхәт сигеп төнө буйы йоҡлағас, йөк ташыусы Синдбад иртән тороп намаҙын уҡыны ла яңынан сәйәхәтсе аҙашының өйөнә килде. Башҡа ҡунаҡтар ҙа йыйылып өлгөрҙө.

Шунда ла инде сәйәхәтсе Синдбад етенсе сәйәхәте хаҡында һүҙ башланы.

# ЕТЕНСЕ САЙАХӘТ



Бына шулай, туғандар, алтынсы сәйәхәтемдән дә иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡас, тәүгеләренән ҡайтҡандағы шикелле үк, һис ҡайғыһыҙ көнө-төнө кинәнес эстәрендә рәхәт сигеп йәшәнем. Күңел асырға, шатланып йәшәргә урыны ла бар ине шул: был сәйәхәтемдән дә мин бик ҙур байлыҡ туплап ҡайтҡайным бит.

Тик бошоноу белмәй, бер ғәмһеҙ типтереп йәшәүҙәр артыҡ оҙаҡҡа барманы. Диңгеҙҙәрҙә йөҙөп, сит-ят ерҙәр байҡап, яңы кешеләр менән танышып, уларҙың һөйләгән ғибрәтле ҡиссаларын тыңлап йөрөйһө килеү теләгем торған һайын үҫә, йөрәгемде үрһәләндерә барҙы.

Күңелем болоҡһоуына сыҙаша алмай, мин йәнә юлға тәүәккәлләнем. Күпләп бик затлы тауарҙар һатып алдым. Уларҙы йәпләп төйөнсөктәр итеп төйнәттем. Сәфәрҙә файҙаһы тейерҙәй кәрәкяраҡ әҙерләнем дә, барсаһын тейәп, Бағдадтан Баһру ҡалаһына килдем.

Мин унда диңгеҙҙәр гиҙергә тип әҙерләп ҡуйылған бик яҡшы карапҡа тап булдым. Уға бай сауҙагәрҙәр тейәлешкәйне. Мин улар янына карапҡа ултырҙым, һәммәһе менән танышып, дуҫлашып алдым һәм беҙ, сәләмәтлегебеҙгә, именлегебеҙгә шөкрана ҡылып, сәйәхәтебеҙҙе башланыҡ.

Ҡытай тип аталған ҡалаға барып еткәнсе, ел дә гел ыңғайға ғына иҫте. Күңелебеҙ гел күтәренке булды, юл буйы сауҙагәрҙәр менән гәп һуҡтыҡ, сәйәхәттә күргәндәребеҙҙе, сауҙа хәлдәребеҙҙе бер-беребеҙгә һөйләп ваҡыт уҙғарҙыҡ.

Бына шул рәүешсә алға барған сағыбыҙҙа ҡапыл караптың моронона туп-тура һуғып ҡаты ел иҫте, ҡойма ямғыр башланды. Беҙ тауарҙа-

рыбыҙҙы сылатмаҫ өсөн уларҙы сүбәк һәм киндер менән ябырға керештек. Үҙебеҙ, бер-бер бәләгә тарып ҡуймаһаҡ ярар ине, тип шөрләйбеҙ. Шул мәл карабыбыҙҙың капитаны, урынынан тороп, еңдәрен һыҙғанды, сабыуҙарын ҡайтарып, билбауына йәпләп ҡыҫтырҙы ла бошонҡо төҫ менән мачтаға үрмәләп менеп китте, шунан тороп, уңға-һулға диҡҡәт менән ҡарарға тотондо.

Оҙаҡламай ул ғауғаланып түбән төштө лә, карабындағы сауҙагәрҙәр алдына баҫып, үҙенең битенә йоҙроҡлап һуғырға, һаҡалын йолҡорға керешете.

«Эй капитан, ни булды?» — тип һораныҡ унан.

Ул: «Бер-берегеҙ менән бәхилләшегеҙ ҙә үҙ-үҙегеҙгә ясин сығығыҙ. Дауыл беҙҙең меҫкен карабыбыҙҙы яңылыш юлдан алып киткән дә донъялағы иң алама диңгеҙгә килтереп сығарған!» — тип яуап бирҙе.

Шунан капитан мачтанан төштө, һандығын асып, бер киндер янсыҡ сығарҙы; янсығының ауыҙын сисеп, унан көлгә оҡшаған бер нәмә бушатты; шуны һыуға болғап ебетте лә, бер аҙ көткәс, еҫкәргә кереште. Аҙаҡ ул һандығынан ус аяһындай ғына китап сығарып уҡып ҡараны ла беҙгә былай тине: «Был китапта барса хикмәтле нәмәләр ҙә яҙылған. Унда, был ерҙәргә килеп юлыҡҡан әҙәмдәргә ҡотолоу әмәле юҡ, тиелгән. Был ер Батшалар төбәге тип атала. Пәйғәмбәрҙәребеҙ Дауыт менән уның улы Сөләймәндең ҡәберҙәре ошонда. Бында ҡот осҡос ҙур, ҡурҡыныс йыландар йәшәй. Бында килеп эләккән караптарҙы күреп ҡалып, диңгеҙ төбөнән шөкәтһеҙ балыҡ килеп

сыға икән дә унда булған бөтә нәмәһе менән бергә карапты һоғоноп йота ла ебәрә икән».

Капитаныбыҙҙың һүҙҙәренә беҙ тамам хайран ҡалдыҡ.

Ул һөйләп бөтөр-бөтмәҫтән ҡапыл карабыбыҙ һыу өҫтөндә ҡалҡына, юғарыға күтәрелә башланы, шунан бер мәл, йәһәннәмгә ҡолаған шикелле, ҡапыл түбәнгә атлыҡты. Бына шулай ҡот осмалы бәүелде ул. Шул арала, күк күкрәгәндәге һымаҡ, бик ҡаты дөһөрләү-гөрөлдәү ишетелде.

Ҡурҡыуыбыҙҙан төҫтәребеҙ, үлектеке кеүек, күм-күк булды. Ҡотолғоһоҙ һәләкәтебеҙ ҡаршыбыҙға килеп баҫҡайны. Күп тә көттөрмәйсә, диңгеҙ өҫләп беҙгә табан йөҙөп килгән тауҙай һыртлы бер балыҡ күренде. Ҡурҡыуыбыҙҙан шашыныр дәрәжәгә еттек, үкереп-үкереп илашырға, үлемгә әҙерләнеп, үҙ-үҙебеҙгә ясин сығырға тотондоҡ.

Балыҡ, яҡынайған һайын ҙурая барып, һуш китмәле дәүмәлгә әйләнде. Күп тә уҙмай, тәүгеһе янында унан да ҙурыраҡ икенсе бер балыҡ пәйҙа булды. Беҙ инде ҡурҡыуҙан ни үле, ни тере инек.

Яныбыҙға йөҙөп килеп еткән өсөнсө балыҡтың дәүлеген тәүге икеһе менән сағыштырырлыҡ та түгел.

Артабан үҙебеҙ менән ни булғанын мин саҡ-саҡ ҡына хәтерләйем. Өс балыҡ та беҙҙең меҫкен карабыбыҙ тирәләй зыр-түңәрәк яһап әйләнергә кереште.

Был уйындары ла бөтөп, иң аҙаҡ килеп сыҡҡан иң дәү балыҡ эсендә булған көллө нәмәләре менән бергә карапты йотайым тип, ауыҙын мәмерйәләй ҙур итеп асҡанда ғына, ҡапыл ҡаты ел иҫеп, карапты күтәрҙе лә бер ҡая ташҡа илтеп бәреп,

селпәрәмә килтерҙе. Ян-яҡҡа юнышҡылар ғына сәсрәште, барлыҡ сауҙагәрҙәр ҙә төйөн-төйөн итеп бәйләгән байлыҡтары-ниҙәре менән диңгеҙ төбөнә китте.

Ни ҡөҙрәт менәндер, һыу өҫтөндә мин бер үҙем тороп ҡалғайным. Батмаҫ өсөн өҫтөмдәге ауыр кейемдәремде йөҙөп барған ыңғайға бер-бер артлы һалып ырғыттым да бер ҡат күлдәксән көйөнсә генә тороп ҡалдым. Тулҡындар өҫтөндә әйләнеп-тулғанып шулай күпме йөрөгәнмендер? Тамам хәлдән тайып, диңгеҙ төбөнә киттем тигәндә генә ҡулым бер таҡтаға ҡағылды. Көс-хәлгә тырмашып, мин таҡтаға менеп атланып ултырыуға ирештем. Елдәр, тулҡындар минең таҡтамды



үҙ иректәренә алып теләгәнсә сайҡалтып, атындырып уйнатырға кереште. Бик оҙаҡ шулай үлемесле ғазап кисерҙем, уға сиктән сығып асығыу, һыуһау өҫтәлде.

Йәнемде әсе үкенес солғап алды. «Эй Синдбад, эй сәйәхәтсе! — тип өҙгөләнем мин үҙ-үҙемдә. — Теге сәйәхәттәреңдән төңөлөп ҡайтҡас, ҡабат сыҡмаҫҡа тип ваз кисеп, ҡайһылай йән рәхәтендә, гүзәл тыныслыҡта йәшәй инең бит әле. Тәүбәгә ҡайтҡан саҡтарың әҙ булдымы ни?! Диңгеҙгә икенсе мәртәбә сыҡмам тип, хәҙер нисәмә ҡабат анттар иткәйнең инде. Тик береһе лә ихлас күңелдән булмаған икән. Уларҙы боҙоп ҡабат атлығып сәфәр сығып китеү һиңә бер ни торманы. Был бәләләргә, үлемесле ғазаптарға тарыуыңда бары үҙең генә ғәйепле. Әйҙә инде, күрәсәгеңде туйғансы күр... Уны һинән башҡа берәү ҙә күрмәҫ. Был бәләләргә тарыуыңа бары һин үҙең генә, һинең үҙеңдең ҡомһоҙлоғоң ғына ғәйепле. Аҡсаң юҡ инеме лә, ғәйре байлығың юҡ инеме?..»

Әйе, мин аҡылға ултырғайным ултырыуын, бынан кире сәйәхәттәрҙән тамам төңөләрмен, тип тубалашҡайным, тик һуң ине шикелле инде. Бер һәләкәттән ҡөҙрәт көсө менән генә ҡотолдом тигәндә, икенсеһе алдында ҡыл өҫтөндәге шикелле торам.

Бына шулай, тулҡындар иркендә аяуһыҙ айҡалып-сайҡалып, бер көн уҙҙырҙым, үлмәктән-ҡалмаҡ хәлдә икенсе көнөм дә үтте. Ахыр килеп, диңгеҙ мине үҙем атланып алған таҡтам-ниемменән бер утрауға илтеп быраҡтырҙы. Утрауҙа селтерәшеп йылғалар аға, ағастар, ғәйре йәшел үҫемлектәр ҡотороп үҫә ине. Быларҙы күргәс, миңә йән

инде, тере ҡалыуға өмөтөм ныҡый төштө. Мин ағастарҙан өҙөп емештәр ашар, шишмәләрҙән ятып һыу эсер булдым. Йәшәүгә дәртем арттҡан-дан-артты, күңелем көрәйҙе, күкрәгем киңәйҙе, яурыным яҙылды.

Утрау ҡыҙырып шулай йөрөй торғас, мин уның теге яҡ башына барып сыҡтым. Унда ҡаты ағышлы бер ҙур ғына йылға, тулҡындарын ярға ҡаға-ҡаға, йылдам ағып ята ине. Һыуы эсергә яраҡлы сөсө һыу булып сыҡты.

Шунда минең элекке сәйәхәтемдә ошондай йылғаға тап булып, һал яһап, уға ултырып, кешеләр йәшәй торған ергә барып сыҡҡаным иҫемә төштө.

«Булмаһа, тағы ла үҙемә шундай һал әтмәләп алайым да шуға ултырып китеп ҡарайым. Бәлки, ул миңә бәләнән ҡотолоу килтерер. Ҡотола алмаһам, йөҙөп барған көйөнсә вафат булып, шәһиттәр үлеме менән теге донъяға күсермен. Был фани донъя мәшәҡәттәренән арынып, мәңгелек тынғылыҡҡа тарырмын.

Мин йөрөгән еремдә эшкә бик тә яраҡлы, бик тә ныҡлы ағастарҙы ауҙарҙым. Һуңынан ғына белдем: былар һандал ағасы булып сыҡты. Һал яһар өсөн уларҙан да ҡулайын табырмын тип өмөт тә итмә. Мин, дәртләнгәндән-дәртләнә барып, ағастарҙы сырмап үҫкән ныҡлы сырмалсыҡ үҫемлектәрҙе йолҡоп алып уларҙан бауҙар иштем. Бауҙарым ағастарҙы бер-береһенә беркетеп, шыплап бәйләргә бик ҡулай булып сыҡты.

Һал әҙер булғас, артыҡ уйланып тормай, мин уға ултырып алып, йылға буйлап сәйәхәткә сығырға тәүәккәлләнем. Оҙаҡламай һалым йылға-

ның тамағына барып етеп, асыҡ диңгеҙгә лә сығып китте. Мин үҙемде был юлы ла үлемдән ҡотҡарып иҫән ҡалдырған бәләкәй утрауым менән ҡушлаштым.

Ағым ыңғайына бирелеп, көн йөҙҙөм, төн йөҙҙөм, ике көн барҙым, тағы ла бер тәүлек йөҙҙөм. Шул арала бер тәғәм аҙыҡ та, бер йотом һыу ҙа ҡапманым тиһәң дә ярай. Мин инде һыуһауҙан, аслыҡтан тамам алйып, үлеме яҡынлашҡан меҫкен себеш хөкөмөндә үк тороп ҡалғайным инде.

Һәм ошо мәлдә һалым бер ҡая тау буйына килеп етте. Ҡараһам, һыу уның аҫтына шарлап ағып инеп китә икән. Мин, әүәлге сәйәхәтемдә тап ошондай һал менән тау ҡыуышлығына инеп киткәнемде иҫкә алып, һалымды ярға ягып туҡтатырға уйланым. Тик ағым минән байтаҡҡа ҡеүәтлерәк булып сыҡты. Ул ҙур көс менән һалымды тау аҫтына табан елтерәтеп кенә алып китте. «Үлемем ошо икән! Хәҙер инде әжәлдән ҡотолоп ҡалыу юҡ!» — тип кенә үҙ алдыма уйлап өлгөрҙөм. Мин инде тау ҡыуышлығында инем. Бына һалым бер арауыҡ барҙы ла иркенерәк урынға етте.

Ҡараһам, алдымда йылға тағы ла шашҡынырак булып, күк күкрәгәненә оҡшатып шарлап аға; ул, моғайын, елдән дә етеҙерәк елә торғандыр. Мин һалымдың уртаһына йөҙ түбән лыпашып ятып алдым да ағастарға сәтрәнләп йәбештем. Ағым мине үҙ иркенә юнышҡы урынына елтерәтеп кенә йөрөтә. Тулҡындар һалды, еп-еңел уйынсыҡ шикелле сөйөп уйната. Бына-бына унан түңкәрелеп ҡалам тип шөрләүҙән йәнем ус төбөндә генә тора.

Бара торғас, йылға һалым менән мине тау ҡыуышынан асыҡ ергә атып сығарҙы. Ҡыуанысымдан ни эшләргә белмәй, һалымды ярға илтеп яғырға бар көсөмә тырмашып ишергә тотондом. Тик иркенгә сыҡҡас, йылғаның ағышы оторо көсәйеп, ул ҡоторонҡо ташҡынға әйләнде. Һалыма үҙем теләгәнсә идара итергә көсөм бөтөнләй етерлек түгел ине. Ул ағым ыңғайына уҡ кеүек атлығып барыуында булды.

Шулай ағып бара торғас, бер мәл һалым ҙур бер гүзәл ҡалаға килеп тәңгәлләште. Йылға буйында төркөм-төркөм булып ҡарап торған кешеләр уға бау ырғыттылар ҙа, шуның менән сорнап тотоп алып, ярға һөйрәп сығарҙылар. Мин улар алдында аслыҡтан, хәлһеҙлектән, сиктән тыш ауыр ғазаптарға дусар булыуҙан тамам ғажиз булып, һушымдан яҙып, үлек кеүек ҡоланым.

Мин уянып киткәндә, ҡаршымда һиммәтле ҡиәфәтле бер ҡарт баҫып тора ине. Ул бындағы халыҡтарҙың олуғ шәйехе булып сыҡты. Шәйех: «Әйҙүк! Беҙҙең ергә рәхим итәһегеҙ!» — тине лә эргәмә бик затлы кейем-һалым ырғытты. Минең шыр ялангас тиерлек булыуым мәғлүм инде. Үҙемә тип килтерелгән кейемдәргә сорналып, әҙерәк оятымды ҡаплағас, шәйех мине үҙ артынан эйәртеп алып китте; иң башта мунсаға алып инде, шунан йән индергес яҡшы эсемлектәр эсереп, көллө тәнемә һөртөр өсөн хуш еҫле майҙар бирҙе.

Мунсанан сыҡҡас, шәйех мине үҙ өйөнә алып ҡайтты. Уның ғаиләһе килгән ҡунаҡты асыҡ күңел менән яратып, әйҙүкләп ҡаршыланы. Өйҙәгеләр, ҡыҫтай-ҡыҫтай, мине түрҙәге иң хөрмәтле урынға ултырттылар ҙа һәр төрлө затлы ашанты-

лар ҡуйып, һыйларға тотоноп киттеләр. Мин, тағы ла бер мәртәбә әжәлдән ҡалыуыма шөкрана ҡылып, ашарға, эсергә керештем.

Ашап туйғас, шәйехтең аҫрауҙары йылы һыу килтереп, ҡулымды сайҡаттылар, береһенән-береһе гүзәлерәк ҡол ҡыҙҙары таҫтамалдар тотоп торҙолар. Мин йомшаҡ ебәк таҫтамалдарға ҡулымды, ауыҙымды һөрттөм.

Бынан ары шәйех өйөндәге иң матур, иң аулаҡ бүлмәләрен миңә тәғәйенләне, ҡол ҡыҙҙарына, аҫрауҙарына миңә хеҙмәт күрһәтергә, бар теләгемде лә һә тигәнсе үтәй барырға бойорҙо. Тегеләре йүгерекләп мине тәрбиә итергә керештеләр.

Бына ошо рәүешсә ҡунаҡсыл был йортта мин йән тыныслығында һәм хан һыйында өс көн, өс төн йәшәнем, теләгәнемдә ашаным, теләгәнемдә эстем, хуш еҫтәр бөркөп торған баҡсаларҙа саф һауа һуланым. Барса хәүеф-хәтәрҙәр ҙә артта ҡалып, ҡәҙер-хөрмәт күргәс, мин үҙемде тамам сәләмәт итеп һиҙҙем, йөрәгем урынына ултырҙы.

Дүртенсе көн тигәндә, шәйех минең ҡашыма килде лә былай тине:

«Эй ҡәҙерле балаҡайым! Беҙҙең ергә рәхим итеп аяҡ баҫып, шатлығыбыҙҙы арттырҙың. Һине ҡотҡарған өсөн хоҙайға мең шөкөр! Хәҙер, теләһәң, минең менән йылға буйына — баҙарға барайыҡ. Һин унда үҙеңдең тауарыңды һатып, уның өсөн күп кенә аҡса йыя алырһың. Шуның әжеренә аҡсаң еткәнсе башҡа тауар һатып алырһың да улар менән сауҙа итергә тотонорһоң».

Мин, был кеше ниндәй тауар хаҡында һүҙ алып бара, тип бер араға аптырап ҡалдым.

Минең ниндәй тауарым булһын инде? Нимә хаҡында һүҙ алып бара икән шәйех әфәнде?

Аптырауҙа ҡалғанымды һиҙеп, шәйех һүҙен былай тип дауам итте:

«Әй ҡәҙерле балаҡайым! Уйланма ла, көйәләнмә лә! Әйҙә, баҙарға барайыҡ. Әгәр һинең тауарға берәйһе тейешле хаҡын бирерҙәй булһа, беҙ уны йәһәтләп атҡарып, шуның хаҡына кәрәкле яңы тауарҙар алыу сараһын күрербеҙ. Әгәр ҙә инде биргән хаҡтары һине ҡәнәғәтләндермәһә, мин уны алып ҡайтып, келәтемә бикләп ҡуйырмын да, тейер хаҡын бирергә риза булған сауҙагәрҙе көтөп алырбыҙ».

Мин шәйехкә ҡайтарып бер һүҙ ҙә әйтмәнем, бары эстән генә: «Барайыҡ. Ҡарайыҡ. Ул ниндәй тауар тураһында һүҙ алып бара икән? Шуны беләйек», — тип уйланым. Үҙем телем менән: «Әмерегеҙ—баш өҫтөм, шәйех ағаҡайым. Күрһәткән изгелегең өсөн миңә ни бойорһаң да, хаҡың бар!»

Мин уға эйәреп баҙарға сыҡтым. Баҡһам, шәйех ағайым минең һандал ағасынан үрелгән һалымды тағатҡан икән дә, шуны баҙар майҙанына теҙеп ҡуйып, һатып алыусылар саҡырырға өндәүселәрен ебәргән.

Бына сауҙагәрҙәр йыйыла ла башланы. Улар һандал ағасына бирер хаҡтарын, сәмләшеп, берећенән-береће арттырырға тотондо. Ахыр килеп, ул хаҡ мең динарға тиклем менде. Шунан арттырмай башланылар. Ошо мәлдә шәйех ағам миңә боролдо ла: «Үҙең ҡара, балаҡайым. Был баҙарҙа һинең тауарыңа ошонан да ҙурыраҡ хаҡ биреүсе булмаҫ. Шул хаҡҡа һатаһыңмы әллә күберәкте бирер көндәрен көтәһеңме? Булмаһа, мин уны

кире алып ҡайтып, келәтемә бикләп ҡуйырмын. Хаҡы артҡансы, ул шунда ята бирер», — тине.

«Эй бөйөк әфәндем! Ниндәй ҡарарға килһәң дә, хоҡуҡ һинеке. Һин — миңә шул ҡәҙәре лә изгелек эшләгән кеше. Үҙең теләгәнсә эшлә», — тинем мин.

«Эй балаҡайым минең! — тине ҡарт. — Әгәр был сауҙагәрҙәр биргәнгә мин тағы йөҙ динар өҫтәһәм, ҡиммәтле тауарыңды минең үҙемә һатыр инеңме?»

«Эйе, — тинем мин. — Тауарымды һиңә һатам».

Шәйех шунда уҡ аҡса һанап бирҙе, хеҙмәтселәренә миңә һал хеҙмәтен үтәгән һандал ағастарын үҙ йортона кире алып ҡайтып, келәтенә бикләп ҡуйырға әмер итте. Мин дә уға эйәреп ҡайттым.

Ҡарт шунда аҡсаларымды ҡабат һанап сыҡты ла, бер муҡсайға һалып, уларҙы тимер һандыҡҡа бикләне, асҡысын ҡулыма тапшырҙы.

Тағы бер нисә көн, бер нисә төн уҙғас, ҡарт шәйех миңә былай тине:

«Эй балаҡайым! Мин һиңә хәҙер ҡайһы бер кәңәштәр бирмәк булам. Шуларҙы ҡолағыңа элһәң, файҙаһы тейер».

«Кәңәштәреңде әйтеп ҡара. Мин уларҙы ысын күңелемдән тыңлармын», — тинем.

Шәйех былай тине:

«Беләһеңме, балаҡайым. Мин инде бик ҡартайҙым. Тик ир енесенән балам булманы. Уның ҡарауы, минең бик сибәр йәш кенә ҡыҙым бар. Уның матурлығы ла, байлығы ла етерлек. Мин уны һиңә кейәүгә бирергә теләйем. Уның менән

һин беҙҙең илдә төпләнеп ҡалыр инең. Аҙаҡ килеп, үлер алдымдан мин, шуға өҫтәп, мөлкәтемдә ниндәй байлыҡ булһа — көллөһөн дә һиңә васыят итеп ҡалдырырмын. Минең көндәрем һанаулы ҡалған инде. Һин урынымды биләрһең».

Мин, уйға сумып, бер һүҙ өндәшмәй, телдән ҡалдым.

«Кәңәшемде тот, балаҡайым. Мин бит һиңә изгелек теләйем. Һүҙемде тыңлаһаң, ҡыҙым менән икегеҙҙе никахландырырмын да бар байлығымды һиңә тапшырырмын. Сауҙа иткең килһә, сауҙа итерһең. Мөлкәтеңде тейәп, илеңә ҡайтып киткең килгән сүрәттә лә, һиңә бер ҡаршылыҡ булмаҫ. Һалыңды һатып туплаған аҡсаң да үҙ ҡулыңда. Уны үҙ иркең менән тотон», — тип дауам итте шәйех.

«Хоҙа алдында ант итеп әйтәм, солтаным минең шәйех, — тип яуап бирҙем мин. — Күп михнәттәр кисереүем, әллә нисәмә мәртәбә үлмәктән ҡалыуым арҡаһында минең зиһенем дә тарҡалып бөттө шикелле инде. Һин хәҙер атайым урынына ҡалған кешемә әйләндең. Миңә ни бойорһаң да, иркең бар».

Шунда шәйех хөкөмдар менән шаһиттар саҡырырға бойороҡ бирҙе. Тегеләр кисекмәй килде. Шәйех мине ҡыҙы менән никахланы, бик ҙурҙан ҡубып туй уҙғарҙы. Оло тантана үткәс, ул мине ҡыҙы менән ҡауыштырҙы. Ҡыҙ, ысынлап та, сиктән тыш сибәр, зифаларҙан-зифа буйлы булып сыҡты. Уның өҫтөнә кейгән аҫыл кейемдәре, биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәре, муйынына, беләгенә таҡҡан ҡиммәтле таштары, ҡашмауҙары, беләҙек, йөҙөктәре үҙҙәре генә лә мең-мең алтын бәйәһенә

торошло ине. Уларҙың иҫәбенә-һанына сыҡмалы түгел.

Ҡыҙ янына инеү менән мин уға үлеп ғашиҡ булдым. Беҙ бер ҡайғыһыҙ рәхәт сигеп донъя көтөргә керештек.

Оҙаҡламай ҡайным булған ҡарт шәйех, ашарын — ашап, йәшәрен — йәшәп, был донъяны ҡуйҙы. Беҙ уны бик ҙурлап, бик тә ҡәҙерләп ер ҡуйынына бирҙек. Уныҡы булған һәммә байлыҡ минең ҡулыма күсте, уның хеҙмәтселәре барсаһы ла минеке булды, миңә буйһондо.

Шәйехтең хакимиәте бик киң ине. Ул барса сауҙагәрҙәрҙең дә башлығы булып торҙо. Башҡа сауҙагәрҙәр уның һүҙенән сығып бер эш тә ҡылмаҫ, бер бөртөк тауар һатмаҫ, бер бөртөк тауар алмаҫ ине. Бына шулар мине үҙҙәренең шәйехе итеп ҡуйҙылар ҙа инде.

Был ҡала кешеләре менән яҡынлашып, аралашып йәшәгән арала мин уларҙа булған сәйер бер хәлде күргәйнем. Бындағы әҙәмдәр ай һайын үҙгәреш кисереп тора. Ирҙәренә ай һайын ҡанаттар үҫеп сыға ла улар күккә олғаша. Ерҙә балалар менән ҡатын-ҡыҙ ғына тороп ҡала.

Ошоно белгәс, минең башыма бер уй килде:

«Туҡта әле, ай башы килеп еткәс, мин уларҙың берәйһе менән һөйләшеп ҡарайым. Моғайын, ул мине үҙенең өҫтөнә атландырып осоп китергә риза булыр. Мин уларҙың ҡайҙа осоп барғандарын, унда ниҙәр ҡылынғанын белеп ҡайтайым».

Бына, ниһайәт, яңы ай ҙа тыуҙы. Мәғлүм булғанынса, барса ирҙәр ҡиәфәттәрен үҙгәртеп, дөм икенсегә әйләнде. Уларға ҡанаттар үҫеп сыҡты.

Шул мәл мин уларҙың береһе янына барҙым да: «Эй хөрмәтле хоҙа бәндәһе! Зинһар өсөн мине үҙеңә атландырып осороп алып китсе. Минең дә һеҙ күргән ерҙәрҙе күреп, хозурланып әйләнәһем килә», — тинем.

«Был — һис булмаҫтай эш», — тип яуап бирҙе теге.

Тик мин, уның быуынына төшөп, ныҡыша бирҙем.

Ахыр килеп, ул күнергә мәжбүр булды.

«Бер-бер ҡазаға тарыр булһаң, үҙеңә үпкәләрһең», — тине.

Ниһайәт, мин уға атланып алдым да, беҙ күккә олғаштыҡ. Киткәндә был сәйәхәткә тәүәккәлләремде өйҙәгеләрҙең береһенә лә мәғлүм итмәй киткәйнем.

Бына шул рәүешсә осабыҙ, осабыҙ. Ҡанатлы кешем талпынып-талпынып һаман алға, бейеккәрәк ынтыла. Мин, маҡып йәбешеп, уның яурынында ултырам. Бына шулай күк көмбәҙенә тиклем күтәрелдек. Унда фәрештәләрҙең илаһи моңло тауыштары ишетелә. Мин әйтеп аңлатҡыһыҙ оло кинәнес кисерәм. Шул рәхәтлеккә сыҙаша алмай, хоҙай тәғәләне данлап, мәдхиәләр уҡырға керештем.

Башым күк көмбәҙенә тейҙе тигәндә генә шайтандар осоп барыусы әҙәмдәр өҫтөнә тоҫҡап йәшен уҡтары яуҙырҙы. Улар, ҡанаттары үртәлеп өтөлөүҙән шөрләп, ҡапыл түбәнгә табан кәйелделәр. Был хәлгә, күрәһең, мин ғәйепле инем.

Тегеләр асыуҙарынан йәһәт кенә ергә төштөләр ҙә, мине тау башына ырағтырып, ҡабаттан күккә олғаштылар.



Бына шулай ҡая таштар араһында бер яңғыҙым торҙом да ҡалдым. Башһыҙлыҡ ҡылғаным өсөн мине йәнә бер мәртәбә әсе үкенес сорнап алды: «Йә инде, шунан һуң да үҙемдә аҡыл бар тип йөрө. Бер бәләнән илла-алла ҡотолоуым була — дыуамаллығым арҡаһында яманыраҡ икенсеһенә килеп тарыйым. Хәҙер инде быныһынан ҡотолоуҙы бөтөнләй өмөт итәһе түгел!»

Тау түбәһендә ҡаңғырып йөрөп ятам. Ҡайҙа барырға, ҡайҙа һуғылырға белмәйем.

Ҡапыл шунда ҡаршыма ике йәш үҫмер кеше килеп сыҡмаһынмы. Үҙҙәре килеп тороп тулған ай кеүек битле матурҙар. Икеһе лә алтын таяҡҡа таянғандар.

Мин уларға кеселекле төҫ менән сәләм бирҙем. Тегеләр яғымлы тауыш менән яуапланылар. Шунан һуң үҫмерҙәрҙән:

«Һеҙ кемдәр булаһығыҙ? Бында ни бөтөрөп йөрөйһөгөҙ?» — тип һорай һалдым.

Тегеләр:

«Беҙ — алла ҡолдары», — тип ҡыҫҡа ғына яуап бирҙеләр ҙә, минең ҡулыма ла саф алтындан ҡойолған таяҡ тоттора һалып, үҙ юлдарына ашыҡтылар. Мин, был ниндәй егеттәр булды икән, тип аптырашлы уйға сумып, йәнә тау башында япа-яңғыҙым торҙом да ҡалдым.

Шул мәл ҡапыл ғына тау аҫтынан шөкәтһеҙ ҙур бер йылан шыуышып, борғоланып килеп сыҡты. Ул ауыҙына бер кешене кендегенә ҡәҙәре йотҡан хәлдә ҡабып алған. Бахыр әҙәмдең аяҡтары ғына тарбаңлап килә.

Бәләгә тарыған кеше, башы йылан тамағында булған килеш, һөрән һалып аҡыра: «Мине был

ҡазанан йолоп алған кешене аллаһы тәғәлә мең ҡазанан ҡотҡарыр!»

Мин, артыҡ икеләнеп-уйланып тормайса, тәүәккәлләп йылан янына атлығып барып еттем дә мәлғүндең башына, бар көсөмә һелтәнеп, алтын таяғым менән тондорҙом. Йылан алҡымындағы кешене ауыҙынан сығарып атырға мәжбүр булды.

Арлы-бирле иҫ йыйғас, әҙәм балаһы минең ҡашыма килде лә былай тине:

«Эй изгелекле кеше! Был мәлғүн йылан ауыҙынан һин мине ҡотҡарып ҡалдың. Шулай булғас, хәҙер мин һинең тоғро юлдашың булырмын. Был тауҙар араһында бергә йәшәрбеҙ!»

«Рәхим итәһегеҙ!» — тинем мин ихлас күңелдән.

Беҙ тау аралап юлға сыҡтыҡ.

«Эй барҙыҡ, эй барҙыҡ, бара торғас, бер төркөм кешегә тап булдыҡ. Былар кемдәр булыр икән, тип диҡҡәтләп ҡарай торғас, мин улар араһынан үҙемде яурынына ултыртып осороп алып киткән кешене сырамытып танып алдым.

Мин уның ҡаршыһына баҫтым да ғәфү үтенергә керештем. «Ниңә улай мине ҡырағай тауҙар араһында бер яңғыҙымды ташлап киттегеҙ? Дуҫтар шулай итәләрме ни?» — тип шелтәләп тә алдым.

«Быға һин үҙең ғәйепле, — тип яуап бирҙе ҡанатлы дуҫым. — Күк ҡабағына менеп еткәс, һин, шатлығыңдан ни ҡылырға белмәй, хоҙайға рәхмәт уҡырға, уны данлап мәдхиәләр әйтергә керешеп киттең. Был унда мыжғышып йөрөгән шайтандарға оҡшаманы. Улар, асыуҙарынан ярһып, беҙгә йәшен уҡтарын яуҙырырға керештеләр.

Беҙ, ҡанаттарыбыҙ өтөлөүҙән шөрләп, тауҙарға барып төшөргә, һине ошонда ҡалдырырға мәжбүр булдыҡ».

Мин уға инәлергә керештем:

«Эй ҡөҙрәтле ҡанатлы әҙәмем! Зинһар, мин ғәйепле бәндәгеҙҙе ярлыҡап, ҡабат үҙеңә атландырып, ҡалабыҙға алып ҡайтып, ғаиләмә юлыҡтыра күр инде. Мин, күк көмбәҙҙәренә менеп еткәс, был юлы хатамды ҡабатламам, аллаһы тәғәләгә мәдхиәләр уҡыуҙан тыйылып ҡалырмын...»

Ҡанатлы кешем, күктәргә менгәс, аллаһы тәғәләне телгә алмаҫҡа тип, ҡабат һүҙемде алды ла яурынына ултыртырға ризалығын бирҙе.

Шунан беҙ был тауҙар түбәһенән күтәрелеп киттек. Эй остоҡ, эй остоҡ. Оса торғас, имен-һау ғына килеш үҙебеҙҙең ҡалаға килеп төштөк.

Ҡатыным мине ҡыуанып ҡаршыланы һәм былай тип киҫәтте:

«Бынан ары былар менән осаһы булма. Улар бит — шайтандар менән туғанлашҡан бәндәләр. Уларҙы хоҙа үҙе ҡарғаған».

«Улай булғас, һинең атайың, йәғни минең ҡайным, ниңә улар менән һин дә мин әшнәлек итә ине?» — тип һораным.

«Атайым бары улар араһында түҙеп йәшәне генә. Бер ваҡытта ла улар менән дуҫ булманы. Улар ҡыланғанса гөнаһлы эштәр ҡылманы, — тип яуап бирҙе һөйөклө ҡатыным. — Хәҙер ул теге донъяла инде. Һинең ни ҡылһаң да, иркең бар. Теләйһең икән, бар мөлкәтебеҙҙе һатып, йыйылған аҡсаға кәрәкле тауарҙар алайыҡ та, шуны тейәп, һинең илеңә ҡарай сәфәр сығайыҡ. Мин һинең менән ер сигенә китергә лә ризамын! Атам

менән әсәмдән етем ҡалғас, минең яманаты сыҡ-ҡан был ҡалала бер көн торғом килмәй».

Мин, уның кәңәшенә тоғро булып, ҡайнатайым шәйехтән тороп ҡалған көллө байлыҡты йүн генә хаҡтарға һатырға керешеп киттем. Шул арҡала үҙем серегән байға әйләндем. Хәҙер инде юл ыңғайы берәй караптың был ҡитғаға килеп яғылаһын ғына көтөргә ҡалды.

Ай көттөк, йыл көттөк. Тик офоҡта бер генә карап заты ла күренмәне. Шул арала ҡаланың күп кенә кешеләре лә минең менән китергә дәрт-



ләнеп өлгөрҙө. Башыма үҙебеҙгә карап яһап алыу уйы килде.

Был ҡитғала иң ҡиммәт нәмә — ағас ине. Шулай ҙа мин, бик күп сығым сығарып, карап төҙөргә етерлек миҡдарҙа ағас һатып алыуға өлгәштем. Тырыша торғас, үҙем менән китергә тимтәлгән кешеләр ярҙамында бик ҙур, бик ныҡлы карап яһауға ирештем.

Башҡалар менән бергә мин уға үҙемдең көллө байлығымды, илгә ҡайтҡас һатырға тип йыйған барса тауарымды тейәнем, ҡатынымды ултырттым да беҙ тәүәккәлләп диңгеҙ сәфәренә сыҡтыҡ.

Көн йөҙҙөк, төн йөҙҙөк, диңгеҙҙәрҙән диңгеҙҙәргә, утрауҙарҙан утрауҙарға күстек. Ел һәр даим ыңғайҙан ғына иҫте. Юлда бәхет гел алдыбыҙға ғына сығып торҙо. Бына шул рәүешсә йөҙә торғас, көндәрҙең береһендә имен-аман килеш Баһру ҡалаһына килеп юлыҡтыҡ.

Мин, унда оҙаҡ тотҡарланыуҙы ҡулай күрмәй, оҙон-оҙон каруандар яллап, Бағдад ҡалаһына ҡарай юл алдым.

Бына һөйөклө ҡалама ла ҡайтып еттем, үҙ мәхәлләмә лә аяҡ баҫыу шатлығын кисерҙем. Үҙ өйөмдөң тупһаһын аша атлап инеү донъялағы бер ниҙәреңә биргеһеҙ оло бәхет тойолдо. Ҡәрендәш-ырыуым, яҡындарым, дуҫ-ишем ғәйәт тә шатланып ҡаршы алды. Үҙем менән алып ҡайтҡан тауарҙарымды келәттәргә тыңҡыслап тултырҙым. Шул арала туған-тыумасам минең етенсе сәйәхәтемдә күпме йөрөгәнемде иҫәпләп сығарғандар — йәмғеһе егерме ете йыл уҙған икән дә баһа! Улар инде минең был сәфәремдән иҫән ҡайтыуымдан тамам өмөт өҙөп бөткән булғандар.

Юл михнәттәренән тамам арынып, бер аҙ тын тартҡас, мин уларға ошо сәйәхәтемдә башымдан кискәндәрҙе бәйнә-бәйнә тәфсилләп һөйләп сыҡтым. Тегеләрҙең иҫтәре китте. Улар мине был юлы ла үлмәктән ҡөҙрәт көсө менән иҫән ҡалыуым айҡанлы тәбрик иттеләр.

Бына шунда ла мин — диңгеҙҙә булмаһын, ҡоро ерҙә булмаһын — ҡабат сәйәхәткә сығам тип аўыҙ ҙа асмаҫҡа анттар иттем. Өҫтәүенә йәшем дә байтаҡ ологайған бит инде...

«Эй ҡәҙерле туғаным минең йөк ташыусы Синдбад, — тине сәйәхәтсе Синдбад үҙенең фәҡир аҙашына, — күп һөйләп ғәмеңде биләгәнем өсөн ғәйеп итмә инде. Минең ғүмеремдәге иҫ киткес мөғжизәләрҙән ғибарәт булған ете сәйәхәтем бына шуларҙан тора».

Ошо рәүешсә сәйәхәтсе Синдбад менән йөк ташыусы Синдбад, әжәлдәре етеп, үлем уларҙы бербереһенән һәм яҡты донъянан айырғансы, бер туғандар шикелле, бергәләп бөтмәҫ-төкәнмәҫ шатлыҡ эстәрендә кинәнеп ғүмер һөрҙөләр. Шунан инде, тере ҡалғандарға оҙон ғүмер, тормош ҡыуаныстары теләп, был донъяны ҡуйҙылар.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


13
БЕРЕНСЕ СӘЙӘХӘТ

29
ИКЕНСЕ СӘЙӘХӘТ

45
ӨСӨНСӨ СӘЙӘХӘТ

69
ДҮРТЕНСЕ СӘЙӘХӘТ

97
БИШЕНСЕ СӘЙӘХӘТ

119
АЛТЫНСЫ СӘЙӘХӘТ

137
ЕТЕНСЕ СӘЙӘХӘТ



СИНДБАД-МОРЕХОД

*(на башкирском языке)*

Редакторҙары И. КИНИӘБУЛАТОВ, Р. БАЙБУЛАТОВ
Рәссамы А. ДИАНОВ
Художество редакторы И. ФАЙРУШИН
Техник редакторы Н. ЗАРИПОВА
Корректоры Ф. ИХСАНОВА

ИБ № 2070

Наборға бирелде 10.09.82. Баҫырға ҡул ҡуйылды 2.09.83. Ҡағыҙ форматы 70×108 1/16. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Офсет ҡағыҙы. Шартлы баҫма таб. 14,0. Шартлы буяу отт. 85,75. Учет.-изд. таб. 11,81. Тиражы 30 000 экз. Заказ № 235. Хаҡы 1 һум.

Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө-25, Совет урамы, 18. Башкирское книжное издательство. Уфа-25, ул. Советская, 18. Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1, Октябрь проспекты, 2.

1 һум.

